# АҠ ҠАУЫРҺЫН

Айһылыу Ғарифуллина
Гөлназ Котоева
Фәндиҙә Харрасова
Рамай Ҡаһир
Динә Талхина
Ғәлиә Кәлимуллина
Зөһрә Алтынбаева
Флүзә Мырҙабаева
Иҙел Хәлимов

# АҠ ҠАУЫРҺЫН

ЙӘШ ШАҒИРЗАР ТАУЫШЫ



ӨФӨ
«КИТАП»
1995

ББК 84 Баш
А 35

Төҙөүсеһе — Сафуан Әлибай

Авторҙар: Айһылыу Ғарифуллина, Гөлназ Ҡотоева, Фәндиҙә Харрасова, Рамай Ҡаһир, Динә Талхина, Ғәлиә Кәлимуллина, Зөһрә Алтынбаева, Флүзә Мырҙабаева, Иҙел Хәлимов.

А 35 Аҡ ҡауырһын: Шиғырҙар йыйынтығы. — Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1995. — 272 бит.
ISBN 5-295-01595-5

Башҡортостан «Китап» нәшриәте «Йәш шағирҙар тауышы» серияһын баҫтырып сығарыуҙы дауам итә. Сираттағы йыйынтыҡта һеҙ үҙенсәлекле йәш ҡәләм оҫталары менән осрашырһығыҙ. Шуныһы ҡыуаныслы: һәр шағирҙың үҙ моңо, үҙ тауышы бар.

А $\frac{4702110200 - 94}{М\ 121(03) - 95}$ 46—95 ББК 84 Баш

ISBN № 5-295-01595-5

© Ғарифуллина А., Ҡотоева Г., Харрасова Ф. һ. б., 1995

# АЙҺЫЛЫУ ҒАРИФУЛЛИНА

# ГӨРЛӘҮЕК





*Мин — Бөрйән ҡыҙы. Мәһәҙи тигән бик матур ауылда тыуып үҫкәнмен. Урта мәктәпте тамамлағас, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға индем. Студент йылдарында «Шоңҡар» әҙәби-ижад берекмәһендә актив ҡатнаштым. Шунан бирле республикабыҙ матбуғатында шиғырҙарым баҫылып сыға тора. Бөгөн мин тыуған яғымда төпләнеп, уҡытыусы булып эшләйем, йәш быуында әсә теленә, милли әҙәбиәтебеҙгә һөйөү тәрбиәләргә ынтылам. Ҡыҫҡаһы:*

*Урал батырҙың беҙ тоҡомонан,*
*Беҙ — бөрйәндәр, бергә бер йәндәр, —*

*тип ил ғәмдәре менән яныл-көйөп йәшәйем, хәлемдән килгәнсә дәртләнеп ижад итәм.*

*Атайсалымдың мәғрүр тәбиғәтенә, ғәзиз төйәгемә эскерһеҙ мөхәббәтем, замандаштарыма ҡарашым, өмөт-хыялдарым шиғриәтемдә сағыла икән — мин шат.*

**Айһылыу**

# I ЮЛ ЯПРАҒЫ

## БЕҘ — БӨРЙӘНДӘР

Урал батырҙың беҙ тоҡомонан,
Шүлгән батшаһының иленән,
Төпкөлдәрҙә ҡурай моңон һуҙа
Аҡбуҙаттың тояҡ еленән.

Аҡыҡ ҡаштай гүзәл күлдәремдә
Вальс әйләнә һомғол ҡамыштар,
Башҡорт көйөн көйләп, шишмәләрем
Агиҙелкәй менән ҡауыша.

Болоттарға морон төртә тауҙар,
Ҡайтауаздар шаңдай ҡаяла,
Ҡайындарҙың сулпыларын тартып,
Урынһыҙға елдәр шаяра.

Бал еҫтәре аңҡый болондарҙан,
Ҡымыҙ еҫе әкрен иҫертә.
Сал тарихтан тыуған бөгөнгөнөң
Кендеге бит бында киҫелгән...

Урал батырҙың беҙ тоҡомонан,
Беҙ — бөрйәндәр, бергә бер йәндәр.
Уйҙа ғына ҡайттым Бөрйәнемә,
Үҙем булдым айыу мендәй...

## ТИК ЯҘМАҺАСЫ ҺИНЕ...

Ҡарағайҙар — ғорур ағайҙарым,
Алъюсыктан ғына ҡырҡыла.
Ҡарурмандар хәҙер үтәтмә түн,
Ҡарурмандың туны йыртыла.
Ә ҡайындар — гүзәл еңгәләрем,
Ағыу йотоп баҫыу ситендә,
Күҙен түгел, йәйен ҡорой, ана,
Тут йүгертеп япраҡ битенә.
Ҡурай ғына үҫер биләмәне
Алабута алған, кесерткән.
Һандуғастар ташлап киткәс,
Ҡарға ҡарҡылдауы тилертә.
Күңелкәйем тартып, ҡайттым әле
Ҡарурманым буйлап атларға,
Тик яҙмаһасы һине, бер мәл килеп,
Ялан Бөрйәне тип атарға...

## ТӨПКӨЛДӘ БОҪОП ЯТҺАҢ...

Әсе тешләп бит алмамдан,
Ҡыуан еле ҡыуа эскә;
Алъюсыкҡа еләп тора —
Була күрһен ҡыуанысҡа.
Електәргә үтә еле —
Ышык урман — үтәтмә.
Һуңғы ағастан яҙырһың,
Төпкөлдә боҫоп ятһаң...
Ҡаҡлыҡтырыр ышыҡ ботһә,
Шашып-шашыр ҡыуандар ҙа.
Тубырсыҡ йөш түгеп илай
Ҡарағайҙар урмандарҙа...

## ИЛГӘ ҺИБӘМ

Аҡ бәҫ ятты сыбыҡ-сабыҡтарға,
Май киҫәге кеүек һыланып,
Шул ырыҫты һелкеп ерле-юҡҡа,
Ел йөрөгән булды ҡыланып.
Бәҫең киткән тиеп ғәйепләмәм,
Уҫалланма әле, аҡ ҡышым. —
Ажарлығың ғына өркөтә алмаҫ
Күңел яҙҙарымдың аҡҡошон.
Тыным менән түгел, йәнем менән
Иретәм дә ап-аҡ ҡарыңды,
Гөрләүеккә ҡушып, ергә һибәм —
Илгә һибәм йөрәк йырымды...

## КҮҢЕЛ КИТАБЫНДА ШИҒЫРҘАРЫМ...

Күңел китабында шиғырҙарым,
Үҙем генә белгән,
Юҡ уларҙы уҡып һоҡланыусы,
Юҡ уларҙан көлгән.
Күңел китабында шиғырҙарым,
Баҫылмаған ташҡа.
Йыуанамын: мәгдән дә бит тәүҙә
Боҫоп ята аҫта.

## МИН БИТ — БӨРЙӘН ҠЫҘЫ

Урман ҡыҙы бит мин — сихыр белә̣м;
Ысыҡтарҙы теҙеп нур ебенә,
Һөйөүҙәрең саф булһын, тип теләп,
Муйыныңа һинең сылбыр әләм.
Төпкөлдәрҙең ҡыҙы — серле үҙем,
Ҡурай моңон алһын әйтер һүҙем.

Хистәремдә әйтер телем йәшәй:
Ерем, икмәк, мөхәббәтем, әсәй!
Тауҙар ҡыҙы бит мин — горурмын да,
Тик бераүгә генә тоғромон да;
Тауҙар бейеклеге алға өндәй,
Халҡым бөйөклөгө — аҡ нур төндә.
Мин — тәбиғәт ҡыҙы — сихыр беләм,
Сихыр ҡайтарам, тип, йөҙәмәгеҙ.
Төнөн төшөп күңел биләмәмә,
Һеҙгә тигән йырҙы өҙәм әле...
Мин бит — Бөрйән ҡыҙы — сихыр беләм...

## УЛ УЙЛАМАЙ

Ярҙар ғына ҡалды өңөрәйеп,
Сарсап-һыуһап тамсы һыуға ла;
Сатнап емерелә яр ситтәре —
Ярҙам һорап ерме ҡуҙғала?
Һыуһыҙ ярҙар кот-ырысһыҙ иңрәй —
Мәрхәмәтһеҙ әҙәм балаһы.
Ул уйламай һис тә ҡасандыр бер
Ошо яр хәлендә ҡалаһын,
Һайыҡҡанда йылға һыуҙары,
Тәрәнәйә маңлай һырҙары...

## ЮЛ ЯПРАҒЫ

Юл япрағы — ҡәҙимге бер үлән, —
Һуҡмаҡ-юлға үсә түшәлеп,
Саф ысыҡҡа битен йыуалыр ҙа,
Көнө буйы туҙан эсәлер.
Юл япрағы — шифалы бер үлән,
Яраларға япһаң — уңала.
Ә бит кеше уға күҙ ҙә һалмай,

Иҙә тапап, алға юл ала.
Юл япрағы — ябай ғына үлән,
Барыр юлға үҫә түшәлеп.
Аңлай микән: үҙе өләшәнә
Үҙенән ҙур бурыс төшкәнен?
Юл япрағы — сағыу сәскә түгел,
Күңелдәрҙе арбап тормай ул.
Онотмаһын кеше: сәскәлеккә
Юл япраҡлы юлдан атлауын...

## ҠАЙЫН МЕНӘН КӘКҮК

Йәшел бәбәктәрен асып-йомоп,
Ҡараш ата шаян япраҡтар.
Тирә-йүнде сихри моңға күмеп,
Һаҡау кәкүк йырын таҡмаҡлай.
Тырышма ла, кәкүк, тоторға тип,
Мәрмәр тояҡ ҡайын ҡарашын;
Ул ҡараштар уңалта ла алмаҫ
Яңғыҙлыҡтың ауыр яраһын.
Япраҡ-бәбәктәрҙе туттар алғас,
Моңһоуланды ҡайын тағын да,
Тик кәкүккә ташлап осҡан уны —
Ботағына ҡуныр саҡырмай...

## ЯМҒЫР КҮҘЕ БУЛЫП АЛДЫМА ТӨШ...

Ярты айҙан ашыу яуындар юҡ —
Ярты айҙан ашыу саң-туҙан.
Ерем сатнап, ағас тамырылай,
Арҡырыға-буйға тартылған.

Ысык төшмәй борсоуҙарға һалды —
Япраҡ биттәренә көл ҡунған;
Был эле лә болоттарҙы ҡыумай,
Ял итергә булған, йонсоған.

Томорҡала ғына ыҙа сигә, —
Ергенәмә ямғыр теләйем:
Ямғыр күҙе булып алдыма төш —
Үтә ҡоро булды был йәйем...

## ИЛҺАМ АТЫМ ТЕҘГЕНДӘРЕН ӨҘӨП...

Ҡарағусҡыл күктә яңғыҙ Айым —
Ат бәйләрлек ҡаҙыҡ.
Ҡош юлылай тигеҙ түгел бер ҙә,
Шағир юлы — аҙап.
Дөм-ҡара төн. Йондоҙ-һүҙҙәр яна,
Ә Ай ята салҡан,
Илһам атым, теҙгендәрен өҙөп,
Һыпырылып ҡасҡан...

## ДУҪЫМА

Һиңыларҙы теҙеп ел ебенә,
Тағайымсы һинең муйынға.
Болоттарҙан ошо муйынсаҡтар
Һинең өсөн, ахыры, ҡойолған.
Сәстәреңә ҡояш нурын ҡушып,
Бер үрәйем әле таҫмалап;
Һинең өсөн ҡояш күктә ҡалған,
Болот-тирмәһенә ҡасмаған.
Ел — шуҡ егет, бөгөн сая түгел,
Һыҙғырынып йөрөй, моңайып. —
Бит алмаңдан үбеп алыр өсөн
Ҡыйыулығы етмәй, моғайын.

Йондоҙҙар ҙа бары һинең өсөн,
Бары һинең өсөн ҡабынған;
Мин һоҡланам һинең гүзәллеккә,
Ап-аҡ күңелеңә табынам.

## НИСЕК КИЛЕШҺЕН?

Йәйгор таҫмаһының сағыу төҫөн
Илаҡ ямғыр йыуа уңдырып;
Хыялдарҙың, ваҡыт үтеү менән,
Тоноҡланыуҙары шулдыр ул.
Йәйелә лә аҡ мамыҡтай томан,
Илата ла китә ҡырҙарҙы.
Ҡара ҡайғы сәсте көмөш итә,
Тәрәнәйтә маңлай һырҙарын.
Ыңйы кеүек кенә ҡырау төшә,
Ҡара көйҙөрөпкәй ерҙәрҙе;
Күңел сафлығына ҡара яға
Бәғзе берәүҙең эс керҙәре.
Бер генә ус бысраҡ йәмен ала
Ағып ятҡан кескәй инештең;
Шуның кеүек ауыр һүҙ ҙә нисек
Күңел яраһына килешһен?

## ЗАПАЙ ЕРЕ*

Запай ере. Һиңә үтеп индем,
Бил-бауырҙан үлән тирә-йүндә,
Елкәтәреңуттай яныш тора,
Өләсәйҙең тиҫбе-һиҙәбендәй.
Кеше генә түгел, януар-кейек
Белеп бөткән тыныс биләмәне,

---

* Запай ере — был яҡта Заповедник биләмәһен шулай атайҙар.

Ҡоштар менән бергә йөрәк һайрай,
Рәхәтләнеп урман гиҙәм әле,
Запай ере — атай-олатай ере,
Ҡалмаҫ тимә йәмдәр һиндә генә,
Кәртәһеҙ шул күңел, уйҙар һаҡһыҙ
Үтеп инә бирә йөрәгемә...

## ҺАРЫНА

Ике-өс баш һарына ҡаҙайымсы,
(Әсәй өйрәткәйне бала саҡта)
Һонтайышып әллә ҡайҙан тарта —
Алһыу-алһыу ғына сәскә атҡан.
Һәтте юҡ көс-таҫыл кәрәк икән,
Алтын эҙләгәндәй эй соҡондом;
Ныҡышмаллыҡ үҙенекен итә —
Ерҙән ҡаҙып алғас ҡына тындым.
Бала йөҙрөгөндәй ғына булыр —
Ҡулдарыма алғас һарынаны.
Ишетәмен төҫлө әсәм аһын:
Һарыналар бүтән ҡаҙҙыртмаһын...

## ТУҢМАҒАН ЕР

Туңмаған ер, ә ҡар ҡоторона —
Аҡ себендәр мыжғый һауала,
Быҫҡылдатып ерҙе, сирҡандырып,
Артынса уҡ ирей, яуа ла.
Туңмаған ер, ятмаҫ ҡар, билдәле,
Аҡ себендең генә шашыуы,
Ә шулай ҙа ошо сихри мәл бит
Баҫып ҡуя йөрәк асыуын.

Туңаҙытмай яуып-ireп тора
Бер күҙ асып йомған арала.
Алдыҡ һөйөүеңдән туңып барам —
Йөрәгемдә яра, яра бар...
Туңмаған ер, яуа, яуа ҡар...

## ЕРҘӘ САБЫЙ ТАҢ ТЫУҘЫ

Салҡан ятып, Ай-ураҡ
Күктә йондоҙҙар ура,
Урған саҡта, ялт та йолт
Осҡондар сәсрәп тора.
Етегәне — сүкеш бит,
Иш янына ҡуш тағы:
Семәрҙәр яһай күктә,
Йондоҙға йондоҙ ҡағып.
Ҡош юлынан Зөһрә ҡыҙ
Һыуҙарға бара микән?
Ерен күҙәтә торғас,
Күҙҙәре тала микән?
Нур шәлкемдәрен һибеп,
Ҡояш тауға артылды;
Аҡ саткылар уйнатып,
Төн пәрҙәһе ватылды —
Ерҙә сабый таң тыуҙы...

## БАШ ЭЙӘМЕН

Донъя — мозаика. Төрлө төҫтән
Ялғап-ҡоршалған ул — бер бөтөн,
Береһен дә ятһынмайым һис тә,
Ҡабул итәм уның һәр төҫөн:
Ҡара төҫө — ҡара тупраҡ инде,
Бөртөк төшһә, шытып сыҡмалы,

Шаулап-гөрләп үҫкән тук башаҡтар
Баҫыуҙарҙың билен һыгмалы;
Йәшел төҫө — йәшел болон инде,
Бала саҡта һәр кем аунап үҫкән,
Еләк-емештәрен йыйып,
Аллы-гөллө сәскәләрен йәнә еҫкәп;
Зәңгәр төҫө — зәңгәр һауа инде,
Өмөт булып һыҙа ҡояш нуры,
Хеҙмәт батырына ҡеүәт бирел,
Яҙын һабантурғай һуҙа йырын;
Ҡыҙыл төҫө — йөрәк ҡаны инде,
Яу ҡырында ауған яугирҙарҙың,
Тыныслыкҡа өндәп кешелекте,
Баш осонда байраҡ елберләйҙер;
Һары төҫө — һары һағыш инде
(Уларһыҙ ҙа йәшәү мөмкин түгел)
Ҡайғы-һағыштарҙы еңеп сыға
Түҙемлекте юлдаш иткән күңел;
Ап-аҡ төҫө — әсә һөтө инде,
Һәр беребеҙ көстө шунан алған,
Баш эйәмен изге ошо төҫкә
Йәшәйешкә башлап юлды һалған.

## ИГЕҘӘКТӘР

Шиғыр юлында аҙаштым —
Һуңғы юл ҡала инде,
Ҡәләмемдең ҡара ҡаны
Ҡағыҙға тама инде.
Имсәк һорап илай балам,
Ҡанһырай ҡараламам.
Яҙып бөтөлмәне шиғыр —
Баламды ала һалам.

Йәнгә ғәзиз икеһе лә,
Игеҙәктәр: йыр, бала.
Берсе алам, берсе һалам.
Сабырлыҡ бирсе, Аллам!

## ЙӘЙҒОР ТАҪМАЛАРЫ ЕТЕ ТӨҪТӘ

Йәйғор таҫмалары ете төҫлө,
Ете төҫтә яна емелдәп,
Ете төҫө ете йырым булып
Урын алған минең күңелдә.
Йәйғор таҫмалары ете төҫлө,
Бишек бауы нурҙан ишелгән;
Ер-бишек ул йәшәү йәме биргән,
Һүнмәҫ өмөт биргән кешегә.
Йәйғор таҫмалары ете төҫлө,
Йәш киленде һынар көйәнтә;
Сайпылмаһын берүк тамсыһы ла,
Тулы ҡайтһын бәхет күнәктә.
Йәйғор таҫмалары ете төҫлө —
Ҡауырһыны хыял ҡошомдоң.
Ете төҫө ете йырым булып
Алмаҫ тимә бер көн һушыңды...

## ҠАБУЛ ИТСЕ

Ҡулымда мин ҡәләм тирбәтәм, —
Бишек бауын тоям ҡулымда.
Теләк-хыялдарым изгенән:
Сабый шиғырымдың ғүмере
Өҙөлмәһен ярты юлында.
Ҡулымда мин ҡәләм тирбәтәм, —
Ер күсәрен тоям ҡулымда.
Шуға һаҡ булырға тырышам,

Изге теләк кенә уйымда.
Ҡулымда мин ҡәләм тирбәтәм, —
Алтын асҡыс тоям ҡулымда.
Эй, шиғриәт, тупһаң ашатлайым,
Ҡабул итһәңсе, үҙ ҡыҙыңдай.

## КҮҢЕЛ САФЛЫҒЫ

Аҡ бәхеттәр юрап орлоҡ сәстем,
Һары һағыш булды тиргәнем,
Тәлгәш-тәлгәш һары һағыштарҙан
Әле келтә бәйләп йөрөгәнем.
Усағымдан утлы күмер бирҙем
Йылы һорап килгән кешегә;
Яңғыҙ өшөп-туңдым, тик уларҙың
Булманы шул миндә эше лә.
Күңел ынйыларын тиреп һалдым,
Кәңәш һорап берәү килгәйне;
Йөрәккенәм һаман әрнеп һыҙлай,
Ауыр һүҙҙәренән имгәнеп.
Кешеләргә бәхет теләйем мин,
Шатлығынан булам шатлыҡлы.
Ғүмеремдең ахыр көнөнәсә
Тап төшөрмәй һаҡлай алһам ине
Күңел төбөндәге сафлыҡты.

## II ҠҮГҮЛӘНДӘ — ТОЯҠ ЭҘЕ...

### САҒЫЛЫШ

Шаян ҡыҙсыҡ, уйнап йөрөгәндә,
Гөрләүектә күрҙе сағылышын.
Ялбыр игеҙәктәр ағып китте,
Бер-беренә мәҙәк тағылышып.

Еткән һылыу һөйгән егетенең
Күҙҙәрендә күрҙе сағылышын, —
Һөйөү уты ялмап алған ине
Бөтә тәнен, хатта бар булмышын.

Уңған ҡатын бала ҡылығында
Күреп ҡалды үҙенең сағылышын,
Теләне ул, тормош юлдарында
Ҡуймаһасы, тиеп, яңылышып.

Сәстәренә ҡырау төшкән әбей:
«Эй, ғүмерем, — тине сағылышым, —
Бер күҙ асып йомған ара икән
Ҡанаттарың менән ҡағылышың, —
Эй, ғүмерем, ташлап осор ҡошом...»

## ҠАҘҘАР

Ап-аҡ ҡына мунсаҡ теҙмәһеме —
Тау түшендә ҡаҙҙар,
Томандарҙы телеп, тере сылбыр
Өҫкә үрләй һаман.
Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ. Шундай моңһоу был яҡ.
Ямғыр ҡоя ғына;
Ҡар яткас та мунсаҡ ҡойолорон
Ҡаҙҙар тоя һымаҡ.

## КӨН ЯМАНЫ КИТЕР...

Күгүләндәр дәррәү күтәрелде,
Төйөр төймә-бөрө күҙ асты;
Сәскәләр ҙә күккә үрелделәр,
Нур-сәсенә йәбешеп ҡояштың.
Матур килә йыл тип һөйөнгәндә,
Ап-аҡ ҡарҙар япкан ер өҫтөн,
Көмөш бөркәнсеген һирпә алмайса,
Аҡ сәскәләр тора бөрөшөп...
Көн яманы китер, тип йыуанам,
Тик йөрәктә шик-шом ярала, —
Көн яманы китер, китмәй торған
Әҙәм яманы бар донъяла...

## САБЫРЛЫҠ

*Хөснә инәйгә*

Донъялыкта ике ауыр нәмә:
Береһе — үлем, береһе — яңғыҙлыҡ.
Икеһенә тик бер генә дарыу —
Ғүмерҙәргә торор сабырлыҡ.

Ҡара ҡайғы ише менән, тиҙәр,
Әҙәм баштарына ишелә;
Шатлыҡтары ҡайғы менән йәнәш
Килә икән ниңә кешегә?
Ҡара ҡайғыларҙың аҡ күбеге
Услам-услам ҡылған — сәс икән.
Йөрәк, ҡайғыларын эскә йомоп,
Шатлыҡтарын ситкә сәсә икән.
Сабыр төбө — һары алтын, тиҙәр,
Һарылыр ул, һағыш һеңгәнгә.
Сабырлығым, һиңә бурыслымын
Ҡайғы-һағыштарҙы еңгәнгә...

## СЕҮ!

Томан-биләүенән ысҡынды ла,
Ысыҡ имеп, тамаҡ туйҙырҙы,
Был — Таң ине — алһыу йөҙлө сабый,
Татлы йоҡоларҙан торғоҙор...
Нур-ептәргә осҡон-ынйы теҙеп,
Күҙҙәренә шатлыҡ сигелгән,
Был — Көн ине — буйға еткән һылыу,
Серле кисен көтөп тилмергән.
Ялҡын теле кеүек ҡыҙыл эҙер,
Ваҡыт уҙыу менән уңалыр,
Был — Кис ине — сабыр холҡло әсә,
Ете үлсәп, тик бер ҡуҙғалыр...
Усағының ялҡындары һүнгән,
Йондоҙ-күмерҙәргә саң ҡуна,
Төн-өләсәй, йондоҙ-тиҫбе тартып,
Ғүмер түңәрәкләй яй ғына...
Сеү!..
Көлдә бешеп сыҡҡан көлсә төҫлө,
Төн пәрҙәһен йыртып, Таң тыуа...

## ТУРҒАЙҘАР

Тәҙрәнән турғай ҡараһа,
Ҡунаҡ килә, тиеп юрайҙар;
Кемде саҡыралар икән — ғәжәп,
Тәҙрәмде суҡый турғайҙар.
Саҡырһындар һигеҙ туғанымды —
Ынйыларын бер үк сылбырҙың,
Ҡоласымды йәйеп ҡаршыларға
Йүгереп тә тышҡа сығырмын.
Саҡырһындар бөтә дуҫтарымды —
Тамыр йәйгән улар йөрәктә,
Барыһына берҙәй һөйөү көсөн
Йөрәгемдә һаҡлап йөрөтәм.
Саҡырһындар, әйҙә, күршеләрҙе,
Ялҡытмайҙар улар һис ҡасан.
Һөйләшербеҙ тормош хәлебеҙҙе,
Ҡап уртаға һалып, исмаһам.
Саҡырһындар барыһын, барыһын да,
Кемдәр теләй беҙгә килергә,
Күңел шишмәм генә һайыҡмаһын
Ҡунаҡҡа сәй яһап бирергә.

## ҠАРАҒАЙҒА БАЛДАҠ КЕЙҘЕРГӘНДӘР...

Ҡарағайға балдаҡ кейҙергәндәр,
Өйөрөлтөп сабып ҡайырын;
Күҙ йәшенә ирек ҡуйып, ана,
Ул юйырға теләй ҡайғыһын...
Ҡарағайға балта теле менән
«Үлем» һүҙен киртеп яҙғандар,
«Йәшәү» тигән йәнәш торор исем
Аҡ сайыры булып тамғандыр...

Ҡарағайға балдаҡ кейҙергәндәр,
Йәшлек таңын туйлар мәлендә.
Ул, алданып, инде сараһыҙҙан
Балдаҡ кейгән һылыу хәлендә.
Ҡарағайға балдаҡ кейҙергәндәр...

## ҠОЯШЛЫ ТАҢ — ҒҮМЕР ДАУАМЫМ

Йондоҙҙарҙы өрөп һүндерәм дә
Теүештерәм ал таң усағын,
Ҡыяктарҙан һелкеп тәгәрәтәм
Ысыҡтарҙың көмөш борсағын.

Аҡ томанда мин күпертеп йыуам
Ҡайындарҙың йәшел бөҙрәһен,
Ҡояш нурҙарына сәскәләрҙе
Бәр муйынсаҡ итеп теҙәһем.

Ҡош юлынан көмөш Етегәнгә
Йондоҙҙарҙы һирпеп аламын,
Ай бәбәген йомдо — һүнде төнөм.
Ҡояшлы таң — ғүмер дауамым.

## ӨЛӘСӘЙҘӘР

Ситек-калуштарын ялтыратып,
Бишмәт тәңкәләрен сылтыратып,
Өләсәйем сәйгә килер ине,
Әкиәт һөйләп, күңел ынйыларын
Ләззәтләнеп беҙгә тирер ине...
(Бала саҡта, аҡыл ягы һайҙа,
Өләсәйҙән шөрләп тороу ҡайҙа?!)
Бишмәт тәңкәләрен ҡырҡа инем...

Яза бирер тиеп, тик шулай ҙа
Убыр-фәләндәрҙән ҡурҡа инем..
Өләсәйҙәр хәҙер башҡасараҡ —
Әкиәттәр һөйләп тормайҙар:
Алтын сылбыр алып ейәнсәргә,
Күңел ынйыларын урлайҙар...

## ИР ИНЕМ

Мин ирҙәрҙең илағанын күрҙем,
Күҙ йәштәрен ләкин күрмәнем.
Мин иланым үҙем, түҙмәнем,
Күреп ир-егеттең түҙгәнен.
Ҡатын-ҡыҙҙың илағанын күрҙем,
Күҙ йәшенә ҡуйып ирегән;
Матур һүҙҙәр табып йыуатҡанда,
Күңелемдән генә ир инем.

## АТАЙЫМА

Ҡарағайың тамыр йәйалманы —
Үҙ итмәне беҙҙең баҡсаны,
Йәшел керпектәрен, тутҡа манып,
Берәм-берәм өҙөп ташланы,
Өмөт бөрөләрен ҡырау һуҡты —
Китеп барҙың беҙҙең аранан.
Әйтерһең дә, ер тетрәтеп ауҙы
Ҡарурманда ҡарт бер ҡарағай.
Ҡарағайың тамыр йәйалманы...
Туғыҙ балаң — туғыҙ тамырың.
Ышан, атай, һинең төҫөң итеп,
Шаулап үҫер урман ҡалдырыр.

## КАЗБЕККА

Ҡурсаҡ кеүек ҡолон инәһенә
Тәнтерәкләп килде эйәреп,
Атай әйткән булды: «Алтмышта ла
Эйәрләр ҙә үҙем менәрмен...»

Йомро ғына тай шул Казбек инде —
Атайымдың һөйгән малҡайы,
Сит ерҙәргә яҙмыш алып китә
Бөтөнләйгә гәзиз башҡайын.

Казбек, Казбек — яуланмаған түбә,
Китте атай... Эйәр һалалмай.
Тояҡ эҙең күгүләндә ҡалды
Уйылып йөрәктәге яралай.

## III ЕР ЕЛӘҠҠӘЙҘӘРЕ ҠЕҮЕК МӘЛЕМ

### ЙӘШЛЕГЕМ

Йәшлегем, һин — төймәләнгән бөрө,
Наҙҙар көтөп күҙен асмаған;
Йәшлегем, һин — һандуғастың йыры,
Яҙ башынан арбай башлаған.
Йәшлегем, һин — йәшел япраҡ ҡына,
Бәбәк асып, йомған елдәргә;
Йәшлегем, һин — бәхет ап-аҡ ҡына,
Әйҙәп торған тыуыр көндәргә.
Йәшлегем, һин — гүзәл сәскә генә,
Саф ысыҡта йөҙөп, нур алған;
Аҡ ҡылғандар ҡаҙап сәстәремә,
Көҙөң етмәҫ борон ҡыуарма!..

### АЛАНҒЫРТ ТА ЕРҘӘ...

Аланғырт та ерҙә аҡ ҡайындар,
Һары сәсен һибеп елдәргә,
Аҡ тәндәре менән күҙҙе арбап,
Һыу ҡойона ямғыр көндәрҙә.

Алангырт та ерҙә аҡ ҡайындар
Аҡ нурҙарын түгә аҡ көнгә,
Алтын сыуаҡтар ҙа үтте инде —
Көндәр тартып тора һалҡынға.
Ҡарурманда йөрөп аҙашманым,
Алангыртта башым буталды,
Аҡ ҡайындар мине аңлар әле —
Йөрәгемде һөйөү — ут алды...

## ИКМӘК, БАЛА!

«Итәгең тулы балаң булһын,
Көлдөксәң тулы — икмәк». —
Апай шундай теләк әйтте,
Изгенән-изге икән.
Көлдөксәм юҡ, ҡәйнәмдекен
Үҙемдеке иткәнмен,
Күбеп килә күкрәктәгә
Йоп-йоморо икмәгем.
Икмәк, бала! Апай ҡалай
Сағыштырған бик тапҡыр.
Уйымдан бала китмәһен,
Телемдән — икмәк таты!

## ҒҮМЕР

Болан ғүмеркәйе — мөгөҙөндә,
Нисә сата — йәше шунсалыр;
Етеҙ елдәр менән уҙышҡандай,
Ғүмере лә елеп уҙалыр.
Ағас ғүмеркәйе — ҡулсаһында,
Нисә ҡулса — йәше шунсалыр;
Көҙөн елгә япраҡ ҡойолғандай,
Ғүмер-миҙгел осоп-осалыр.

Кеше ғүмеркәйе — йөрәгендә,
Йөрәк бирәү — ғүмер шунсалыр.
Керһеҙ йөрәк намыҫ ҡушыуынса
Ғүмер уҙҙырырға ҡушалыр,
Тормош мәғәнәһе — шундалыр...

## ҠАРАН

Сасҡауҙа ла туңмай ҡарап ята
Ҡара күҙҙәй ҡаран;
Күңелемдә ниҙәр — белгең килһә,
Ҡарандарға ҡара.
Боҫрап ҡына, ана, сығып тора
Ҡаранымдың быуы,
Ҡыш йылымыс, йәйен теш сәңкетер
Был йылғаның һыуы.
Ярҙы ярға тоташтырған боҙҙар
Күпер булып, ҡара.
Ҡауышалмаҫ икәү — арабыҙҙа
Һулҡып ята ҡаран.
Уңалмаҫтай, бөтәшмәҫтәй генә
Күңелдәге яра...

## ТАБА АЛҺАҢ...

Ҡаймаҡ-болоттарҙы тасҡай һалып,
Мин май итеп яҙам ҡояшты.
Зәңгәр күк — батмусҡа һалып бирәм,
Ҡабул итсе минең һый-ашты.
Йондоҙ-сәскәләрҙе тандыр утта —
Шәфәҡтә мин алдым һарғайтып,
Етегәнем менән һоҫоп бирһәм,
Алмай түҙерһең һуң ҡалайтып?

Ҡыйғас айым — ярты алтын балдаҡ,
Таба алһаң әгәр яртыһын,
Аҡ томандай туй күлдәген кейеп,
Юлдарыңа сығып баҫырмын...

## ҺИНДӘ ҠАЛАМ!

Мөлдөрәмә тулы һары һағыш
Күңелемдә. Уны ауыҙ итһәң,
Ҡыҙ башыма саялыҡты алам —
Ер сигенә һине алып китәм.
Ҡара болот кеүек ҡара ҡайғы
Иңдәремдә. Өлөш ҡабул итһәң,
Ҡыҙ башыма тәүәккәллек алам —
Ер сигенә һине алып китәм!
Шатлыҡтарым даръя түгел дә бит —
Тамсы-тамсы. Ауыҙ сылатһаң да,
Алып китәм һине ер сигенә,
Был аҙымым йөҙөм ҡыҙартһа ла,
Һөйөүгенәм тулы, тулы, тулы!
Тамсыһында уның бата ҡалһаң —
Ер сиктәре нимә менән өсөн —
Мәңгелеккә һиндә, һиндә ҡалам!

## ЕР ЕЛӘГЕ

Ер еләге ергә ереккән дә
Аллашдыра уймаҡ иренен,
Шул ирендәренән үбер өсөн
Урман буйҙарына кил ине.
Ер еләккәйҙәре еҫле генә,
Аңҡы-тиңке башым шул еҫтән;
Ал йөҙҙәрен ҡояш һипкелләгән,
Болот ыһйы һипкән көмөштән.

Ер елəккəйҙəре кеүек мəлем,
Күңелемдə — ысыҡ сафлығы.
Елəктəрҙе əсе килеш түгел,
Бешеп еткəс кенə татығыҙ...

## ЕР АЛМАҺЫ

Ер алмаһы — ерҙə яралғанмын,
Көнгə бешеп, елгə өшөнеп;
Һин уйлама, тыныҡ бəрелгəс тə,
Ҡулдарыма ғына төшə, тип.
Ер алмаһы — ерҙə яралғанмын,
Аҡ күбектə йөҙгəн яҙым бар.
Елдəр булып сəстəремде тара,
Өҙəм тиеп лəкин ҡағылма.
Ер алмаһы — ерҙə мөхəббəтем,
Йəшел генə сағым — үрелмə.
Əсе алма ҡаты төйөр булыр,
Ҡурыр ялҡындары һүрелмəҫ.
Бешə-бешə етəм көҙөмə, —
Ҡыҙыл алма булам үҙеңə...

## БЕҘҘЕҢ ҺӨЙӨҮ

Сылтыр-сылтыр йылға өҫтəренəн
Яҙын сыйҙым килə,
Тырнаҡ осом менəн исемеңде
Боҙға сыйғым килə.
Тешен шығырлатып, зəңгəр боҙҙар
Китə ыңғырашып,
Ирəталмам, ахыры, күңелеңде,
Һөйҙөм ниңə шашып?
Һары шəре йылға өҫтəрендə —
Мине һағыш алған.

Бары тороп ҡалыр ярмын,
Ә һин — ағын йылға.
Сасҡауҙарҙа йылға ҡалай туңған:
Яр ҙа, һыу ҙа тоташ;
Беҙҙең һөйөү яҙын иреп ағыр
Боҙ-күпергә оҡшаш...

## ҠЫРЫҪ АЙ

Ҡырыҫ тиҙәр Айҙы, туң тиҙәр,
Айҙа һағыш тулы, моң тиҙәр.
Ҡояш сағыу нурын ялатҡан,
Ер юлдашы итеп яратҡан.
Яңғыҙ түгел ҡырыҫ Айыбыҙ —
Ай янында Зөһрә атлы ҡыҙ.
Ер моңдарын унан ишеткән,
Йөрәккәйен әллә иреткән.
Ғашиҡтарҙың юлын яҡтыртҡан,
Һөйөү утын көслө балҡытҡан.
Ҡырыҫ Айҙың наҙлы миҙгеле
Ғашиҡтарға ғына билгеле...

## ТИК САТНАҒАН КӨҘГӨ ГЕНӘ ҠАЛДЫ

Тал — еткән ҡыҙ, күләүеккә ҡарап,
Ялбыр сәсен тарай тырышып,
Бөҙрәләрен тулҡын-тулҡын итә
Ел-егеттең көслө һулышы.
Тик сатнаған көҙгө генә ҡалды —
Талды ҡырҡып китте бер кеше.
Ел-егеттең инде сауҡаларҙың
Сәсе менән уйнап йөрөшө...

## НИҢӘ?

Ниңә, яҙмыш, миңә ҡаты булдың? —
Бәхет күнәктәрем ярты булды;
Кәкерсәкле һыу юлдарын үттем,
Күҙ йәштәрем менән тулы иттем.

Көйәнтәмә элһәм өмөт тиеп,
Ҡара ҡайғы булып баҫты мине;
Һары һағыштарҙан һығып алғас,
Шатлыҡтарым алтын саҡлы ине.

Ниңә, яҙмыш, миңә ҡаты булдың? —
Бәхет күнәктәрем ярты булды.
Үҙ ҡулдарым менән тултырғанға,
Күнәктәге һыуым татлы булды.

## Ә МИН ҺӨЙӘМ ҺАМАН...

Һин юлайҡан ғына йөрәгемә
Шаҡып киттең, ләкин ҡалманың,
Йөрәккенәм — һөйөү-утта бешкән
Ҡандай ҡыҙыл ғына алма бер.
Һин юлайҡан ғына күңелемә
Наҙ-орлоҡтар һибеп ҡалдырҙың,
Сәскә булып, улар шиңде инде,
Тик күңелемдә ҡалды тамыры.
Һин юлайҡан миңә килеп киттең,
Һөйөүеңдән ауыҙ иттереп.
Сарсағанда ниңә һыу булманың,
Ҡайнар ҡояш булып киптерҙең?
Ә мин һөйәм һаман, мин — тиле,
Ә мин һөйәм, тимәк, мин — тере...

## БИЗМӘН

Минһеҙ бәхетһеҙ бул, тиеп,
Ҡарғамайым-нитмәйем;
Бәхет — һиңә, ғазаптарын
Үҙем алып китәйем.

Минһеҙ донъяң түңәрәкме,
Тиеп теңкәңә теймәм,
Һиңә аҡтан күлдәк тектем,
Үҙем ҡараһын кейәм.

Минһеҙ ҙә һөйөләп-һөй һин,
Ләззәттәр татып кинән;
Минһеҙ — һин, мин — һинһеҙ бары,
Ах, тигеҙ түгел бизмән!

## БАЛА ХАҠЫ

Бала хаҡы — тотош ғүмер хаҡы,
Йәшәү хаҡы тағын — аҙмы ни?
Күпме ҡатын бала хаҡы өсөн
Киреһенсә яһай яҙмышын...
Ҡайғыларҙы эскә йомдора ул,
Ҡороттора әсе күҙ йәшен;
Бала хаҡы өсөн ярлыҡайһың,
Бала хаҡы өсөн түҙәһең.
Уйҙарыңдан кире дүндерә ул,
Хыялдарҙы килеп йүгәнләй;
Бизмән булып тора намыҫыңа,
Упҡындарға яҡын ебәрмәй.
Сыҡҡан юлдарыңдан кире бора,
Ҡайтара ул ҡабат ярҙарға,
Бала хаҡы. Әлдә һин бар әле
Һатылмаған тормош — баҙарҙа...

## ТАЯУ

Һынған ҡайын ҡарағайға
Терәлгән дә — ни гәжәп? —
Ғүмер көҫәп, бөрөләре
Япраҡ ярып киләләр.
Ҡырҡ йыл ғүмер итә, тиҙәр,
Ағас ағасты терәп.
Тормош — ыҙа, йәндәй кешеҥ
Була алмаһа терәк.
Һынған ҡайынға ҡарайым, —
Таяуһыҙ ҡалған мәлем.
Хәлемде аңлап болғаны
Алтын ҡайылған шәлен...

## ҠЫҘ КҮҢЕЛЕ

Ҡыҙ күңеле — туҡ тумалғы,
Наҙ бөркөлһә, күҙен асыр;
Нурың бөркөп аҙапланма,
Яҡтылығың булһа ҡыҫыр.
Ҡыҙ күңеле — серле һандыҡ,
Эсе тулы зиннәт кенә;
Асҡыстары — йөрәгендә,
Асам тимә кинәт кенә.
Ҡыҙ күңеле — моң даръяһы,
Сылтыр-сылтыр ағып ята;
Тау-таш булып юлын быума, —
Бер ҡарашы ташты вата.
Ҡыҙ күңеле — зәп-зәңгәр күк,
Уй етмәҫлек бейеклектәр;
Намыҫ менән ул яуланһа,
Был, исмаһам, егетлектәр.

## КӨҘГӨ ҺАҒЫШ

Күҙгә юлдар беҙҙе осраштырҙы,
Һәм күҙ менән һине алып китте.
Һары япрактарын һарылдырып,
Яраларға ямау һалып китте.

Күҙгә илаҡ көндәр менән бергә
Илай-илай төңөлөргә иттем;
Йондоҙом. тип, һиңә ымһынғанда,
Ҡояшымдан ниңә мәхрүм иттең —
киттең?

## ҠАРАШ

Ҡояш, ерән керпектәрен
Йыуып таңғы ысыҡҡа,
Иренеп бер ҡараш атты
Алыҫтағы офоҡҡа.
Шул ҡараштан болот ҡасты,
Йондоҙҙар йомдо күҙен,
Хатта ай ҙа ташлап китте,
Төнөн һаҡлаған күген.
Шул ҡараштан ер уянды,
Сабый ғына көн тыуҙы;
Ғорур ҡояш барыһын да
Көйҙөрөп һөйөү утында,
Бейек тауға артылды...

## ЮҠ, БУЛАЛМАНЫҢ

Юҡ, ҡалҡаным булалманың
Ел-дауылдарҙан һаҡлар,
Сибек кенә ҡәүҙәмде лә
Заман елдәре ҡаҡлар.

Юҡ, юлдашым булалманың,
Үтер юлдарың тигеҙ,
Һуҡмағымды үҙем ярам,
Ҡайғы-һағышым — игеҙ.

Юҡ, моңдашым булалманың,
Аңламаның күңелде...
Ҡурай булып мин иланым,
Орлоҡ булып түгелдем...
Илай-көлә яраттым да
Илай-көлә төңөлдөм...

## ҺУҢҒЫ ЕПТӘР

Арабыҙҙа — һуңғы ептәр,
Үҙем өҙәм, ҡулым барып.
Төйөндәрен ялғай-ялғай,
Бер яңғыҙым бөттөм арып.
Арабыҙҙа һуңғы ептәр
Өҙөлөргә сират көтә;
Йөрәгем ҡуҙына һалып,
Илай-илай үҙем өтәм.
Арабыҙҙа — һуңғы ептәр,
Ҡыл нәҙеклек кенә икән.
Гонаһтары — икебеҙгә.
Йөй эҙләмә инде ептән — еткән!

## ТИК ҺИНЕҢ ӨСӨН

Яңғыҙ кәкүк йырын һуҙа,
Был — минең һағыш-моңом.
Сабыр булһаң да, һағышты
Йөрәккә булмай йомоп.

Яңғыҙ сәскә күҙен асһа,
Ысыҡҡа битен йыуып —
Ем-ем иткән күҙ йәштәрем,
Уларҙы булмай тыйып.
Яңғыҙ йондоҙ — яҡты түгел,
Шулай ҙа нурын һибә;
Йөрәккенәм өҙгөләнә —
Тик һинең өсөн тибә.

* * *

Яҙ менән ҡыш һынай бер-берен.
Ала ҡарҙа ҡаты алыш бара:
Яҙ менән ҡыш һынай бер-берен.
...Күгүләндәр баш ҡалҡытҡан мәлдә
Ҡабат ап-аҡ ҡарҙа был ерем.
Тәбиғәттең ҡануындары ябай:
Ҡар башына етте ҡар килеп.
Күгүләнде ҡаплап ятҡан ҡарҙар —
Ҡайтмаҫ ҡышҡа булған кәфенлек...

## СУҠЛЫ ЯҘ

Ҡыйыҡтағы боҙбармаҡтар —
Суҡ-суҡ көмөш шәлкемдәр.
Тамсы ла, күр, бер бөтөндән
Суҡ-суҡ ергә сәселә.
Аҡ ҡайындың ботаҡтары —
Суҡлы-суҡлы бер бәйләм,
Ала-ҡола яҙғы ерҙә
Уйнайҙар әйлән-бәйлән.
Суҡ шәлкем умырзаялар,
Суҡ-суҡ кәзә һаҡалы;
Оҙон ботло һөтлөгәндәр

Бары суҡлы, алҡалы.
Суҡ-суҡ ырыҫ яҙғы ямғыр,
Йәйғор хасил суҡ нурҙан.
Суҡ-суҡ тос орлоҡтар менән
Дымлы бураҙна тулған.
Һабантурғай, эй сөйөлөп,
Суҡ-суҡ моңон тарата.
Күңелемә моңдар тирәм
Яҙғы һәр бер тарафтан!

## ГӨРЛӘҮЕК

Гөлдөр-гөлдөр... иллә бытый
Гөрләүек,
Көлдөр-көлдөр, яҙға көлөп
Инәйек;
Сылтыр-сылтыр йылға ҡалай
Моңлана,
Боҙ күлдәген атып бәреп
Ҡылана;
Йылтыр-йылтыр нур йомғағы —
Күләүек,
Яҙ ҡояшын ул бейетә
Кинәнеп;
Шаптор-шоптор ҡабалана
Шарлауыҡ,
Һыуҙар ташып, ярҙамлаша
Яҙға ныҡ;
Мөлдөр-мөлдөр тамсы илай
Ҡыйыҡта,
Һәр миҙгелдең сиге барын
Тойоп та;
Тимгел-тимгел яҙғы ерем
Йәшәрә,
Йәш бөрөләр күҙен аса
Йәшәргә.

ГӨЛНАЗ
ҠОТОЕВА

# СӘСКӘ БУЛЫП АТАЙЫМ





*Сал Үтәүел, мөһәбәт Ҡарантау, гүзәл Сыбартүбә итәктәренә һыйынып ултырған Оло Ҡыҙылдың бөтмәҫ сихри моңдарҙан ғына торған йырын тыңлап, үҙенең изге күңелле тырыш халҡы менән дан тотҡан Әбйәлил районы Ишҡол ауылында 1974 йылдың 1 ғинуарында атайым менән әсәйемдең шатлығына ҡыҙ бала булып донъяға килгәнмен.*

*11-се класты ошо ауыл мәктәбендә тамамлағас, БДУ-ның башҡорт филология һәм журналистика факультетының башҡорт-рус бүлегенә уҡырға индем. 1992 йылда ижади йәштәр конференцияһында тәүге китабым — «Сәскә булып атайым» тикшерелде һәм нәшриәткә тәҡдим ителде. Һеҙҙең күңелегеҙҙә тик яҡты хис сатҡыһы, йылы нур булып уйылып ҡалһам ине.*

*Гөлназ*

## ТАТЛЫ ҒАЗАП

Аҡ өмөттәр,
Хаҡ өгөттәр
Селпәрәмә килеп ватылды.
Яҡты янған,
Һушты алған,
Мин табынған йондоҙ атылды!

Атылды ла,
Ватылды ла
Ҡаҙалды уҡ булып йөрәккә;
Татлы һыҙлау.
Минең йырлау
Ауаздашын эҙләй һил күктә.

## ЯҢЫРЫУ

Төн йоҡомдо бүлеп илһам килә,
Ай нурынан кейеп күлдәкте,
Нескә билле һылыу бер ҡыҙ булып,
Ҡулдарымды тартып йөҙәтте.
Остом...
        Остом күккә.

Тәнем ҡалды
Ыңғыраштан һынған донъяла,
Минең унда ҡалған йәш бөртөгөм
Ай йөҙөндә, ана, ҡуҙлана.

## КИЛМӘНЕҢ...

Бурап-бурап тышта ҡарҙар яуҙы...
Моңһоу инем,
ниңә һиҙмәнең?
Ташлап киттең мине яңғыҙлыҡта,
Уттай яныш ҡалды эҙҙәрең.

Сыҙамайса ҡар тауҙары ауҙы,
Мин көткәйнем, һаман килмәнең,
Моңһоу сағым —
пар ҡанатлы саҡта,
Шатлыҡ булып күңел биҙәрһең.
Кил, йөме?!

## АРТЫМДАН КҮҘ ЯҘМАЙ...

Тағы бер яҙ,
тағы бер яҙ килә!
Йөрәгемдә тулы уй-һағыш.
Ҡыуаныстар ғына шатлыҡ түгел,
Һағыштар ҙа миңә ҙур табыш.

Өмөт, өмөт ярҙарымдан таша,
Наҙлап өмөт алыр яҙҙарҙай,
Артымдан һин ҡарап ҡалаң төҫлө,
Нисә йылдар аша күҙ яҙмай...

## ӨСМӨЙӨШ

### I.

Юлды ҡыйыр күҙҙәң моңһоулығы
Ҡыштыр-ҡыштыр йөрөй урамда.
Һаташҡандай, ыңғыраша урман
Һағышлы ла төшкә сумған да...

Майлы икмәктәй генә балҡый ҡояш,
Һуңғы балҡыш кемде йылытһын?
Мин өшөгән булам ҡалтыранып,
Көндәрем дә шундай болоҡһоу.

### II.

«Бәндәләргә бәлә итмә, аллам,
Ҡыйһаң, ҡый ҙа керһеҙ йәнемде», —
Өләсәйем һуңғы көндәрендә
Үҙ алдына шулай һөйләнде.

### III.

Көндәр үтә.
Күҙҙәр шундай моңһоу,
Һағыш диңгеҙендә — яңғыҙым.
Тәсбих итеп һинең һүҙҙәреңде,
Күр, өләсәй, яңы йыр яҙҙым.

* * *

Был миҙгелең, бәлки, онотолор,
Мин дә онотормон был хаҡта. —
Ай торғанын күктә, йондоҙҙарҙы,
Һинең әйткән һүҙҙәреңде
хатта —

Онотормон.

Тик ҡанымда ҡалыр
Яҙҙар еткән һайын яңырыу,
Яҙҙа ташып, яҙҙа ярһыныуҙар,
Яҙҙа килер һине һағыныу.
Тауышың да, бәлки, онотолор,
Юғалыуың булһа аҙ төҫлө,
Яҙҙар һайын һине һағынырмын —
Һине һаҡлай һаман яҙ төҫө.

* * *

Мин ҡарағa төрөнөп һиңә килһәм,
(Һары төҫкә ҡара килешә.)
Күҙҙәремдә — өмөт. Ҡулдарымда —
Күптән өҙөп, һүнгән миләүшә.

Йәшле күҙҙәремде һиңә төбәп:
«Онотолдоң!» — тиеп уфтанһам,
Ҡулымдағы шиңгән сәскәләргә
Башҡа берәү күреп уҡталһа —

Ҡосағыңа ал һин. Күҙҙәреңдән
Әйтер һүҙеңде лә beләмен,
Алдарыңа тик бер баҫыр өсөн,
Төрлө төҫкә төрөнөп киләмен.

## КӨҘГӨ ЭТЮД

Үкһеҙ генә етем йоҡоһоҙ төн,
Мин тағы ла киләм көҙгөгә.
Асыҡ тәҙрә. Күктә — тик ярым ай,
Ботағынан япраҡ өҙөлә...

Моңһоу ғына торған бер мәлеңдә
Тот та сәстәреңде өҙгәлә. —
Шундай йәмһеҙ кеүек күләгәләр,
Алдай кеүек хатта көҙгө лә.

Ишетелә аяҡ тауыштары,
Ә бүлмәлә һаман ай ҙа мин.
Тәҙрәләргә һине көтөп баҡтым,
Үкһеҙ төндә үҙең ҡайҙа һин?

## НӘСИХӘТ

«Ҡал!» — тип әйтмәнем. Үҙем
Ҡараным күҙҙәреңә,
Бөтә булған хистәрем бит
Сыгҡайны йөҙҙәремә.
Китеп барҙың. Ә мин ҡалдым.
Ауҙым кинәт йөҙ түбән.
Һин эргәмдә, мин — таш-ҡая,
Китһәң, эҙеңде үбәм.
...Сая тулҡын таш-ҡаяны
Үбә лә үбә икән.
Йылдар үткән...
Таштар әйләнгәс ҡамырға,
Тулҡын баҫҡан да киткән.

## ҒҮМЕР

Кисермәгән, күрмәгәнен кеше
Нисек яҙһын, бына бигәләш,
Ярамдан — ҡан, күҙемдән йәш һарҡа.
Бәхет?. Хәсрәт?
Йәле, билдәләш.

Ҡайғы, тиһәм, хатта тәрән ҡайғым
Әүерелә ошо шатлыҡҡа;
Шатланһам мин кеше аптыратам,
«Үрһәләнә, — тиҙәр, — был юҡҡа».

Ҡалһын әйҙә. Ҡалһын. Бутаһам да
Ҡараны аҡ, аҡты ҡара, тип.
Был донъяла йәшәп китер ғүмер
Бер тын менән үтер ара бит.

* * *

«Уян!» — тиеп, зиһенемде һелкәм,
Тик аҡылым күптән йоҡлаған,
Ә хистәрем — елгә ял таратып,
Бәхетенән шашҡан аҡ болан.

Керпегенә төшөп, ҡарҙар ирей,
Тояғынан үтә ут сәсеп.
Аҡ боланды ҡыуып Аҡыл йөрөй,
Ябынған да ҡара бөркәнсек.

*Рәхиләг*

Үлгәс кенә кеше ҡәҙерлерәк,
Үлгәс кенә кеше тәхеттә,
Үлгәс кенә килеп күк ирендән
Үбеп китә ярһыу бәхет тә.

Нимәгә һуң уға хәҙер бәхет,
Нимәгә һуң уға тәхеттәр,
Кемгә һуң ул әрнеү-әсенеүҙәр,
Йәмләнәме әллә ләхеттәр?!

Ҡабарып та ҡалҡҡан ҡәбереңдә
Ҡанат йәйеп үҫер ҡарағай,
Үҙең кеүек ғорур, төҙ булыр ул,
Ямғыр-ялағайға ҡарамай.

## ЫСЫНБАРЛЫҠ

Ошо туңған тәҙрәләргә бағып,
Йә, һин кемде көттөң өҙөлөп?
Өмөттәрем, һин тыныңды өргәс,
Йәштәр булып аҡты түгелеп.

Күҙҙәреңдән аҡҡан йәштәр кеүек,
Саф тамсылар ғәмһеҙ ялтырай,
Йөрәктәге һүнер-һүнмәҫ шәмем
Һуңғы йырын йырлап ҡалтырай.

Ҡарайым тип һинең күҙҙәреңә,
Ғәмһеҙ тамсыларға баҡҡанмын;
Ни тиклем дә һалҡын булмаһындар,
Уларҙан мин йылы тапҡанмын.

Бөттө инде, етте алданыуҙар
Елдән еңел ебәк хыялға, —
Иреп төштө тәҙрәләге һүрәт,
Хыял түгел, ҡояш ҡарауға.

## ОҘАТЫУ

«Һин китәһең», — тиеп, күҙҙәреңә
Тултырып та ҡарап булманы,
Юлдарыңа аҡ бәхеттәр һибер,
Йырға күмер көндәр тыуманы.

Китмә! Китмә!
        Һин бит һүҙһеҙ генә
Булмышымды алып китәһең,
Әйтер һүҙең булып, өндәшмәйсә
Йөрәгемде ниңә өтәһең?

Һин китәһең...
Юлда саҡырып торған
Мин дә өнһеҙ бәхет булырмын,
Йән дуҫтарың менән хушлашҡанда,
Йәш бөртөгөң булып торормон.

* * *

Һинең менән минең юлды бәйләү,
Беләм, егет, бик тә хәүефле. —
Тын да алмай үткән был көндәрем —
Бәйен өҙөп ҡасҡан ат төҫлө.

Хисһеҙ, юлда атым абынғанда,
Ни тип тамыр йәшем күҙемдән,
Һинең менән минең һүҙ берекмәү
Һис тә сәбәпһеҙҙән түгел дә!

## ТӨШТӘР КҮРҺӘҢ...

Сәскә йыя, тиеп төштәр күрһәң,
Һыуһағандыр күңелең наҙҙарға,
Көндәр үткән...
Йәшлек үтер, йәнем,
Ҡайтайыҡсы йышыраҡ яҙҙарға!
Сәстәремә ҡаҙа сирендәрҙең
Иң зәңгәрен, иң-иң суҡлыһын,
Һин атлап уҙ беҙҙең һуҡмаҡтарҙан,
Өшөтһә лә минең юҡлығым.
Зыңлап китер шул саҡ минең көлөү
Алыҫтарҙан, йыраҡ йылдарҙан;
Үткер ҡарашыңды тойоу менән,
Мин һаман да, имеш, ҡыҙарам.

* * *

Хыянатың тамһа йөрәгемә,
Шәмдән аҡҡан утлы тамсылай,
Һиңә генә ябыр бөркәүҙәр юҡ,
Туҙған йәнем үҙен ҡамсылай.

Минең ғазаптарым ҡамсы булып
Төшһөн, әйҙә, аҙғын йәнеңә.
...Ҡуҙғалып та ҡуйыр минең йөрәк, —
Йәнем бит һуң һинең күҙеңдә.

* * *

Мин онотһам ерҙә бәхет барын,
Һин хәтерләт ҡыштың барлығын,
Мин яратҡан ярһыу бурандарҙа
Хистәремә донъя тарлығын.

Ҡалала ҡыш...
Юҡ ул ҡалала ҡыш.
Бәҫле ағас, һалҡын таш йорттар...
Хәтерләт һин миңә ҡыш барлығын,
Бөтә ҡайғыларҙы онот та.

...Тышта тынлыҡ, мөлдөрәп ай ҡарай,
Сер ҡапҡасы серле тәҙрәнән;
Усаҡ ниңә ялҡын теле менән
Һуңғы шиғырҙарҙы һөйләгән.

Ҡала ҡала инде. Ауыл һымаҡ
Бөтә нәмә түгел ябайҙан.
Өтөп ала ҡыҫып сикәләрҙе
Үткән ҡышым һонолоп ҡарай ҙа.

* * *

Һинең күктән йондоҙ өҙөүеңә,
Күҙҙәреңә һинең ышанам,
Урғып ташыр ярһыу хистәремде
Тик аҡылым ғына ҡоршаған.

Йә аңларһың, йәки аңламаҫһың,
Әскелтем шул, йәнем, йәш балан,
Һутланған, тип, муйылдарҙы өҙмә,
Ялҡынланыр бер саҡ был ялан.

* * *

Ап-аҡ нурға табан
Ҡурай уйнап
Сыҡҡайным да, ал таң атҡанда.
Төш етмәҫтән атым ҡара янды,
Йәйәүләйем хәҙер аҫҡандап.

Ҡурай, ҡурай!..
Туңған бармаҡтарҙа
Сыңлап китер кискә аҡ нурым;
Һуңлай күрмә,
Ялағайҙан яныр
Күкрәк йырып сыҡҡан хаҡлығың.

## ИЛГИҘӘР

Йыйынам да тағы китәм,
Туҙып ҡалһын буяуҙарым;
Өтһә — өтһөн күңелемде
Тик бер ҡарап ҡуйыуҙарың.

Мәңгелеккә туҡтаным, тип
Уйлағайным, тағы китәм,
Йондоҙ кеүек атылмайса,
Туҡтап тороп булмай икән.

* * *

Борғолана юлдар,
ҡара йылан
Аяғыңа килеп уралмай,
Ҡурҡаһыңмы йәбешер тип быс(ы)раҡ,
Шундай һаҡ һин — хәс тә ҡоралай.

Ә мин шунда устарыма ҡыҫып
Йылытайым көҙгө тупраҡты;
Юҡ, был ямғыр түгел, һағыныуҙан,
Юҡһыныуҙан ҡайнар йәш аҡты.

Борғолана юлдар.
Күңелем дә —
Күҙ ақтарып киткән бураҙна;
Ҡоралайҙар ҡалыр төбәк түгел,
Саҡырмасы, күңел, ҡуй, аҙма!

## ХИСТӘР КӨЛТӘҺЕ

Талдар, талдар,
Йөрәккә юҡ ялдар,
Һағыныуым һеҙҙе ирекһеҙ,
Тыуған яҡтың илаһи бер йәне,
Һылыу ҡыҙҙар ғына кеүек һеҙ.
Ҡыҙҙар — ҡаҙҙар,
Оса ла китәләр,
Күтәрәләр инде бөтәһен.
Ни булыр һуң, талдар бөг(ө)лөп төшһә,
Тыуған яҡтың хистәр көлтәһе...

## КҮКРӘНЕМ...

Туғажманың *...
Минең Сыбартүбәм **.
Ҡаяларын уның елдәр үбә,
Елдәрҙең дә еле туған итә,
Түгел дә был йөрәк бер таш күбә.
Туғажманың...
Минең Сыбартүбәм.
Оҡшағандар. Һүҙ юҡ, парҙармы ни,
Бәйләнгәндәр йөрәк сере менән
Бер беҙ түгел, улар аҙҙармы ни?!

---

* Туғажман — Баймаҡ районы Төркмән ауылындағы тау.
** Сыбартүбә — Әбйәлил районындағы тау.

Туғажманың...
Минеке лә хәҙер,
Ике йөрәк кеүек күкрәгемдә.
Береһен ат, үлер икенсеһе. —
Мин — һинеке, тиеп күкрәнем дә.

* * *

— Үкенерһең...
— Эйе, үкенермен, —
Ғүмер үтә, тормош бирәү бит;
Ҡолаһам да, ҡурҡма,
ышан миңә,
Үҙеңә һин яҡын тирәү ит!

Шунда ғына мин дә ышанырмын,
Үкенескә генә булһа ла,
Мин йәшәйем,
Һин йәшәйһең, тиеп,
Беҙ йәшәйбеҙ, тиеп донъяла.

### САҒАН ЯПРАҒЫ

Ниңә генә, ниңә буташтырҙың
Алтын көҙҙө ап-аҡ ҡыш менән?
Бер миҙгелдә көндәр сыуалышҡан,
Алтын көҙгә аҡ тун юш килгән...
Ап-аҡ ҡарға япраҡ ятып илай,
Тупрағынан миҙгел айырғас,
Елдәр уны төрлө ергә ташлар,
Туҡтар өлө бирәй, арығас.

Ә Ер-Әсә ғәмһеҙ ҡаламы һуң
Балаһының шундай зарына?
Иҫләп кенә, йыуатҡандай итеп,
Аҡ тунынан миҙгел арына.
Тынысланып торор әрһеҙ елдәр,
Ҡышҡы тынлыҡ баҫыр ер өҫтөн,
Саған ботағында тик бер япраҡ
Хәтерләтеп торор күҙ төҫөн.

## МИНЕҢ ЮЛЫМ

Мин аңланым һуңғы ваҡыт:
Хисһеҙ менән түгел юлым.
Был күңелем — дала иңләп
Һаҡһыҙ ғына сапҡан ҡолон.
Бөтәһенә ышанам мин,
Бөтәһенә тигеҙ йылым;
Тик аңланым һуңғы ваҡыт —
Хисһеҙ менән түгел юлым.

## АЙСТАН

Ирәндектең ҡайнар ҡуйынында
Һин балҡыйһың әле, Айстан.
Айлы кистә гармун телдәре лә
Моңон түгә яҡты һағыштан.
Шул йәйләүҙең серле бер төнөндә
Ике ғашиҡ шып-шым көлөштө.
О, сихри төн, һин шаһитһың быға,
Һиптең генә алтын, көмөштө.
Йәш япраҡтар дер-дер ҡалтыранды,
Елдең сихри һүҙен ишетеп,
Йондоҙҙар ҙа ул төн йылмайышты,
Йәп һөйгәнен юлдаш, иш итеп.

Ә ҡайындар, сибәр ҡайынҡайҙар
Серле күккә ниҙә үрелгән?
Мөхәббәтле, мәңге йәшел ергә
Тик шатлыҡтар, тик моң түгелгән.

## ЯЛТЛАР ЙӘШЕН

Һағыныуҙарҙың зәңгәр йәштәрендә
Иреп төшмәҫме, тим, һары ай,
Һағыныуҙар минең тормошомдор,
Һағыныш та үтә ғүмер, һай!
Мин ярһыу бер тулҡын була беләм,
Була беләм осҡор аҡсарлаҡ;
Күңелеңә мине лә ал, тиеп,
Төн йөҙөнә атыла ябалаҡ.
Йылғаларға төшөп ҡойонғанда,
Тағатҡандыр айым ал сәсен.
Тормош бит ул күкрәүҙәргә тиңдәш,
Кеше ғүмере — ялтлар күк-йәшен.

## АҢЛАЙЫШҺЫҘ ТӨН

Ҡыштың бөгөн әллә ниндәй төнө:
Үҙе яҡты, шаулай буран да.
Ошо миҙгел кеше кеүек инде,
Иләҫ-миләҫ ҡалған сағында.

Урмандар ҙа серле, шомло түгел,
Ҡар бөртөгө йәмен юғалтҡан.
Әллә ҡышым, бына минең кеүек,
Һөйгән йәрен юлға оҙатҡан.

Асыулы ла, һөйкөмлө лә үҙе,
Яҡын да ул минең күңелгә;
Мин үҙем дә уның кеүек бөгөн:
Йондоҙһоҙ төн — күңел күгемдә.

## ҮПКӘ

Йәмһеҙ булһын, әйҙә, йөҙҙәрем дә,
Нур сәсмәһен ҡабат күҙҙәрем,
Хистәрем дә тотҡон булып ҡалһын,
Кәрәкмәй ҙә назлы һүҙҙәрең...
Көндәр үтер. Шартлап һынған күпер
Ағып китер ташҡан хис буйлап,
Икегеҙҙе уйлап йылмайырмын,
Әллә уйнап, әллә ысынлап.

## МИН КИТҺӘМ...

Аралар ҙа алыҫ,
Күперҙәр юҡ,
Күңелдәрҙең ҡупҡан ишеге,
Йөрәгемдең һағыш-моңдарынан
Ҡара көйгән күңел бишеге.
Көйөң дә юҡ, татлы һыныҡ өн дә,
Был тынлыҡтан.түңһә үлерһең.
Әгәр китһәм, яңы бер моң эҙләп,
Мин юҡлыҡты, бәлки, һиҙерһең...

## АҘАШҠАН ЙОНДОҘ

Йондоҙлоҡтан осоп йондоҙлоҡҡа,
Эҙҙәреңде, йәнем, эҙләнем.
«Көт мине!» — тип, китеп барһаң да һин,
Ҡаршы остом, бына түҙмәнем.
Тетрәндеңме, минең ялҡынымдан
Һүнгән йондоҙҙар ҙа ҡабынды;
Эҙҙәреңдә үҫкән сәскәләргә
Мин йәнеңдәй күреп табындым.

Сәскәләрҙән, сағыу осҡондарҙан
Ҡамашты ла күҙем юлымда.
Гөлләмәмдә ҡыҫтым күкрәгемә,
Күмер булһа-булһын ҡулымда!

## АТАЙЫМА

Таң һарыһы... Өҙөлөп-өҙөлөп
Һайрай һандуғас.
Йоҡлай алмай сығаһың һин,
Яҙғы төн тыуғас...

Сөм-ҡара изге тупраҡҡа
Алтын һибәһең,
Ер-Әсәнең һәр һулышын,
Уйын һиҙәһең.

Игенсе — һин. Ер улыһың,
Йырлы йөрәгең,
Башаҡтар сығарған мондо
Аңлай беләһең.

Игенсе һөнәренә мин
Күрәм хөрмәтте;
Яныргa ла, көйөргә лә
Атам өйрәтте.

* * *

Йәйҙең хушлашыу вальсында
Өйөрөлә япраҡтар,
Үткән ғүмер ҡайтмаҫ, тиеп
Улар илай һымаҡтар.

Айлы төнөм, алтын көҙөм,
Өйөрөлә япраҡтар, —
Алтын һағыш яуа ергә,
Сыбарлана һуҡмаҡтар.

Өйөрөлә, өйөрөлә,
Өйөрөлә япраҡтар...
Үткән ғүмер ҡайтмаç шул, тип
Улар илай һымаҡтар...

## МИНЕ ҺАТМА!

*Тәнҡит*

Был һүҙҙәрем өсөн мине атма,
«Ни яҙҙың?» — тип һорап һүҙ атма,
Гөлдәр булып балҡып сәскә атма,
Үткән яраларҙы ҡуҙғатма!
Һатма!

## ҺУҠЫРЛЫҠ

Иң тәүге һүҙ әле әйтелмәгән,
Атланмаған алға аҙым да,
Ҡыштарҙың да һыуыҡтары алда,
Сыуаҡтарҙан-сыуаҡ яҙым да.
Иң һуңғы уй әле уйланмаған...
Тормош нимә? Ярһыу бер даръя!
Шул ипкынды ҡосор ярһыу ғашиҡ
Һүҙҙә генә... Ул бит...
Ул — ялған.

...Кеше меҫкен. Шундай онотолған,
Ваҡлыҡ күмгән уны тормошта.
Ә уның бит ерҙә йәшәүҙәре
Сарыф була төрлө йомошҡа.
Ҡараңғы төн... Бер кем белмәй әле
Оло юлдың ҡайҙа илтәһен.
Ә һин, Кешем, ҡатып ҡалаһың да,
Кемдер етәкләр, тип көтәһең.

* * *

Ҡайғыларҙы муйыл кеүек тирҙең,
Аһ, тулды ламы ни силәгең?
Ә мин бына ерҙән еләк таптым,
Күҙҙәң сере шулдыр, күрәһең.

...Донъяла һин юкһың. Әле генә
Тыңлағайным моңло йырыңды;
Силәгең дә бына түгелеп ята,
Ишетелә шауы йырыңдың.

## ЮҒАЛТЫРМЫН КЕҮЕК

Йыр яҙырмын берәй ҡара төндә,
Һин булмаҫһың минең эргәлә.
Ҡәҙерләне бик тиҙ юғалтам мин,
«Ғүмерлек», — тип Алла бирһә лә.
Кәрәк булмаҫ миңә бер нәмә лә
Һинең хаҡта йырҙан башҡалар;
Яңғыҙлығым мине ҡосаҡлаһа,
Иңрәп ҡуйыр шул сак таш ҡала.
...Юғалтырмын кеүек һине шулай...

* * *

Их, уфтанма,
hинең hыҙланыуың
Йөрәгемә күсә, hылыуым.
Мөхәббәтем — томан,
томан ярып,
Тып-тын ғына китеп барыуым.
Шарт-шорт hына ағас ботаҡтары,
Усаҡтарҙа шартлай, ялҡындай;
Усаҡ яна, сәсәп төтөнөнә
Бөгәрләнгән күңел, бер туҙҙай.
Бар моңдарҙы ҡанат менән hөҙгән
Түгел дә hуң hөйөү күбәләк!
Туҙҙай дөрләп янhам был ялҡында,
Юғалыр шул зәңгәр түңәрәк.
Сәбәләнер ерҙә йән бирә алмай,
Ҡанаттары көйгән күбәләк...

## МӨХӘББӘТ

Стеналарға бәрәйемме башты, —
Йәнем шашып күккә атыла;
Сөйнәп өҙөр инем был сиктәрҙе,
Хәлгенәм юҡ, бигерәк ҡаты ла.

Бикләнгәнмен hинең ҡарашыңдан,
Йәштәрем дә тора бикләнеп;
Шишмә генә булып ағыр инем,
Ирекhеҙҙән бир тик бер ирек.

Бикләнгәнмен hаҡhыҙ ҡағылыуҙан.
(Тик кешене мин бит яратам!)
Мөхәббәттә юҡ шул аймылыштар,
Йүгәнләнгән тайҙай, йөк тартам.

* * *

Ҡарайым да ҡатам күҙҙәреңә:
Ҡайҙан һиндә шундай зәңгәрлек?
Күлдән алдың мәллә серлелекте,
Тамсыһын да түкмә.
Ғүмерлек.
Ошо һинең зәңгәр күҙҙәреңә
Ҡарайым да тағы ҡатайым,
Йә булмаһа, һинең ҡарашыңдан
Зәңгәр сәскә булып атайым.

## ТЕТРӘНЕҮ

Тормош, тормош,
диңгеҙ булһаң,
Тотош даръя мәллә һыуҙарың?!
Әйтерһең дә, мәлең —
сая тулҡын,
Күмелеп тә ҡала уйҙарым.
Тормошом, тип атап бар донъяһын,
Ҡосаҡларға уны уйланым;
Ҡосағыма һыйып бөтмәгәнгә,
Тетрәнеүҙән үкһеп иланым.
Һис бер әҙәм мине ишетмәне,
Даръя ҡайнап, йәшем тамғанды;
Тулҡындар ҙа,
ғәмһеҙ кешеләрҙәй,
Тыныс ҡына үтте янымдан.
Тормош... Тормош...
Һинең тәрәнлектә
Һәр бер ташың —
миңә ҡаршылыҡ;

Яманлыктар сыҡҡан сурайышып,
Ылымыктай ғына яҡшылыҡ.
Изгелектәр бында ҡабырсаҡтай,
Ышанырға кемгә,
белмәйем...
Һыймаһаң да минең ҡосағыма,
Мин һыйырға һиңә теләйем.

## ҺАҒЫНҒАНДА

Күгәрсендәр төшкән пәрҙәләрҙе,
Әсәй, тағы тәҙрәләргә эл дә!
(Өй эстәре ҡапыл яҡтырғанды
Тойоп алыр сәскә атыр гөл дә.)
Мине көт һин. Тик алып элә күр
Теге пәрҙәләрҙе һандыҡтан;
Икәү генә, әсәй, серләшербеҙ,
Гөрләп сәй эсербеҙ танһыҡтан.
Һин иҫләрһең, әсәй, йәшлегеңде,
Мин — сәсеңдең иркә бөҙрәләрен...
Яңы тулған ай яҡтыртып торор
Беҙҙең өйҙөң зәңгәр тәҙрәләрен.

## ҠЫШ МЕНӘН ХУШЛАШЫУ

Тамсы тама — туп-туп...
Илаумы был? Юк, юк...
Ҡыш еңелгән көрәшселәй,
Ауыр ҡарҙан ер әрселә.

Тамсы тама — туп-туп...
Ҡоштар ҡайта туп-туп.
Эй быуылып илай ҡышым,
Еңелеүе микән ошо?

Мин йыуатам,
килерһең бит,
Тағы шатлыҡ бирерһең, тип,
Һинһеҙ яҙҙар, наҙҙар килмәй,
Күңел шатлыҡ, йырҙар күрмәй.

Тамсы тама — суп-суп!
Иламайым. Юҡ! Юҡ!
Һиңә тағы килермен, ти,
Ҡосаҡ илһам бирермен, ти.

* * *

Ярылды ла кәсә төшөп,
Сәсрәне ватыҡтары,
Аяғымда бер ярсығы —
Һыҙланған ваҡыттарым...

Ярылды ла өмөттәрем,
Көйөнгән ваҡыттарым.
...Тағы көтәм. Ҡулдарымда
Өмөттөң ватыҡтары...

## ҺАҒЫШЛЫ МИҘГЕЛ

Тормош — китап кеүек,
Көндәр — биттәр,
һәр береһен асһаң —
мөғжизә;

Күҙ алдымда тора үткәндәрем,
Киләсәктең тынын мин һиҙәм.

Асылырмы, асылмаҫмы был бит,
Етерме һуң быға көндәрем;
Бер битенән кипкән сәскә тапҡас,
Йәшләнде лә ҡуйҙы күҙҙәрем.

* * *

Алыҫҡа китер был көндәр,
Быуаттар төпкөлөнә,
Хатта килер көндәрҙән дә
Тороп ҡалыр көл генә.

Тик юйылмаҫ, йәнем һаҡлар
Һинең күҙеңдең төҫөн;
Ноҡот ташы һалғанында,
Тик минең һөйөү төшһөн.

Алыҫта ҡалыр ғазаптар,
Тик йәшәү — берәү. Төшөн!
Шул берҙән-бер ғүмереңдең
Булайым бәхет төшө.

* * *

Эй, ҡыйғас ай, һин — бер генә нөктә,
Бер бөртөк миң һылыу күкрәгеңдә;
Мин бер үҙем. Миндәй, һин бер үҙең
Дарья кеүек һағыш түпрәһендә.

Йондоҙҙарҙың аралығы киүек,
Аралар ҙа алыҫая бара,
Алыҫая бара күңелдәргә
Күңел илтер, йылы бирер ара.

Мин бер үҙем. Миндәй һин бер үҙең,
Һулҡ-һулҡ итә күкрәгемдә ярам;
Күңелдәргә туҡ-туҡ ишек ҡағып,
Минме кешеләрҙән биҙә барам.

Юҡ! — тием. — Юҡ! Күпме шаҡыһам да.
Туңһалар ҙа тилбер бармаҡтарым,
Бер йылмайыу ғына иретә бит,
Яҙыла ла китә ҡанаттарым.

* * *

Изгелек тип атылғанда,
«Һөйөүем...» тип ватылғанда,
Ҡараманың әйләнеп тә,
Ишек шартлап ябылғанда.

Ҡараһаң да, күрмәгәнмен,
Өмөтөмдө өҙгән мәлем...
«Өмөтһөҙ йәшәү юҡ», — ти ҙә
Өҙгөләнә ерҙә йәнем.

## ҺАУ БУЛ, ЕРЕМ, ӘГӘР...

Ике йондоҙ, ана, күҙ ҡыҫышты,
Берәү ауҙы берәү ҡосағына,
Йондоҙҙарҙың кискән яҙмыштары
Шәүлә булып төштө усағыма.

Бейектәргә осто ҡанатланып,
Орсоҡ ҡына булып осҡонсоҡ.
Оста һүнде. Осо ғына ҡалды,
Осмаҫ башҡа зырлап ут-орсоҡ.

Күгем, ерем, минең яҡҡан усаҡ,
Яғыр сатырҙарым ҡосаҡ-ҡосаҡ.
Күңел — күктә, ә мин Ерҙә ҡалам;
Һау бул, Ерем, әгәр икәү осһаҡ!..

# ФӘНДИҘӘ ХАРРАСОВА

# ЛӘЙСӘН ЙЫРЫ



3 Заказ 26



*«...Тау башында ултырғандыр беҙҙең ауыл...»* *Үҙем менән таныштырыуҙы Туҡайҙың ошо юлдары менән башлап китеүем юҡҡа түгел. Нәҡ беҙҙең ауыл тураһында әйтелгән кеүек. Зәңгәр күлдәре, йәйрәп ятҡан йәшел хәтфә болондар, йәшлек хәтирәләрем һарылып ҡалған ҡайынлыҡтар, бала сағымдың эҙҙәре һаҡланған йәмле Сәрмәсән буйҙары — минең тыуған төйәгем. Асыҡлап әйткәндә, Благовар районының Төркәй ауылы. Белемем — Өфө медицина училищеһы һәм Башҡорт дәүләт университетының хоҡуҡ белеме (юридик) факультеты.*

*Ижадым — рухи донъямдың сағылышы. Һәр шишмәнең үҙенең тауышы, моңо була. Минең лирикам һағыш һәм һөйөү хистәре менән һуғарылған. Кешенең ысын мәғәнәһендә кеше иткән тойғолар бит улар. Шиғыр һөйгән кешеләргә өмөтөм ҙур: ниндәй генә замана килһә лә, шиғриәтте үҙ иткән һәм һаҡлап ҡала алған халыҡ, ул — киләсәкле халыҡ. иҫәнлек-һаулыҡ, сабырлыҡтар теләйем мин уға...*

*Фәндиҙә*

* * *

Шарап ҡойҙом һыңар бокалыма,
Ай ҙа килде табын уртаһына,
Быҫҡып янған шәмде һүндерҙем.
Аулаҡ өйҙә байрам тантанаһы,
Түгелептәр килә бер илағы,
Миҙгелдәрен барлап ғүмерҙең...
Бокалым буш, ай ҙа моңһоу ғына
Урынынан инде ҡуҙғалды.
Хәләтемдең үҙ тукһаны тукһан:
Туҡтасы, тим, емерелмәҫ йыһан,
Йәшәп торор әле, үҙ аллы.
Яҡтырт әле, һүнә йәшәү сәмем,
Төн йылыткыс ҡына бары хәмер,
Хоҙай, көнөң шуға ҡалдырма.
Мин, хыялый, беләм, әй замана,
Төшалманым шул ҡубыҙыңа,
Биш баҫһаң да килеп алдыма.

* * *

Ялангас ҡалғандай тәлгәштәр,
Ҡаҡ ергә һибелгән миләштәр.
Шул елдәр уларҙы ҡойғандар,
Бәғзеләр тапап уҡ уҙғандар.

Балланһып тиеп һут эсеһе,
Ымһынып торғандар ҡайһыһы.
Иҙелгән, ҡәҙере ҡалмаған,
Миләштән таш асфальт алланған.
Тәбиғәт аралай ник шулай
Иң сағыу төҫтәрҙе аямай,
Ҡағылыш-һуғылыш елдәрҙә,
Яланғас бер миләш тирбәлә.

* * *

Ваҡыт өнһөҙ, шаһит була алмаҫ,
Башын һалып, ҡайҙа кем тынған?
Был эйәһеҙ биләмәне һаҡлай
Һоро сысҡан менән аҡ ҡылған.
Ҡайбер ерләнеүҙән ҡалған түмгәк
Оҡшамаған хатта ҡәбергә.
Ниндәй йәндәр дусар булды икән
Онотолоу тигән йәбергә?
Ҡайһыһында исем ташы ла юҡ,
Һанлана һуң кемдәр заманда?
Һаҡланалыр, бәлки, исем-аттар
Баһаланыр шөғөл ҡалғанда?
Донъялыҡта беҙ тик ҡунаҡ, тимәй,
Бер татыһа нужа хәмерен,
Рәхимһеҙлек тигән хәпйәр менән
Бәндә телә бәндә бәгерен.
Йәшәгеләр килә — юҡ ҡыҫтаусы,
Ризыҡ-тәгәм бөткәс табында.
Эштән бигерәк кешең ҡалһын икән
Теҙләнерлек ҡәбереҥ янында.

## ТӨНГӨ МАНЗАРА

Август төнөн йондоҙ атылғанда
Беҙ ҙә булдыҡ бәхет юрарға.
Эштәр бөткәс, әни менән икәү
Етәкләшеп сыҡтыҡ урамға.

Ҡапҡа төбө һайын йәш-елкенсәк,
Кемдер йырлай, кемдер тиргәнә.
Күрше эте олой айға ҡарап,
Булды микән зарын һөйләргә...

Ҡайтмай ҡалған һарыҡ көйшәп ята,
Кибет ишегенә һөйәлеп,
Мансаф бабай ейәнен саҡыра,
Тыңламағас, ҡуя инәлеп.

Көләмһерәп ҡуйҙы, хәтерләпме,
Әни беҙҙең үҫмер саҡтарҙы:
Һуңлап ҡайтыр булһа ағайың ти,
Майлап ҡуя ине ҡапҡаны.

Ә һин инде күҙ өҫтөндә ҡаштай,
Уяу булайыҡ, тиеп, ҡыҙ бала,
Егетеңде өнәмәйсә атаң,
Күҙ яҙҙырмай ине аҙға ла.

Өнәлмәгәндәрҙең ҡыҙы еткән,
Күптәр йөрөй икән ҡыҙығып,
Киске уйындарға сыҡһа һылыу,
Тора буғай йәне һыҙылып.

Тартып алыр булам йондоҙҙарҙы,
Ник кенә лә берәһе атылһын.
Күңелемдә йөрөгән хыялыма
Ник кенә лә берәһе тап булһын.

Минең йондоҙ күптән атылғандыр,
Йоҡоһоҙ төн бары йөҙәтә,
Ҡапҡа төптәренә алып сығып,
Үткәндәрҙән һабаҡ өйрәтә.

Баштан һыйпап әни теләк теләй,
Күктән яуа йондоҙ ямғыры,
Күрше эте, меҫкен, олой һаман,
Хәйерлегә булһын ахыры.

* * *

Ҡыуып етә алманым һине, донъя,
Күпте теләп, аҙға көйөндөм.
Был ғүмерҙең борма юлдарында
Ауырая бара төйөнөм.

Һикәлтәле юлды яйлап үтеп,
Тигеҙ ерҙә ҡайсаҡ абындым.
Үкенеүҙәр менән түләй хәтер
Хаҡын һаман яңылыш аҙымдың.

Хәҡиҡәттең таты әсерәк шул,
Шуға микән намыҫ талымлы
Аҫылың, ти, уртлап барыһын да
Кеше булып ҡала алырмы?..

## ТЫУҒАН КӨН ВАЛЬСЫ

Йомарт көҙҙөң сыуаҡ бер көнө
Бүләк иткәнгәме, тим һине,
Көмөш тамсыларын ямғырҙың
Сәйлән итеп теҙгән таң нуры.

Таң нурҙары, көмөш тамсылар
Күңеленлән юйып алһындар
Миңә ҡәҙәр булған эҙҙәрҙе,
Кемдер әйткән ауыр һүҙҙәрҙе.

Теләктәрем:
Көмөш тамсылар
Юйһындар, тик юйылмаһындар.
Шат йылмайһын моңһоу күҙҙәрең.
Ошо көндәй бул һин мөләйем.

Һиңә генә атап таң нуры
Сәйлән иткән көҙгө ямғырҙы...

* * *

Алдым һине ысынбарлыҡтан мин,
Тыуҙырҙым тик хыялымда ҡабат.
Өҫтөн ҡуйып барлыҡ ваҡлыҡтарҙан,
Ант-шарттарҙан һине иттем азат.

Һоҡланғанмын, ахыры, сама белмәй,
Хыялыйҙар иткән һүрәтеңә.
Йолоп алып торош-һәләтемдән,
Табындырған рухи ҡөҙрәтеңә.

Һин теҙләндең, ә мин әле һаман
Йәшен ҡайтарғыстай түбәндә.
Мөхәббәттең юғарылығынан
Тәгәрләне йәнең түбәнгә.

* * *

Хушлашҡанда йәйҙәр китергә,
Илай талдар дымҡыл иртәлә.
Һибеләләр ынйы тамсылар,
Алдарымды йәшкә мансыйҙар.

Йыуатырлыҡ ни әйтәйем һуң,
Күңелдәрем тулы һағыш-моң.
Бәлки кәмер әрнеү һүрелеп,
Илай алһам һеҙҙәй түгелеп.

Моң-зарымы ашҡан сигенән,
Талдарҙың да башы эйелгән.
Ынйы йәштәр һыҡтап тамғанда,
Бик һыйынғым килә талдарға.

* * *

Аҙмы йәндәр, сихырлаған кеүек,
Һөйөү усағына уҡталған.
Мин тәүгеһе түгел һәм һуңғыһы
Ҡанаттары көйөп һыҡтанған.

Баҙлатайым һөйөү усағын тип,
Ғорурлығын һалып яндырған,
Ялған түбәләрҙең өйөмөнә
Мин һуңғыһы түгел абынған.

Ә шулай ҙа килмәй ышанаһы
Тәүге, һуңғы тигән самаға.
Көл-күмергә генә ҡалмағанда,
Бер ҡуҙҙан да усаҡ яңыра.

* * *

Тергеҙергә теләп усағымды,
Ҡуҙҙарына һулыш өрәмен.
Йәнләндерһен бейеп ялҡын теле
Тыныслығын гәмһеҙ төндәрҙең.

Мейес алдында бесәй күшеккәндәй,
Уларҙа ла көслө һиҙемләү.
Парһыҙлыҡтан түгел, һалҡындандыр,
Бесәйҙәрҙә юҡтыр иш эҙләү?..

Икәүләшеп усаҡ ҡабыҙабыҙ,
Йылы эҙләп үтмәҫ төнөбөҙ.
Ҡосаҡтарҙан ҡасып әллә инде
Тик усаҡҡа ҡалды көнөбөҙ...

Ишек алдын асып кемдер керҙе,
Һалмаҡ баҫып, ҡаты аҙымлы.
Ҡот өҫтәгән кеүек һалҡын өйгә,
Ялтлап кинәт усаҡ ҡабынды...

## УЛТЫР ӘЛЕ, ӘНИ, ЯНДАРЫМА

Ултыр әле янға, бөтөрөлмә,
Заманында инде сәмләндең,
Өс көнлөк ти һаман эше ҡала
Донъялыҡтан киткән бәндәнең.
Ниҙәр ҡылыр инең ҡулдан килһә,
Аңлайым да һинең хәлдәрҙе.
Быуындары сыҡҡан бармаҡтарҙың
Тиҫбе генә тартыр мәлдәре.
Йәндәремде өҙөп бирер инем,
Кеше инһә кеше гүренә,

Тәҡдир дәфтәреңдә уҡып хоҙай
Аптырайҙыр һиндәй түҙемгә.
Ултыр әле, әни, яндарыма,
Ял итәйек икәү аҙ ғына.
Һиҫкәнептәр киттем, күҙҙәреңдә
Байып барған шәфәҡ сағыла.

* * *

Яҙ шатлығы һине иҫертмәһен,
Яҙҙарҙың бит була көҙҙәре;
Һағыштар ҙа йөҙөң һарғайтмаһын,
Бошоноуҙар күңелең ҡарайтмаһын,
Һәр миҙгелдең була үҙ йәме.

Үткән көндәреңдә һин юҡһынма,
Алдағыһын уйла ғүмереңдең,
Тыуаһы таң һине шатландырһын,
Йөрәгеңдә илһам ҡабындырһын
Уй-хыялы килер көнөңдөң.

Юлдарыңда булһа ауыр һағыш,
Һикәлтәле яҙмыш юлдарың,
Онотһаң да мине, уйлаһаң да,
Юлдарыма ҡарап моңланһаң да
Юлдаш булһын һиңә йырҙарым.

* * *

Телефоным ник бер өндәшһен,
Түҙемлерәктер һин, күрәһең;
Бер көнөм бит йылға торорлоҡ,
Көткәндәргә бирһен сабырлыҡ.

Һин иҫәнме, нисек хәлдәрең?
Көтөп алалманым сәләмең,
Телгә килеп, йөрәк өндәшһә,
Был сыбыҡтар ҡурҡам, түҙмәҫ тә.

Ник битараф икән сыбыҡтар,
Яныш-көймәй улар, һыуыҡтар,
Тапшыралмай тойғо-хистәрҙе,
Тик яфалай ике иҫәрҙе.

* * *

Тулышты ла күңелем мөлдөрәмә,
Сайпылдырма, хисем — һут ҡына;
Ул хистең бит һәр тамсыһы ҡайнар,
Көйҙөрөп тә алыр ут ҡына.

Күҙҙәремә ҡуна өнһеҙ бер моң —
Һине көтөүҙәрҙең үпкәһе,
Һағыш ауырлығын йөрәгемә
Сабыр ғына һалып үтмәсе,
Күҙҙәремдә ҡала үпкәһе.

* * *

Аяҙ күктә балҡый йылғыр йәйғор,
Ете таҫма булып һуҙылған,
Сағыштырам гүйә йәшәйешем,
Серле күктең тылсымдарын асып,
Миҙгелдәрҙе ете төҫкә мансып,
Ғүмер-таҫма булып һуҙылған.

Ал хыялдар — янған офоғома
Зәңгәр томан булып моң ятһа,
Болоҡһорап торған күңдәремдән
Йәшел йәшәү көсөм уята.

Һағыштарҙан туйып арығанда,
Һары төҫөм ала өҫтөнлөк,
Ауыртынып, йән ҡыйылып үткән
Ҡыҙыл төҫөм никтер күпселек.

Йәйғорҙоң күк, ҡара таҫмаһы —
Һинһеҙ үткән ғүмер маҙаһы,
Һыҙылып та ҡалған маңлайҙарҙа
Юйылырлыҡ түгел тамғаһы.

* * *

Һағышланма, көйәләнмә,
Һүнеп бойоҡма, күңел,
Кистән ҡалған усағыңды,
Таңдарҙа яңырта бел.

Инде һындым тиһә рухым,
Ҡалғанда тамсы көсөм,
Һуңғы минутҡаса йөрәк
Тартышыр йәшәү өсөн,
Йөрәктә һөйөү хисем.

* * *

Йылмай әле, тынысландыр мине,
Онотоп тор борсоу уйыңды,
Мин бит һиңә йылынырға керҙем,
Туҡталышы һиндә юлымдың.

Дөрләт әле янған усағыңды, —
Ҡырыҫ донъя тамам өшөткән,
Йылыт әле, йылыт күңелемде,
Мин юлсыңдыр, бәлки, һин көткән?

Мин әлегә юлсы, утҡа кергән,
Күңел түрҙәреңә уталмам,
Йөрәк кенә һинең һалған ҡуҙҙан
Янар усаҡ булып тоҡанған.

* * *

Ул ҡайҙа, тип таңдан һораным,
Таң көндәрҙә иреп юғалды;
Ә көндәр бит гүйә аҡ болот,
Туктатырмын тимә уфтанып.

Төн ҡыҙғанды, асты ҡосағын,
Яндырҙы ла йондоҙ усағын.
Иң яҡтыһы — Сатҡы йондоҙҙо
Күңел күктәремдә ҡабыҙҙы...

Күңелеңдә асма асынып,
Мин бит һине һүҙһеҙ аңланым;
Өмөт-бәхет тертләп һүнгәндә лә,
Хыялымда — миңә яҙғаны.

* * *

Һағыштарым үтте үҙәгемә,
Түҙемлегем, өмөттәрем һүнә;
Өҫтәр кеүек йәшәү көсө миңә
Һинең күҙҙәр, һинең күҙҙәр генә.

Күҙҙәреңә ҡарап онотолам,
Һин бит минең йәшәп туймаç донъям;
Күҙҙәреңде күреп кенә түгел,
Һағынып та инде, ахыры, туймам.

Һағыштарым үтте үҙәгемә,
Түҙемлегем, өмөттәрем һүнә,
Һағышһыҙҙар ғына әйткәндер ул,
Һағышҡа, тип, кеше барыбер күнә.

* * *

Сәләм әйтегеҙ, тим, елдәргә,
Минең тыуып үçкән ерҙәргә;
Ауылыма, зәңгәр күгемә,
Томбойоҡло тәрән күлемә,
Талдарыма, тирәктәремә,
Муйылыма, миләштәремә.
Сәләм әйтегеҙ, тим, ҡырҙарға,
Йәшлек эҙем ҡалған юлдарға,
Сәрмәсәндең текә ярында
Мине һағынып ҡалған йәремә.
Күңелемдә хистәр талпына,
Ҡуҙғал, тиеп, юлдар саҡыра.
Һағыныуға башҡа юҡ сара,
Күрешеүҙәр — бары тик дауа.

## УЙЛАНЫУ

*Ҡырымдағы татар ҡәрҙәштәрем*

Күп ғазаптар күргән татар ере,
Һиндә күпме ҡан-йәш түгелгән?!
Телһеҙ шаһиттары үткәндәрҙең,
Һаҡлай кеүек һағыш-үпкәләрен

Ирекһеҙҙән һөрөлөп киткәндәрҙең
Сал тулҡындар ярға йүгергән.

Диңгеҙ йоҡлай, сабый бала кеүек —
Шундай тыныс, шундай һөйкөмлө.
Ғорур кипаристар, платандар ҙа,
Өнһөҙ ҡалған ғашиҡ шикелле,
Теҙелешеп ярға баҫҡандар, —
Әйтерһең дә, йәшел ҡалҡандар.

Мәңгелек ут яна, юҡ ут түгел,
Ул йөрәктәр яна үлемһеҙ;
Тетрәндергес минут тынлығында,
Башын эйгән килеш бер һүҙһеҙ,
Ҡарт яугир ҙа утҡа текәлгән...
Ҡайталмаған ҡәрҙәш-туғандарын,
Йән өрөрҙәй булып өҙгөләнеп,
Эҙләй кеүек «утлы һәйкәлдән».

Татар ере өсөн күпме ғүмер
Йөрәктәрен утҡа һалғандар,
Юҡ, үлмәгән, йәшел ҡалҡан кеүек,
Кипаристар булып ҡалҡҡандар.

Батыр үлгән, үлемһеҙлек ҡылған
Йәшәр өсөн, йырҙа маҡталған,
Сапун тауҙың Алтын балҡаһында
Ерҙе тотош металл ҡаплаған. —
Һуғыштан һуң сирек быуат буйы
Был тупраҡта үлән ҡалҡмаған,
Ҡанлы көрәш эҙен һаҡлаған...

Татар ере... Һине славян менән
Татар ҡаны берҙәй һуғарған:
Сал тулҡындар шаһит, таш ҡаялар
Йылдар шауҡымынан шымарған
Арына алмай әрнеш-уйҙарҙан.

* * *

Мин бит бары һинең өсөн генә
Был донъяға яратылғанмын;
Тыуыр таңың, килер яҙың булып,
Ошо ергә таратылғанмын.

Шишмә булып юлдарыңа ятам,
Һыуһағанда, минән һыуҙар эс;
Таң елдәре булып, һарылып үтеп,
Күңелеңә һалам ялҡын-көс.

Яҙҙарыңда һандуғастай өҙөлөп,
Мин мөхәббәт йыры йырлайым;
Күҙҙәреңдә һағыш еле булып,
Эҙҙәреңә ятып илайым.

Ҡыштарыңда, аҡ ҡарҙарҙай сорнап,
Сафландырам йөрәк хисеңде;
Йондоҙ булып тик мин яҡтыртамын
Хыялдарын йәйге кисеңдең.

Һәр мизгел бит миңә — күңел яҙы,
Яуһын ямғыр, яуһын ҡары ла,
Тик төшмәһен бәгерҙәргә ҡырау
Хистәр бөрөләнгән таңымда,
Сарсатмасы күңел наҙына?..

* * *

Хәтеремдең тынмаҫ елдәре
Туҙғыталар усаҡ көлдәрен,
Ул усаҡта — һүнгән хистәрем,
Һине өҙөлөп көткән кистәрем,

Алһыу иртәм, сабыр һағышым,
Һин тилмерткән йөрәк ҡағышы.

Тәҙ(е)рәмә ҡабат һин ҡаҡтың,
Моңһоҙ өндәремдән уяттың,
Тергеҙергә теләп усаҡты,
Хәтер елдәремде ҡуҙғаттың.
Һүнгән усаҡ ҡабат янырмы,
Минең йөрәк һине танырмы?..

* * *

Йондоҙ һыҙып үтте офоғомдо,
Тоталманым ҡулым һуҙһам да;
Һары һағыш, һары шәлен һөйрәп,
Атлап керҙе шунда тупһамдан.

Ҡулдарымды һуҙып үрелдем дә,
Кире сүктем, буйым етмәне.
Йондоҙ һөйҙөрөрлөк булғас, тәңрем,
Ниңә мине йондоҙ итмәнең?..

* * *

*Әсәйемә*

Күргәнем юҡ сабыр кешеләрҙең,
Ярҙам һорап, илап тилмергәнен,
Аяҙ күктә йәшен ялтлаһа ла,
Үтер юлдан кире сигенгәнен.

Замананың ҡырыҫ һулышынан
Ҡабынғанда дөрләп ҡай берәүҙәр,

Сабырҙарҙың сабыр шәмдәренә
Сабырһыҙлыҡ ҡунмаҫ, иңрәүҙәр.

Ҡыланышты ҡырға һыймағанды
Оҡшатмай шул сабыр кешеләрем:
Лаф орғанда улар мәғәнәһеҙгә,
Сабырҙарҙың ишетәм көрһөнгәнен.

Ығы-зығы баҫҡан йәшәйештә
Күңелдәргә юшҡын ҡунғанда ла,
Сабырҙарҙың сабыр шәме һүнмәй,
Яҡтылығын һирпеп һалмаҡ яна.

* * *

Иҙерәп йоҡлайһың һин бишегеңдә,
Шундай тыныс, шундай һөйкөмлө,
Әсәң назы йәйгән аҡ ҡанатын,
Баш осоңда һаҡсы шикелле.

Һин донъяға әле килгәнсе үк
Башлап әсәң назы яралған;
Ул һәр ваҡыт уяу йәнәшәңдә,
Тәмле төштәреңә уралған.

Әсәң назы йәйгән аҡ ҡанатын,
Ел-ямғырҙы һиңә тейҙермәй;
Һуңғы йөрәк тибешеңә тиклем
Әсәң назы һүнмәй, һүрелмәй.

## ЛӘЙСӘН ЙЫРЫ

Мин ләйсәне һинең яҙыңдың,
Күтәп алған тәүге ямғырың;
Ярһыу йәнем — наҙлы тамсыла,
Алдарыңда бейеп талпына.

Ҡышҡы көндәреңдең моң-зарын
Күңелеңдән ярһып йыуамын;
Уйна йәшен, бейеп китәмен,
Наҙҙарымдан яҙың гөрләһен.

Сафландырып яҙың һулышын,
Тойғоларым аға тулышып;
Йәшәү йәмен әрсеп ҡарынан,
Сәскәле таң һиңә ҡалдырам.

Йылғыр йәйғорҙарҙың нурҙары,
Һабан турғайының моңдары
Йәнләндерһен өсөн яҙыңды,
Бүләк итәм барлыҡ наҙымды.

* * *

Нисек бармын, шулай ҡабул ҡыл һин,
Бәлки, булмам оло табышың.
Күҙҙә тыуған йөрәк йыры һиңә
Моңло була икән, һағышлы?..

Нисек бармын, шулай ҡабул ҡыл һин,
Һәр миҙгелдең ерҙә үҙ төсө:
Яҙҙа йәшел, ә көҙҙәрен иһә
Алтын япраҡ биҙәй ер өҫтөн.

Ни ғәйебе һинһеҙ көндәремдең,
Үткәндәрем бит ул — ҡабул ҡыл.
Йөрәк хисе сағыу ҡояш кеүек
Һәр миҙгелдә берҙәй йылытыр.

* * *

*...Ғашиҡтың ғына кеше ти*
*исемдә йөрөтөргә хаҡы бар*

*А. Бл*

Дауыл булып керһәм күңелеңә,
Сабырлығың өҙөр теҙгенен:
Шаулы табындарҙан алып сығып,
Айлы төндәреңдә аҙаштырып,
Йөрөтөрмөн, етһә түҙемең.

Дауыл булып керһәм күңелеңә,
Тынысылығың юйыр көндәрең:
Аҡылың хистәр менән алышһа ла,
Һуңғы һүҙҙе әйтер йөрәгең.

Йә, тынысылан, тулар саҡта ла бит,
Көҙгө елдәй, бары һыҙланам;
Дауылланып алһам, тыныр инем,
Сыҙамаҫһың, һине ҡыҙғанам.

Асығыланма, аҙмы түбәнһенеп,
Кисерәбеҙ тормош йәберен,
Кеше булып ҡалайым, тиһәң, — тынма,
Тойғо-хистәреңде яңыртырға
Дауылды һин телә, ҡәҙерлем.

* * *

Йәшеллеккә сумған иркен туғай,
Аҡ сәскәлә бөгөн дала, ҡыр,
Зәңгәр күлдең зифа ҡамыштары
Һуҙа кеүек дәртле яңы йыр.
Беҙҙең йыр ул яңы яңғыраштa
Яҙҙы данлай яҙмыш күҙендә —
Үткәндәрҙән килгән яҙғы дауыл
Йәшнәп үтте бөгөн күңелдә.
Күңелдәрҙе айҡап үткән дауыл
Һағыш булып ятты күҙҙәргә,
Беҙҙең яҙмыш хәтирәһе кеүек
Аҡ сәскәләр тибрәй эҙҙәрҙә.
Талпыныш та осоп китеп булмай,
Күңел ҡанаттары ҡайырылған.
Донъя ғына һүнмәҫ өмөт кеүек,
Яҙҙар еткәс гөрләп ҡабынған,
Һағыштарҙы ҡыуа йәнемдән.

* * *

Ҡояшым бул атҡан таңдарымда,
Айым булып йыуат төндәрҙә,
Яҙмышыма һалған һуҡмағыңдан
Етәкләп сыҡ тыуыр көндәргә.
Һағышымдан янып-көйөнһәм дә,
Йәшәү көсөм — бары һөйөүҙә.
Һинһеҙ үткән ғүмер йылдарымды
Алмаштырлыҡ һинле бер көнгә.
Йөрәк тулай, юйыш сабырлыҡты,
Тик хистәрҙе булмай йүгәнләп,
Һүнмәҫ ҡояш, һағышлы ай булып,
Күңел күтен өтә мөхәббәт.

* * *

Аҡ пароход елә алға,
Тулҡындарҙы ҡаға-ҡаға,
Һаубуллашыу гудоктары,
Ҡайтауаздай, ярҙа ҡала.
Төҙ нараттар, бөҙрә талдар
Моңһоуланып ҡалған ҡалай,
Айырылып ҡалған йәрҙәй,
Һағыштары йәнде арбай.
Ғорур башым, моңһоу талдай,
Эйелһә лә һағышымдан,
(Хаҡ һәм нахаҡ ҡағылыуҙан
Мин генәме ауыртынған.)
Өмөт-маяк баҙлап яна,
Ярһыу тулҡын ярға ҡаға,
Аҡ пароход — тынмаҫ йәнем
Һаубуллашып һөрән һала,
Төҙ нараттар ярҙа ҡала...

* * *

Үткәндәргә килмәй ҡалдыраһым,
Ҡараштарың шундай кәҙерле,
Улар, бәлки, яҙмыш һуҡмағында
Аҙаштырмаҫ һуңғы шәмемдер...

Тик ҡайырма күңел ишегемде,
Шик һыуыта хистең йылыһын,
Уҡый алһаң, уҡы күҙҙәремдән,
Ғазапланған йәндең тойғоһон.

Һағынғандыр, түҙмәҫ, ҡайтыр, тиеп,
Хәҙергемдә әле көтһәм дә,
Шәүләм йөрөр бәхетең күләгәләп, —
Мин ҡайта алмам, ҡалма үткәндә?..

* * *

Бар тәбиғәт тын йоҡоға талған,
Шәфәҡ нурын йыя офоҡта,
Сөмбөл йондоҙ, серле нурын һибеп,
Юл күрһәтә ике ғашиҡҡа.

Төн һарыла зифа ҡайындарға,
Шуҡ елдәрҙе ҡуя йоҡлатып,
Хистәр тулы аулаҡ ҡуйынына
Ғашиҡтарҙы йөрөй оҙатып.

* * *

Хушлаштым мин, беҙҙең мөхәббәтте
Күңел төпкөлөнә ерләнем.
Һуңғы тапҡыр әйтте исемеңде
Тибешендә әрнеп йөрәгем.

Аяҙ көндө гүйә ҡуйы томан
Алдарыма ятты ҡапланып,
Һары япраҡ күмгән эҙҙәреңдән
Ярты йәнем атлай аҡланып.

Хушлаштым мин, беҙҙең мөхәббәтте
Күңел төпкөлөнә ерләнем.
Буйһонманы аҡыл хөкөмөнә,
Күңелемдән бага күҙҙәрең...

* * *

Ҡайындарҙың башын эйҙерткән дә
Япраҡтарға алтын йүгерткән,
Ынйы ысыҡтар һибеп үләндәргә,
Ҡапҡаға уҡ килеп көҙ еткән.

Эй һин, йәшлек, әле ҡасан ғына
Елә инең хыял-толпарҙа;
Хаҡы арта бара яҙҙарҙың бит,
Күҙҙәр еткәс кенә тупһаға.

Бик һуңламаҫ инде, оҙаҡламаҫ,
Ҡыр ҡаҙҙары осор теҙелеп,
Ҡош юлындай, күңел ҡылдарым да
Яҙҙарғаса тынып, өҙөлөп...

* * *

Атмағыҙсы күңелемә ауыр һүҙҙәр,
Иҙел һыуы кеүек ташыр, күтәрелеп;
Тәгәрәп-түгелеп илар саҡтар була,
Күс бир, тәңрем, аяҡ өҫтө үткәрерлек.

Сайпылмаһын, тиеп, моңһоу күҙҙәремдән,
Керпектәрем ҡаплай төпһөҙ һағышымды;
Тынып ҡалған күңелемдә бәргеләнеп
Тулай йәнем, баҫып йөрәк ҡағышымды.

Өмөт-елкән кирелеп бер елкенде лә
Дауылланып осто әллә ҡай тарафҡа,
Икһеҙ-сикһеҙ даръяһында йәшәйештең
Йүнәлеш бир, тәңрем, яңғыҙ бер ҡарапҡа?..

* * *

Бурай-бурай яуа ап-аҡ ҡарҙар,
Их, бәхеттәр шулай яуһасы!
Күпкә юҡ өмөтөм,
Бик аҙ ғына —
Тик бер усым ғына тулһасы!

Бер ус бәхет етәме ни, тимә,
Мин уны ла
Бүлер инем әле уртаға:
Бәхет көткәндәргә,
Инде көтмәгәнгә...
Әҙләп етер ине урталарға.

Бурай-бурай яуа ап-аҡ ҡарҙар, —
Гүйә сафлыҡ ергә яғыла.
Шул сафлыҡты,
Йыйып устарыма,
Өләшәһем килә барына...

* * *

*«Бәхет — һәр саҡ һуңлап килер ҡунаҡ,*
*Килеп инә табын таралғас...»*

*Рәми Ғарипов*

Нисек йәшәһәң дә ғүмер үтә,
Кисәге көн ҡала моңайып,
Ваҡыт саба, бәхет алда, тиеп,
Бәхет көнә көтмәй, моғайын.

Ауыртынған йәнен дауаларға
Аһәңле моң эҙләй ҡайһыбыҙ,
Һуңғы сиккә етеп алйығастын
Бәхет ишектәрен шаҡыйбыҙ.

Онотолоп ҡыуанырлыҡ та бит,
Тик әҙгә шул күңел йыуаныуы.
Бары балҡыш — ғүмер байышында
Мөхәббәттең һуңғы йылмайыуы...

## ҠАЙТЫУ

*Сәрмәсән*

Ай юлынан атлай уйҙарым,
Төнгө йылға сумған уйҙарға,
Төндәр, көндәр менән сикләнмәгән
Хәтирәләр ҡабат уяна.

Аҡсарлаҡтай ҡосам тулҡынды,
Тик табыштар инде күҙләмәйем;
Табышмаҡтай донъям ҡараңынан
Бәхет көтәм, ҡайғы эҙләмәйем.

Сығып басты гүйә йәшлегем
Сапҡын-ваҡытымдың юлына,
Дөрләтергә ғүмер усағымды
Хәтирәләр ҡабат йыйыла.

## ЕТЕГӘН

*«Ете төн урталарында*
*Өндәштеме Етегән:*
*Ҡара ялбыр сәстәреңде*
*Үреп ал, тип, етенән...»*

*Зарема Әхмәтйәнова*

(Зарема апайҙың яҡты иҫтәлегенә)

Ете төн урталарында
Балҡый һинең Етегән.
Йондоҙлоҡтоң башы гүйә
Ҡәбереңә эйелгән.

Һинең моңло йырҙарыңды
Һағынғанмы, юғиһә,
Яҡтырта ҡәбер ташыңды,
Ышанаһы килмәйсә.

Ҡара ялбыр сәстәреңде
Үрә алманың етеһән,
Тик үлем оло йәнеңде
Баҫа алмай ер менән.

Йөрәктәр моңға һыуһаны,
Бер йыуаныс эҙләп, беҙ
Бәгергә ҡандар һауҙырған
Ҡәбереңә киләбеҙ.

Мәңге йәшәр йән индереп
Изге күңелеңә һинең,
Кешелеклек өлгөһө, тип,
Тоторлоҡ бер зат инең.

Яҡтырта күктә Етеген,
Төн. Зыярат тын тора,
Тик ел генә, үрһәләнеп,
Йән өшөткөс һыҙғыра...

* * *

Өндәш миңә, өҙөлөп һағынғанда,
Ара йыраҡ, тимә, — тойормон.
Һинең һағыш күҙгә күндәремә
Өҫтәр көн дә һары буяуын.
Өндәш миңә, йәнең үртәлгәндә,
Тоймаҫ, тимә, барыбер тойормон,
Борсолоуың килер елдәр менән,
Ел ҡапҡамды асып ҡуйырын.

Өндәш миңә, ара алыҫ, тимә,
Етмәҫ, тимә, күңелем йылыһы,
Туңған бәғерҙәрҙе иретерлек
Мөхәббәттең ҡайнар һулышы.

* * *

Һин көсләһөң, тимә,
Минең рухым
Бары һинән генә көс ала;
Яңғыҙлыҡта, шашып һағынғанда,
Һинең хаҡта йырым ярала.

Йәшәүем дә, һинең хаҡты һаҡлап,
Өшөтһә лә йәйге селләлә,
Аҡ буранда аҙаштыммы, тиһәм,
Етәкләйҙер һинең күләгә;
Шәфәҡ нурын һинһеҙ оҙатһам да,
Таңдарымдан
Өмөт утын алам көндәргә.

Тик мин ҡурҡам,
Тормош, диңгеҙ кеүек,
Ялмап-солғап һине алыр, тип,
Шул аяуһыҙ диңгеҙ тулҡынына
Ғәзиз йәшем тамып ҡалыр, тип.

* * *

Тәҙрәмә кис кемдер килгән, сиртә тиһәм,
Ул сабырһыҙ көҙгө ямғыр ғына икән.
Тамсыларҙай, һалып кинәт буй-буй эҙҙәр,
Сайпылдылар инде көтөп талған күҙҙәр.
Көҙгө төндөң моңо ҡунды керпегемә,

Тик йәш түгел, күңелемдең төпкөлөнән
Һағыш һарҡа, хәтирәләр менән тулып;
Таш түгел шул бәгерҙәрем, ятмай тынып,
Ҡалтыранып тыңлай һаман ямғыр шауын...
Ҡалтыранып тыңлай һаман ямғыр шауын..

* * *

Һуҡмаҡтарға беҙҙең ятҡан туҙан,
Ҡарт өйәңке шул уҡ ярында,
Аҡ тулҡындар һаман йүгереп уйнай,
Иркәләнеп елдең наҙына,
Күңелемә һалған эҙҙәренән
Үткәндәргә ҡайтам тағы ла.

Бер миҙгелгә әгәр ҡайтаралһам,
Ҡулдарыңдың йылы наҙҙарын,
Һис бүлешмәҫ инем, һис бирешмәҫ,
Тәҡдир итер инем яҙғанын.

Өмөт ебе һаман өҙөлмәгән,
Тик ағалмай һыуҙар үрҙәргә,
Ҡарт өйәңке елгә башын эйгән,
Серен һөйләй икән кемдәргә?..

## ЛИРИК ХАТ

Уйла мине, йөрөһәм дә күҙ алдыңда,
Онотма һин, һаҡла мине хыялыңда,
Башҡа берәү атлаһа ла яҙмышыңда,
Ҡалырһың һин һәр саҡ өнһөҙ һағышымда.

Булырһың һин йырланмаған йырҙарымда,
Оҙатырһың үтеләсәк юлдарымда,
Аҡ йондоҙҙар һанағанда йәйге кистә,
Булмам яңғыҙ, булырһың һин минең иҫтә.

Сулпан һымаҡ янмаһам да таңдарыңда,
Онотма һин булмаһам да яндарыңда;
Башҡа моңдар һарылған шул көндәреңә,
Бер яңғыҙым нишләйем һуң күҙҙәремдә?

Нишләргә һуң, ят моңдарға юҡтыр үпкәм,
Улар менән һинең яҙмыш үрелеп үткән.
Ялбарам тик, тәҙрәңде ел ҡаҡҡанда,
Күҙҙәреңә моңһоу йөҙлө ай баҡҡанда,
Уйла мине, өмөт бөткәндә лә һынып...
Ни һөйләйем, онотолһаң, әйҙә, онот!

* * *

Кинәт кенә һалҡын елдәр иҫте,
Йөрәк өшөп ҡуйҙы ҡалтырап;
Һуҡмағыма, күҙ йәштәре кеүек,
Һуңғы ысыҡ төшә ялтырап.

Күңел илай, ҡушылалмай әле
Иртәләгән көҙҙөң көйөнә,
Асылалмай ҡалды тойғоларым —
Өшөр инде көҙөн бөрөләр.

Яҙҙарымда ҡалған һайрар ҡошом,
Ә көҙҙәрҙә мине ни көтә?..
Һағыш көтә, һағыш илсеһе ел
Йөрәгемә кереп өшөтә.

* * *

Талдар көҙгө-күлгә ҡарайҙар,
Бөҙрәләрен елдәр тарайҙар,
Тал ҡыҙҙары гүйә баш сайҡай,
Иркәләүҙән микән арыйҙар...

Мин һис туймаç инем елдәрҙән,
Елеп ҡайтһаң йыраҡ ерҙәрҙән. —
Мин дә бит бер иркә тал ҡыҙы,
Миңә лә бик танһыҡ ел наҙы.

Сәстәремдә ҡуйҙым таратып,
Ел булып иç әле, яратып.

* * *

Битем ҡуям йылы устарыңа,
Ирендәрем менән ҡағылам. —
Әйтерһең дә, минең күрәсәгем,
Устарыңа һинең яҙылған.

Айырылам йылы устарыңдан,
Йән йылыһы алып күңелгә,
Күрешеүҙәр көтөп, өмөт уты
Янып ҡала йөрәк түрендә.

Һуңғы танкыр бағам күҙҙәреңә,
Ҡулдарыңа һуңғы ҡағылыу,
Иренемә ҡунды тоҙло тамсы, —
Асы икән, асы айырылыу.

## РӘХМӘТЛЕМЕН ЯҘМЫШ ТИГӘНЕМӘ*

*Романс*

Һағынамын, өҙөлөп һағынамын.
Күҙҙәреңдең балҡып ҡабынғанын.
Мин генәме икән табынғаның,
Ҡарашыңдан яуып эҙләй йәнем...

Мин түгелдер тәү ҡат һөйгән йәрең,
Һуңғыһымын тип тә йыуанмамын.
Һарыламын бары иңдәреңә.
Рәхмәтлемен яҙмыш тигәнемә.

Үкенмәйем, һөйөү һуңламаған,
Ул бит күрәсәкте уҙалмаған.
Үтенәмен, яҙмыш, ҡабаланма,
Биргәнеңде бер үк тартып алма.

Ғәфү һорап ҡыуам үткәндәрҙе —
Вәғәҙә — иман тиеп көткәндәрҙе,
Һарыламын һинең иңдәреңә,
Рәхмәтлемен яҙмыш тигәнемә!

---

* Роза Сәхәүетдинова музыкаһы.

# РАМАЙ ҠАҺИР

# ТӨШТӘРЕМДӘ ҠОЯШ КҮРҘЕМ



Заказ 26



*1962 йылғымын. Учалы районында урта мәктәпте тамамлағас, колхозда малсы, шофер булып эшләнем. 1980—1982 йылдарҙа сик буйы ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеп ҡайттым. Әле бына, йәшлек йылдарымда ҡылған һис тә ғәфү ителмәҫлек хатам арҡаһында, байтаҡ ғүмер инде сит ерҙәрҙә «аҙашып» йөрөп ятам. Тыуған Уралыма булған һөйөүем, һағыныуҙарым минең ҡурай моңдарымда, шиғыр юлдарымда сағылыш тапты. Беҙҙең яҡтың тәбиғәте, ай-һай, гүзәл шул: еләк-емешкә, ҡош-ҡортҡа бай урман-туғайҙары, балыҡ уйнап торған зәңгәр күлдәре, уралып-борғоланып аҡҡан Яйыҡы үҙе бер моңло, сихри донъя бит. Минең күңелемдә Тыуған еремә, туған телемә булған һөйөү саф шишмә булып сылтырай, Урал тәбиғәтенең миңә бала саҡтан биргән булмышы йөрәгемдә арбар бер тылсымлы көс-ҡеүәт булып һаҡланып ҡалған. Ғөмүмән, рухи донъям, яҙмышым, кисерештәрем — шиғырҙарымда.*

**Рамай**

* * *

Минең йәшәр дарманым бар,
Дуҫтарым бар бауыр баҫырлыҡ;
Яраланған бынау йөрәгемдә
Тамырлана өмөт, таһыллыҡ.

Бөгөн килеп, бик ныҡ шатланамын,
Шишмәләргә инеш табылды:
Үрһәләнгән минең күңелемә
«Шиғыр ене» килеп ҡағылды.

## АМАНАТ

Тәбиғәт биргән ҡоштарға
Осор өсөн ҡуш ҡанат,
Ололар беҙгә ҡалдырған
Мираҫ итеп — аманат.
Игелекле бул, тигәндәр,
Насарлыҡтар булһын ят.
Олоно ихтирам итһәң,
Урап үтер яманат.

Ҡыҙҙарға әйткән аманат:
Һеҙ — буласаҡ әсәләр,
Әсәләр һәр саҡ донъяла
Тик матурлыҡ сәсәләр;
Әсәлек еңел бирелмәй,
Ауыр булыр, түҙегеҙ,
Кешеләргә илтһен шатлыҡ,
Һеҙҙең әйткән һүҙегеҙ;
Ғаилә усағын гелән
Һүндермәйсә тотоғоҙ,
Бәхетле булыр шул саҡта
Һеҙҙең һөйөү йортоғоҙ.

Егеттәргә серҙе сисәм,
Шулай ҡушҡан аманат:
Уҡ-һаҙағың әҙер булһын,
Дуҫың булһын етеҙ ат;
Ҡылысыңды үткерләп тот,
Ҡылысың булһын булат.
Электән ҡыйыу булған бит
Башҡорт атлы азамат.

Йырға һеҙ әүәҫ булығыҙ,
Шулай ҡушҡан аманат.
Бейегеҙ, ҡурай уйнағыҙ,
Башҡорт бит ул — моңло зат.
Ҡурайҙа көйҙәр һуҙығыҙ,
Бирә ул йәшәү көсөн,
Шул саҡта һаҡлап ҡалырбыҙ
Моңло башҡорттоң төсөн.
Ололар беҙгә ҡалдырған,
Мираҫ итеп — аманат:
Уралды, туған телеңде
Ҡәҙер ит, һаҡла, ярат!..

## ЙӘН ДУҪЫМ

Йән дуҫымдың кәрәк миңә тоғролоғо,
Иле өсөн ҡалҡан булып торорлоғо,
Дошмандарҙы аяғынан йығырлығы,
Алыштарҙа еңеү яулап сығырлығы,
Ауыр саҡта үҙ ризығын бүлерлеге,
Дуҫы өсөн йән аямай үлерлеге,
Илар саҡта, шат йылмайып көлөрлөгө,
Күңелдәргә шатлыҡ сәсеп йөрөрлөгө,
Ҡурай тотоп йыйындарға уҙырлығы,
Ләззәтләнеп серле ҡурай һуҙырлығы,
Йөрәктәргә илһам, һөйөү һалырлығы,
Ҡурайына тоғро булып ҡалырлығы,
Туған телен әсә төҫлө һөйөрлөгө,
Саф башҡортса яттан шиғыр һөйләрлеге,
Ылаҫындай етеҙ атта елерлеге,
Эшкә сумып, башҡорт зарын көйләрлеге.

## ҺҮНМӘҪ, АТАЙ, ҺИНЕҢ МОҢДАРЫҢ

*Атайымдың яҡты иҫтәлегенә*

Тальяныңда көйҙәр һуҙа инең,
Кешеләргә шатлыҡ өләшеп.
Беҙ — өс улың: «Атай, өйрәт», — тиеп,
Торор инек һиңә көнләшеп.

Бөркөтоя буйын моңға күмеп,
Шатлыҡ илтте һинең көйҙәрең.
Шуға һине һаман юкһыналыр
Туңғатарҙың моңһоу өйҙәре.

Атай, һаман гармун телдәрендә
Һинең бармаҡтарҙың эҙе бар,
Моңдарымды һүндермәгеҙ, тиеп,
Васыят итеп әйткән һүҙең бар.

Таҫыллығың беҙгә күскәнгәме,
Әхнәф баян тарта, Дим бейей.
Минең иһә ҡулдарымда — ҡурай,
Яҙмышыма күрә — үҙ көйөм.

## ДУҪТАРЫМ

Шатлыклы бала саҡтарҙа
Дуҫ булып бергә үҫтек;
Мәктәп юлдарын тырышып
Күмәкләп бергә үттек.
Йәйҙең йылы кистәрендә
Һыбайлап йылҡы көттөк,
Туғайҙарҙа ҡурай һуҙып,
Инде буй үҫеп еттек.

Юлдарыбыҙ айырылды,
Әммә дуҫлыҡ бөтмәне.
Табындарҙа осрашыуҙар —
Күңелдәрҙең көткәне.
Күңел тулы шатлыктарым,
Булһа янда дуҫтарым,
Һеҙҙең ҡулдарҙы, хөрмәтләп,
Ҡыҫа минең устарым.

Дуҫтарыма тоғро ҡалдым,
Ҡайғыларын бүлештем,
Тормоштағы шатлыктарҙы
Дуҫтарыма өләштем.

Ҡайҙа китеп таралдығыҙ,
Минең йәшлек дуҫтарым?
Һеҙҙең ҡулдарҙы һағына
Минең йылы устарым.

## ТӨШ

Төштәремдә бөгөн ҡояш күрҙем,
Сағылып та китте күҙҙәрем.
Мөгәрәп бит көткән гүмерҙәрем,
Яҙ башында килде көҙҙәрем.

Ҡояш күрҙем, хәйерлегә булһын,
Үҙ үремде юллап артылам;
Аҙашмамын кеүек ҡәләм тотоп
Барыр булһам ҡояш артынан.

* * *

Бар донъяны аҡҡа күмеп,
Шаршау ҡорҙоң, аҡман-тоҡман;
Һинең наҙлы шаянлығың
Күңелемә минең йоҡҡан.
Юлдарҙы ла, өйҙәрҙе лә
Китәһең һин ҡарға күмеп,
Кешеләрҙең бит-күҙҙәрен
Епшек ҡарың менән үбеп.
Минең дә саф күңелемдә
Таша бөгөн тойғоларым,
Саф һөйөүем сәскә ата,
Ҡаса минең ҡайғыларым.
Әйтсе, кемгә ғашиҡ булдың
Яҙғы таңда, аҡман-тоҡман?
Рәхмәт һиңә. Йөрәгемә
Бөгөн һинән һөйөү йоҡҡан...

## ИРТӘ... ТИЕП БЫШЫЛДАМА...

Ҡар уйнатып өйөрөлтә
Һалҡын ҡыштың буранлары,
Әүәлгесә көрткә сумған
Ауылымдың урамдары.

Ошо ап-аҡ миҙгелдәрҙә
Оҡшай миңә тыуған яғым,
Һөйгәнемдә көтөп, әле
Ҡар аҫтында торған сағым...

Йылмаяһың. Тышта һыуыҡ,
Сыҡмайым, тип һин әйтәһең,
Күҙҙәреңде аҫҡа төбәп,
Юрый ғына инәлтәһең.

Яҙмышымда һин булғанға
Бала төҫлө ҡыуанамын,
Ҡауышыуҙар алда, тиеп,
Мин үҙемсә йыуанамын.

Ҡайтып киләм, көрттәр ярып,
Тынға ҡалған урам буйлап,
Өмөт тулы хыялымда —
Һине эҙләп, һине уйлап.

Яҙған булһа, килер әле
Уралыма йылы яҙым.
Һин бирерһең миңә, иркәм,
Мөхәббәттең һөйөү наҙын.

Аҡман-тоҡман үтте инде,
Бөрөләнеп килә яҙым.
Иртә... тиеп бышылдама, —
Мин яһайым һиңә аҙым...

* * *

Һиҙәһеңме, йылы яҙым килә:
Һәр ерҙә лә — йәшәү, хәрәкәт,
Күңелдәрҙә һөйөү бөрөләнә,
Бар тойғолар таша, эй, рәхәт.
Үҙәндәрҙе ҡаплай йәшел үлән,
Япраҡ ярған ҡайын бөрөһө,
Йомартлығын яҙым йәлләмәгән —
Сәскәләрҙең баҙлай төрлөһө.
Алмағастар шаулап сәскә атҡан,
Моңға күмгән ерҙе һандуғас;
Йәшәйексе, әйҙә, ҡәҙер белеп,
Был донъяға, дуҫтар, бер тыуғас.
Уралыма килә көткән яҙым:
Ергә илтеп ырыҫ-бәрәкәт.
Илһамланып бөгөн йырҙар яҙам,
Рәхмәт һиңә, яҙым, ҙур рәхмәт!

## ЯҘҘЫ КӨТӘМ

Төнгө күктән ап-аҡ мамыҡ ҡарҙар
Яуа бөгөн, яуа ишелеп.
Ошо кистә күҙҙәреңә бағам,
Серҙәр асам һиңә сиселеп.

Ашыҡмасы, тиһең, яҙым килһен,
Сер асырһың яҙын, кис килеп.
Һин китәһең. Ә мин үлән төҫлө
Ауам шундуҡ ергә киҫелеп.

Һағыштарҙа янып, һағыштарҙа,
Көтәм яҙҙы, һине кисереп.
Һөйөүҙәрең һинең — сирень сәскә,
Еҫ-наҙынан ҡуям иҫереп...

## СИРЕНДӘР

Яҙғы таңда һеҙҙең баҡсағыҙҙа
Сәскә атҡан ине сиреңдәр,
Ошо мәлдә һинең ирендәрҙе
Тапҡан ине минең ирендәр.

Тулы силәктәрен сайҡалдырып,
Һыу ташыйҙар күлдән килендәр.
Быйыл тағы, хуш еҫтәрен бөркөп,
Сәскә атыр инде сирендәр.

Һүнгән һөйөүҙәрҙе хәтерләтеп,
Ап-аҡ сәскә атты сирендәр.
Һинең ирендәрҙе тағы эҙләй
Эңер-таңда минең ирендәр.

## БӨРЛӨГӘНЕМ

Аҡ ҡайындар араһында
Ҡыҙыл, бешкән бөрлөгән
Йылы ҡояш нурҙарынан
Һутҡа тулып өлгөргән.
Һине, иркәм, оҡшатамын
Ошо һутлы бөрлөгәнгә,
Өҙөүсеһен көтәһеңдер,
Шулай иртә өлгөргәнгә.
Һин бит минең бөрлөгәнем,
Илатып та көлдөргәнем.
Йөрәгемә уттар һалып,
Һағыштарҙа бөлдөргәнем.
Һине эҙләп донъя гиҙәм,
Ҡайҙа һуң һин, бөрлөгәнем?
Һин бит минең өсөн генә
Һөйөүҙәрҙә өлгөргәнем...

## ЙӘЙГЕ УРМАН

Аҡландарҙа еләк сәскә атҡан,
Тәбиғәткә өҫтәп аҡ сафлыҡ;
Күңелдәргә бөгөн күсер инде,
Йәйге урман, һинең алсаҡлыҡ.

Миҙгелдәрҙең ниндәй матур мәле,
Гүзәллеккә ҡарап таң ҡалам,
Ә мин иһә — һинең изгелекле
Ҡурайыңа ғашиҡ бер балаң.

Йәйге урман, һинең сәскәләрҙең
Хуш еҫтәрен һулап туйманым.
Көн-күрмешем минең тамуҡ булғас,
Оҗмах ошолор, тип уйланым.

## АЛТЫН ТАМЫР

Уралтауҙа үҫә йәйен
Серле үлән, алтын тамыр,
Тамырҙары ергә һеңгән,
Уны эҙләп кемдәр табыр?

Һары тамыр алыҫтарҙан
Ялтлап тора алтын төҫлө,
Кескәй генә шул үләндең
Беҙҙең яҡта даны көслө.

Уның тамыр төнәтмәһе
Йәнгә-тәнгә көстәр бирер,
Ярһыуҙарҙап бизгән йөрәк
Сәғәт төҫлө тигеҙ тибер.

Ауыр сакта һеҙгә, дуҫтар,
Алтын тамыр бүләк итәм,
Көстәр йыйып, тиҙ арала
Һауығыуҙы һеҙҙең көтәм.

Уралымда үҫә шаулап
Серле үлән — алтын тамыр.
Һаулыҡ һорап табынһағыҙ,
Тамырынан балы тамыр.

## ИШМӘКӘЙЕМ

Ҡойсо, еңгә, касаларға,
Эскем килә ҡымыҙыңды;
Тыпырҙатып бер бейейем —
Сиртсе ҡыллы ҡумыҙыңды.

Ишмәкәйем — ҡымыҙ иле,
Һыуһынымды ҡандырайым,
Йәш сағымда бейеп ҡалып,
Аяҡтарым талдырайым.

Ғүмеремдең ҡибла яғы —
Күк тирәкле Ишмәкәйем,
Ошо ерҙең һутын ала
Минең ижад шишмәкәйем.

## МУЛДАҠАЙ

Ауылымдың йәмле урамдарын
Бер яратып, байҡап үтәйем,
Малай сакты иҫкә алыр өсөн,
Йәйләүҙәрҙә йылҡы көтәйем.

Сабынлыкта үлән шашып үскән,
Ҡолас йәйеп бесән сабайым;
Йөрәгемдә моңдар бөрөләнә,
Туғайҙарҙа ҡурай табайым.
Мулдаҡайҙың гүзәл тәбиғәте
Әкиәтсә матур, хикмәтле;
Алсаҡ йөҙлө минең яҡташтарым —
Табындары һәр саҡ икмәкле.
Донъя гиҙәм бөгөн алыҫтарҙа,
Хыялымда — һаман Мулдаҡай.
Уй-зиһендә сыңлай әсәм һүҙе:
«Мәрхәмәтле булсы, балаҡай...»

## ҺӨЙӨҮҘӘРЕМ ҺИҢӘ МӘҢГЕЛЕК

Бөркөтоя, һинең ҡайындарҙы
Ҡосаҡлайым тағы һағынып;
Йәшлек һөйөүҙәрем һиндә ҡалды,
Йәшәйем тик һиңә табынып.

Аҡ ҡайындар араһында бөгөн
Кемде көтөп шулай тилмерәм?
Бөркөтоя, ниңә шымып ҡалдың?
Ҡайҙа минең йәнем, Ильвирам?

Мөхәббәтем, ҡайта ғына күрсе,
Күңелкәйем һиңә тартыла,
Төнгө күктә йәнем йондоҙ булып,
Һөйөү булып һиңә атыла.

Һинең күҙҙәреңдән саф һөйөүең
Сәсә ине ергә изгелек.
Бөркөтоя ҡыҙы! Һиңә булған
Һөйөүҙәрем минең мәңгелек.

Йәйге кистә, һөйгәнемде эҙләп,
Бөркөтоя, һиңә артылам,
Күҙ йәштәрем, моңло шишмә булып,
Сылтыр-сылтыр аға артымдан...

## ЙӘРШӘЛ

Ергән тулҡындары үбеп ала
Һинең ярҙарыңды, Йәршәлем,
Һинең йәшел үҙәндәрҙә аунап,
Ҡалайыраҡ рәхәт йәшәнем.

Йәршәл тауым, һиндә күпме йәрҙәр
Һөйөү тапҡан айлы кистәрҙә,
Һағыныуҙарым һине хаттин ашты,
Һағыш йөҙә минең хистәрҙә.

Ташморондоң шәл остары — һыгуҙа,
Итәктәре ергә береккән;
Минең яҙым һөйөүҙәрҙә үтһә,
Аһ-зарҙарға күҙем ереккән.

## ҠАРШЫ АЛСЫ МИНЕ, ҠОРАМА...

Борма юлдар ҡайҙа илтә, тиеп,
Зинһар, дусҡай, минән һорама?
Ана, алда, тауҙар араһында,
Йәйрәп ята беҙҙең Ҡорама.

Аҡ ҡайынлы һылыу урмандары
Сафлыҡ өҫтәй тыуған яғыма.
Һағыш тулы Миәс ярын ташлап,
Ҡайтам әле йәшлек сағыма.

Мөхәббәтем мине юкһыналыр,
Ашығамын һиңә, Ҡорама.
Һөйөүҙәрем һаман сафмы, тиеп,
Күҙҙәремә һынап ҡарама?

Ҡыҙыл еләктәрең уҫҡа һалып,
Тәмләме, тип, минән һорама!
Минең ғүмер сит ерҙәрҙә үтә,
Һөйөүҙәрем һиндә, Ҡорама.

Пар аттарын егеп, гармун һуҙып,
Кемдәр йөрөй, тимә, урамда? —
Һөйгәнемде эҙләп ҡайтып киләм,
Ҡаршы алсы мине, Ҡорама.

## КӨМӨШ ТУЙ

Тауҙар араһында йәйрәп ята
Зәңгәр күлле моңло Әүешем.
Һине данлап бөгөн шиғыр яҙам,
Ҡалһын тиеп минең дәү эшем.

Әүеш, һиңә кейәү булдым инде,
Һөйгәнем бит Әүеш яғынан.
Һинең тәбиғәттең гүзәллеге
Күскән уға бала сағынан.

Күл тирәләй — матур шыршы урман,
Утрауында — ҡуйы муйыллыҡ.
Көмөш туйҙы бөгөн билдәләргә,
Әүешкүлем, һиңә йыйылдыҡ.

Әйҙә, дуҫтар, түргә уҙығыҙсы,
Өлгөрткәндер ҡайнәм бәлешен,
Һөйөүҙәрҙә үткәрергә яҙһын
Ғүмерҙәрҙең ҡалған өлөшөн!

Яҙғы кистә, беҙҙе ҡайнар ҡотлап,
Моңға тулған гүзәл Әүешем,
Әүеш буйҙарында тыуып үҫкән
Өлөшөмә төшкән көмөшөм.

## УЛЫМ ТЫУҘЫ

Тыуған яҡтан әле хәбәр алдым,
Тыуған икән минең улҡайым!
Йүгереп-осоп юлға сығам бөгөн,
Булмаһа ла ҡайтыр юлҡайым...
Ишетегеҙ, улым тыуған минең!..
Шатлығымдан шашып илайым,
Илау нимә! Ҡыуаныстан хатта
Бар донъяға йырҙар йырлайым!
Бәләкәсем тыуған! Шуның өсөн
Ярһып тибә минең йөрәгем.
Улым — минең йәшлек дауамы ул,
Ул буласаҡ минең терәгем.
Улым тыуған минең, ҡыуанамын...
Өмөттәрем минең аҡланды.
Былай булғас, беҙҙең нәҫел тағы,
Бер башҡортҡа артты, һаҡланды.
Ҡатынҡайым, рәхмәт яуһын һиңә,
Йәшәү бирҙең беҙҙең нәҫелгә;
Уралыма килә йылы яҙым —
Тыуған ерем ҡарҙан әрселгән.
Улым тыуҙы, былай булғас, беҙҙә
Тынмаҫ әле ҡурай моңдары,
Йыр-моңдарға күмеләсәк әле

Уралымдың алһыу таңдары.
Улым тыуҙы, ҡайын бөрөләре
Тулған саҡта татлы һутына,
Үҫеп еткәс, батыр Салауаттай,
Менер әле толпар атына.
Кәрәк булһа, ирек даулап, улым
Яуға сабыр иле хаҡына;
Башҡорттарым, йыйын кәрәк, тиеп
Оран һалыр башҡорт халҡына.
Ҡатынымдан әле хәбәр алдым —
Тыуған икән минең улҡайым!
Йүгереп-осоп юлға сығам бөгөн,
Булмаһа ла ҡайтыр юлҡайым.
Улым тыуған минең, шуның өсөн
Иртә таңдан шашып ҡыуанам.
Эргәгеҙгә ҡайтыр юлдарым юҡ —
Шиғырым ҡайтһын — шуға йыуанам...

## ИЛАМАЙЫМ

*«Илар мәлдәр була... Иламайым!»*
*Рәшит Назаров*

Илар мәлдәр була... Ә шулай ҙа
Иламайым, түҙәм, тыйылам,
Ояламын ҡайсаҡ дуҫтарымдан,
Үҙ-үҙемдән ҡайсаҡ оялам.
Күҙ йәштәрен тыям. Тыялмайым:
Күңелемдең әрнеп үкһеүен,
Ләйсән ямғыр кеүек ҡыҫҡа ғына
Йәшлегемдең бик тиҙ үтеүен.
Илар мәлдәр була... Мөлдөрәмә
Күҙ йәштәрен түкмәй түҙәмен,
Сабырлыҡтың алтын һыуҙарында
Түҙем аҡҡош төҫлө йөҙәмен.

* * *

Был яҡтарҙа ҡурай үҫмәй икән,
Эҙләп таптым саҡ-ҡа бирәүһен;
Тулап ҡына китте күңелдәрем,
Танһыҡ ҡаныр, тине, күрәһең.

Ҡурайғынам, бер аҙ ҡыйынһынам,
Һин илайһың, ә мин йыуанам;
Ҡурай тартып ҡына оҙатығыҙ,
Өмөттәрем һүнеп ҡолаһам.

* * *

Ауылға илткән ат юлын
Аҡ буран киткән күмеп,
Мәктәптән ҡайтып киләбеҙ,
Өшөп, күҙ йәшен түгеп.
Шатланыр инем, һай, нисек,
Тыуған йорт утын күреп,
Ҡайтып етер инем өйгә,
Хистәрҙән хыял үреп.
Әсәкәйем ҡулдарымды
Йылытыр ине үбеп,
Бешерер ине картуфын,
Мейес көлөнә күмеп.
Улым, йылын, тиер ине,
Мамыҡ шәленә төрөп;
Мәтрүш сәйен эсер инем,
Ҡабалан, өрөп-өрөп.
Ҡыҙыу мейес йылыһынан
Мин китер инем иреп, —
Әсәкәйем наҙлар ине,
Йөрәк йылыһын биреп.

...Тормоштағы яҙмыш юлын
Һағыштар киткән күмеп;
Әсәкәйем көтә микән
Ҡайнар йәштәрен түгеп?..

## ҺАРЫ МАЙҘА — КӨРТМӘЛЕ

Әсәй ебәргән күстәнәс —
Һары майҙа — көртмәле.
Дуҫтарым әйтә: «Илама,
Күҙ йәшеңде һөрт әле?»

Бошонмай буламы инде,
Күңелдең тулған мәле. —
Иҫкә төшә әсәй менән
Йыйған саҡтар көртмәле.

Йәшеллеккә күмелгән ер,
Миҙгелдең матур мәле,
Ҡарағайлы урманында
Мүк өҫтәре — көртмәле.

Эргәлә шишмә сылтырай,
Уның йырлаған мәле,
Урман тулы бала-саға
Йыя ҡыҙыл көртмәле.

Көртмәле — әскелтем емеш,
Нисек һуң уның хәле?
Быйыл да мул уңыш биргән
Эре ҡыҙыл көртмәле.

Әсәй ебәргән күстәнәс —
Һары майҙа — көртмәле:
Минең янға ҡасан ҡайтаң,
Улым, шуны әйт әле?!

## БАЛАН БӘЛЕШЕ

Тышта буран. Мейес яғып,
Әсәй бешерә бәлеш;
Ҡустым менән өйөрөләбеҙ,
Көтөп бәлештән өлөш.
Балан бәлеше йолала —
Оло ҡунаҡтар өсөн;
Йәнгә-тәнгә өҫтәй, тиҙәр,
Үҙенең серле көсөн.
Өҫтәлдә балан бәлеше —
Йорттоң муллылыҡ йәме;
Ҡунаҡтар ауыҙ итһендәр,
Гүйә бал уның тәме.
Күңелдәрҙе күтәрә шул
Ошо хикмәтле бәлеш,
Бәлештән һуң китә инде
Ҡаршы таҡмаҡтар әйтеш.
Иркен йортта, мейес яғып,
Әсәй бешерә бәлеш;
Беҙгә ҡунаҡҡа килегеҙ,
Һеҙгә лә тейер өлөш!

## ҺИҢӘ ҠАЙТТЫМ

Аңҡыныпы мин һиңә ҡайттым,
Һаумы әле, йәшел туғай!
Әйтерһең дә, тыуған яҡҡа
Осоп ҡайтҡан мин — бер турғай,
Шуға бөгөн шатлығымдан
Күңелкәйем йырлай, буғай.

Елгә сыңлай көпшә үлән,
Һаумы әле, моңло ҡурай!
Зарығып мин һине таптым,

Оҙон юлдар урай-урай,
Бөгөн шуға минең күңел
Зар илатып моңдар һорай.

Ер өҫтөнә һыу урғыла, —
Һаумы әле, серле шишмә!
Сәләмләйем дуҫты, тиеп,
Юҡҡа ғына ерҙе тишмә,
Һағыштарыңды бушатып,
Серҙәреңде миңә сисмә.

Ун йылдан һуң һиңә ҡайттым,
Һаумы әле, һаумы, әсәй!
Алсаҡ йөҙөң һинең бөгөн
Ниңә әле нурҙар сәсмәй?
Сал сәсеңде йәшерәһең,
Яулығыңды юрый сисмәй.

* * *

Йәшелләккә сумған ауыл,
Тынып ҡалған йәй кисе,
Көтөү ҡайтҡан, мал ҡаралған,
Аңҡый ерҙән һөт еҫе.
Баҡса алдары йәнләнгән —
Хәбәр һата ҡарт-ҡоро,
Йәйге кистәр — йәштәр өсөн
Күңел асыу осоро.
Урман сите моңға тулған,
Ҡуҙ атып яна усаҡ.
Етеҙ егет һөйгәненә
Сәскә тотҡан бер ҡосаҡ.
Дәртле бейей йәш-елкенсәк,
Ҡыҙғандан-ҡыҙа уйын.

Тынлыҡ баҫҡан, сихри тынлыҡ
Ҡарағаслы күл буйын.
Бик хозурлы беҙҙең яктың
Бөтнөк еҫле йәй кисе,
Ҡанатланған көндәрҙе
Солғай мөхәббәт хисе.

## БАҪМАҠ

Күл буйында, һыу өҫтөндә
Иҫке генә ағас баҫмаҡ.
Шунда килеп кер сайҡайһың,
Уйланыңмы минән ҡасмаҡ?

Яндарыңа уҙа һалып,
Булдым һиңә серем асмаҡ.
Аяҡ тайып, һай, ҡоланым,
Бәлдөрҙөң бит мине, баҫмаҡ.

Сер тигәнем, ябай ине —
Булған инем һине ҡосмаҡ,
Хәҙер инде аңлашыла:
Көнләшкәндер һине баҫмаҡ.

* * *

Төпгөремдә бөгөн тугай күрҙем,
Сәхрәләрҙә зөмрәт йәшеллек,
Юш килер ҙә кеүек, ях, үткәнем,
Ҡай ерҙәргә ҡасып йәшендең?

Был ни гәжәп, әллә ысынлап та
Юкһынамы мине туғайҙар?
Аҙашҡан да дуҫын саҡырып әллә
Һайрашамы икән турғайҙар?

Аҙашып мин миттә йөрөп ятам,
Әйтерһең дә, ҡошсоҡ балаһы,
Күңелемә уны сәсеп кенә
Үҫтерепме икән алаһы.

## МИҘГЕЛДӘР

Шатлыҡ илтеп, ергә яҙым килә:
Әрселгәндәр ҡарҙан үҙәндәр,
Үҙәндәрҙә бөрөләнеп кенә
Баш ҡалҡыта йәшел үләндәр.

Шатлыҡ өҫтәп, матур йәйем килә:
Уралымдың алһыу таңдары,
Күңелемә минең ялдар бирә
Башҡортомдоң гәзиз моңдары.

Шатлыҡ сәсеп, алтын көҙөм килә:
Баҫыуҙарҙан уңыш алғандар.
Һары күлдәк кейгән урмандарым
Уйға сумып, тыныш ҡалғандар.

Ерҙе күмеп аҡ-ҡа, ҡышым килә,
Бурандары ҡарҙар уйната,
Яңы йылдың һуҡҡан минуттары
Яҙҙы, йәйҙе, көҙҙө уйлата.

## ЯҘМЫШ ШУЛДЫР

Зар илатып алып китте мине
Яҙмыш упҡынының ағышы,
Үҙ ҡулдарым менән ҡылғандарым —
Яҙмышымдың микән ҡарғышы.

Тән семерҙәп китә, иҫкә төшһә,
Ҡанды эскән төрмә беттәрен;
Күргән һайын ҡойолам да төшәм,
Теш ыржайтҡан конвой эттәрен.

Яҙмыш шулдыр, күрәсәктер күптән,
Маңлайыма минең яҙылған;
Бер минме ни тынсыу төрмәләрҙә,
Этаптарҙа шулай ҡағылған.

Яҙмыш шулдыр; ирек, тормош йәмен
Яңы ғына аңлай башланым;
Булмышымдың насар ҡылыҡтарын
Инде күптән, дуҫтар, ташланым.

Яҙмыш шулдыр: күптән үлер инем,
Һағыштарҙа ҡурай булмаһа;
Серле моңдар таба алмаҫ инем,
Йөрәгемә һағыш тулмаһа.

## РӘХМӘТ ҺЕҘГӘ!

Нисәнсе йыл минең йөрәгемдә
Нәфрәт менән һөйөү алышты;
Ят кешеләр, миңә ҡулын һуҙып,
Изгелеккә юлдар һалышты.

Аҙашып, мин ерҙә гонаһ ҡылдым, —
Хоҙай биргән шундай яҙмышты;
Минең кеүек әсе яҙмыштарҙа
Күпме кеше шулай яңылышты?!

Кешеләргә рәхмәт! Ауыр саҡта,
Ят кешеләр миңә булышты:
Хайран ҡалам, изге эштәренән
Үҙгәрттем мин ауыр булмышты.

Изгелеккә бөгөн юлдар ярам,
Иркенерәк алып һулышты;
Рәхмәт һеҙгә!.. Тағы минең күҙҙәр
Мөлдөрәмә йәшкә тулышты...

## ҺӨЙӨҮҘӘРЕҢ — ӘСЕ БАЛАН

Сыуаҡ көндә устарыма
Һалған инең әсе балан,
Хәҙер беҙҙең һөйөүҙең дә
Тик әсеһе миңә ҡалған.

Йәнә килдем, балан менән
Силәктәрең тағы тулған.
Ҡараштарың тулы шатлыҡ,
Бөгөн һиңә нимә булған?

Көлә-көлә устарыма
Һалаһыңсы әсе емеш;
Һөйөүҙәрҙең иң тәмлеһе —
Татлы түгел, әсе, имеш.

Тәмлә, тиһең, тәү ҡабыуға,
Балан да бит әсе төҫлө,

Ә шулай ҙа бәлешенең
Беҙҙең яҡта даны көслө.

Бөгөн тағы устарыма
Һалаһың һин әсе емеш;
Наҙҙарыңа сумам тағы,
Их һин — еңмеш, их һин — еңмеш...

## ИБЛЕЙ БУЙҘАРЫНА ҠАЙТАЙЫМ

Иблей буйҙарында ҡалды минең
Бала саҡтың шаян йылдары;
Кескәй йөрәгемә һөйөү һалған
Ҡурай менән салғы сыңдары.

Йылы йәйҙә һиндә тәкә көттөм,
Ә ҡыштарын һарыҡ ҡараштым.
Йөҙ һарыҡтан йөҙ ҙә илле бәрәс
Алыр өсөн күпме тырыштым.

Ата-әсәм эшсәнлеге шулай
Күсте миңә бала сағымдан...
Алыҫ ерҙән бөгөн ҡайтып киләм,
Күҙем алмай тыуған яғымдан.

Иблей шишмәһенән һөҙөп кенә
Саф һыуҙарын эсеп ҡалайым,
Ауылдаштар тирләп бесән саба,
Дуҫтарыма һөрән һалайым.

Һарыҡ көтөп, берәү ҡурай тарта
Иблей буйындағы болонда;
Шул малайға ҡарап, мин һыҡтайым
Учалының борма юлында.

# ДИНӘ ТАЛХИНА

# КҮҢЕЛДӘРЕМ НЕСКӘРГӘН МӘЛ





*Мин, Динә Азат ҡыҙы Талхина (Хафизова), 1952 йылдың 27 июлендә тыуғанмын. Силәбе өлкәһенең гүзәл Арғаяш яҡтарына булған һөйөүем, күңел нескәргән мәлдәрҙәге уй-кисерештәрем ошо йыйынтыҡтағы шиғыр-йырҙарға төйнәлгән.*

*Мәтәл һигеҙ йыллыҡ мәктәбе, Өфөләге беренсе интернат-мәктәп, Башҡорт дәүләт университеты, Миндәк урта мәктәбендәге уҡытыу йылдары, Учалы район гәзитендә хаттар бүлеге мөдире, әлеге көндә Башҡортостан «Китап» нәшриәтенең балалар әҙәбиәте бүлеге мөдире — минең тормош һәм хеҙмәт юлым.*

*Балалар өсөн ике әкиәттәр йыйынтығым донъя күрҙе. Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһымын.*

***Динә***

* * *

Башҡортомдоң кейеме,
Йыр-моңдары, бейеүе...
Һоҡланып та туя алмам!
Әсе яҙмышлы ғорур халҡыма
Һөйөүемде тыя алмам!

## МИНЕҢ ТЕЛЕМ

Минең телем —
Башҡорт теле.
Минең телем —
Йәшел бөрө.
Ҡояш булһа,
Япраҡҡа әйләнә,
Күккә тартыла,
Йәмләнә, йәнләнә,
Һалҡындарҙан
Ул төйөлә,
Яҙын
Йәшелгә кейенә.
Минең телем —
Йәшел бөрө.
Ул тере, тере, тере!

## МИНЕҢ ИЛЕМ

Минең илем —
Сәскә туғай,
Өҙөлгән сәскәләре.

Минең илем —
Моңло ҡурай,
Күҙҙәрем йәшкәҙәне.

Минең илем —
Һабантурғай,
Тауышҡайы өҙөлә.

Минең илем —
Юртаҡ юрға,
Егеттәр салына күҙемә.

## МИНЕҢ ХАЛҠЫМ

Минең халҡым —
Көмөш йондоҙ,
Алтын ай.
Минең халҡым —
Ҙур йылға,
Аға талғын,
Аға яй.
Ә бит йондоҙҙоң
Бар атылыуы,
Айҙың болот артына
Ҡасыуы,
Йылғаның ярҙарынан
Ташыуы.

* * *

«Теле юктың иле юк» тиҙәр.
Телем әлегә бар.
Тик халҡымдың
Бөрө күңеленә
Күпме йылдар
Яуа ҡар...

* * *

«Сабырлыктың төбө һары алтын» тиҙәр.
Тик ашала алтын да.
Сабыр итә-итә
Меҫкен хәленә ҡалды
Минең халҡым да...

## БАШҠОРТ ҺЫЛЫУҘАРЫНА

Ах, башҡорт һылыуҙары,
Ах, ҡара толомдары,
Ах, матур толомдары.
Шул һылыуҙар толомона
Тәңкәләр таҡһаң ине,
Тәңкәләр таҡһаң ине.
Тик Ағиҙел һыуҡайҙары
Кирегә аҡмаҫ инде,
Кирегә аҡмаҫ инде.
Ах, башҡорт һылыуҙары
Тәңкәләр таҡмаҫ инде.

Йөрәккенәм һыҙыла,
Йөрәккенәм һыҙыла,
Күңелемә моң ята,
Күңелемә моң ята ла
Үткәндәрҙе уйлата,
Үткәндәрҙе уйлата:
Бәрхәт еләң, уҡа семәр,
Көмөш тәңкә, сулпылар...
Бәлки, берәй һылыуҙың
Йөрәккәйе һулҡылдар,
Йөрәккәйе һулҡылдар.

Ул Ағиҙел буйҙарынан
Тәңкәләр йыйып алыр,
Оҙон көйҙәр һуҙа-һуҙа,
Ҡашмауға семәр һалыр,
Ул семәрҙәр һалыр ҙа
Сәсенә үреп алыр.
Бәлки, шунда күкрәгемдә
Хәтәр көстәр уяныр.
Шул көстәрҙе һиҙер ҙә
Ағиҙел дә уйланыр,
Ағиҙел дә уйланыр...

## БЕЙЕЙЕК ӘЛЕ ПАРЛАП!

Һалмаҡ ҡына бейеп киттем,
Хәрәкәттәр килешле.
Алдарыңа килеп баҫтым —
Өләшөңә төшкән көмөш мин.

Ҡыйғас ҡашың күтәрелде,
Осҡонланды күҙҙәрең.
Тыпырҙатып һин дә баҫтың —
Кәрәк түгел һүҙҙәрең!

Сая ҡоштай осоп төштөң,
Мин яныңда талпындым.
Йәнәш бейеү — матур йола
Беҙҙең башҡорт халҡының.

## ҺЫУ ЮЛЫ

Һыу юлынан килен атлай,
Тамаша бар урамға,
Йылмайыша ололар,
Хәтирәгә урана.

Көмөш тәңкә, күпме тәңкә
Йылға төбөндә ята...
Хәҙер инде уландары
Килендәр алып ҡайта.

Һыу юлынан килен атлай,
Йылмайыуы бите осонда:
Көлөшәләр бикәстәре,
Көмөш тәңкә усында.

Көмөш тәңкә һыуға төшөр,
Асылыр һыу юлдары.
Һөйөү менән бәхет кенә
Сиртһен ғүмер ҡылдарын.

## ҺИНЕ КӨТӘМ

Еләнкәйем шау ука,
Уҡаларын ел һүтә.
Елән кейеп, ҡашмау тағып,
Мин, иркәм, һине көтәм.

Уҡаларҙы ел һүтә лә
Алып китә осороп.
Иркәм бөгөн килерме, тип
Көтөп торам борсолоп.

Осоп киткән уҡаларҙы
Иркәм йыйып алырмы?
Берҙән-берем, һөйгәнем, тип,
Күҙҙәремә бағырмы?

## ТАЛИР ТӘҢКӘ ТОЛОМОМДА

Талир тәңкә толомомда,
Сыңлатып та үтәйем.
Бер һирпелеп ҡарап ҡына
Һине ғашиҡ итәйем.

Талир тәңкә толомомда,
Алтынһыуға манылған.
Бер һирпелеп ҡарап ҡына
Үтеп киттем янынан.

Талир тәңкә — толомомда,
Толомомдо билгә ураным.
Һине ошо толомдарға
Урарымды юраным.

## СУЛПЫЛАРЫМ СЕМӘР-СЕМӘР

Көмөш сулпыларым семәр-семәр,
Фирүзәнән ҡаштары.
Шул сулпыларҙы тағып килһәм,
Әйләнмәҫме баштарың?

Көмөш беләҙегем селтәр-селтәр,
Аҫылташтар уйылған.
Шул беләҙекте тағып килһәм,
Һоҡланыуҙан тыйылма!

Бәрхәт еләнкәйем биҙәк-биҙәк,
Алтын ука сигелгән.
Күңелеңә ятайым, тип
Күҙ нурҙарым түгелгән.

Кейемдәрем ялтлап тора —
Йөрәк борсолоп тибә.
Башҡорт затлы аҫыл егет
Ҡарамай ниңә?

## НИҢӘ МИН ҠУРАЙ ТҮГЕЛ?

Ҡулдарың һинең, иркәм,
Тотто шыҡһыҙ көпшәне,
Ирендәрең уға тейҙе,
Йәнең менән уға түшәлдең.

Былдай наҙҙан, иркәнән
Үләнгә лә йән инде:
Һинән сыҡҡан моң менән
Тирә-яҡты ул күмде.

Шул ҡурайҙың моңонан
Йөрәккенәм туланы.
Ҡурай булмағаныма
Әрней-әрней иланым.

## ӨҘӨЛӘ ҮҘӘК, ӨҘӨЛӘ

Һин ҡумыҙҙа уйнағанда
Эй үҙәгем өҙөлә.
Үкенестәр мәрйен булып
Оҙон епкә теҙелә.

Шул мәрйенде тиҫбе итеп
Тарта-тарта төңөләм.
Үткәндәрҙе һағындырған
Моңһоу көйгә күмеләм.

Шул һағыштарҙан һин дә, иркәм,
Йәшермә, азат түгел.
Яңғыҙ ҡалһаң, һин илайһың,
Илайһың йәштәр түгеп.

## ТӨШТӘРЕМДӘ АТТА ЕЛДЕМ

Төштәремдә атта елдем,
Елдә осто еләнем.
Арттарымдан һинең һыбай
Елеүеңде теләнем.

Бына һыбай килеп сыҡтың,
Елдәй артымдан саптың:
«Әһә, һылыу, тотолдоң,
Ҡапҡанға килеп ҡаптың!»

Ошо һинең һүҙҙәреңдән
Уяндым тертләп китеп.
Үтмәһә ине ғүмер,
Бәхетле мәлде көтөп.

## ҠУШЪЯУЛЫҠ

Өләсәйем мираҫы —
Ҡушъяулығы башымда.
Мөлдөрәп тә ҡарап,
Баҫып торам ҡаршыңда.

Ҡушъяулығым тәңкәләрен
Сыңлатырмы ҡулдарың?
Йәнәшәнән үтерме
Ғүмеребеҙ юлдары?

Икеләнеп, иркәләнеп
Күҙҙәреңә төбәләм.
Өләсәмдәй бәхет теләп,
Ләйсән ямғыр һибелә.

## ЙЫРҘАРЫМ МИНЕҢ ҠОШТАРҘАН

Аҡҡошҡай — һылыу ҡошҡай,
Яңғыҙ йырың өҙә үҙәкте.
Мин дә шулай яңғыҙ ҡалһам,
Моңһоу йырҙар бөтә йөҙәтеп.

Һандуғасҡай — һары ҡошсоҡ —
Һағышынан моңға күмелә.
Мин дә шулай һағыштарҙан
Йырҙар ғына булып түгеләм.

Һабантурғай — һоро ҡошсоҡ —
Зәңгәр күктә йырҙар йомғағы.
Һинең төҫлө йөрәгемә,
Йөрәгемә йырҙар йомғанмын.

## КУГҮЛӘН

Ауылымдың урамында
Кугүләң күп(е)реп үҫә.
Шул үләнгә аяк баҫһам,
Үткәндән елдәр иҫә.
Кугүләң өҫтәрендә
Күмәкләп бәпкә көттөк.
Кугүләң өҫтәренән
Бала саҡ сабып үтте.
Кугүләң, кугүләң,
Төшөмдә һине күрәм.
Ауылымдың урамынан
Кугүләң буйлап ҡына
Атлап киләм дуҫтар менән,
Үткәнде уйлап ҡына.
Йәшел үлән өҫтөндә
Аҡ елкәндәр йөҙҙөрҙөк.
Йәйғорҙо тотайыҡ, тип,
Хыялланып йүгерҙек.
Кугүләң, кугүләң,
Төшөмдә һине күрәм.
Ауылымдың урамында
Кугүләндәр бөтмәһен.
Сәстәремә сал төшһә лә,
Килә бәпкә көтәһем.
Кугүләндең өҫтөндә
Балалар сыр-сыу килә.
Һары йомғаҡ себеште
Төйләгән алмаҫ, тимә.
Кугүләң, кугүләң,
Төшөмдә һине күрәм.

## МӘКТӘБЕМ ИХАТАҺЫ *

*Беренсе республика башҡорт гимназияһы уҡыусыларына һәм уҡытыусыларына бағышлайым*

Мәктәбемдең ихатаһы
Гөл-сәскәгә күмелгән.
Һәр сәскәнең таждарына
Иҫтәлектәр үрелгән.

Ҡушымта: Анау юлдың ситендә
Һин мине көтә инең,
Ә мин һине күрмәйенсә
Вайымһыҙ үтә инем.

Мәктәбем ихатаһы...
Ағастар буйға еткән.
Уларҙың да башынан
Күпме тиҫтә йыл үткән.

Ҡушымта: Анау миләш япрағын
Һин миңә биргән инең,
Утлы тәлгәш еләктәрҙе
Бергәләп тиргән инек.

Мәктәбемдең ихатаһы...
Гөж килә бала-саға.
Мәктәбемә тәү килгәндәй,
Йөрәгем ярһып тибә.

Ҡушымта: Уҡытыусы, дуҫтарым
Бигерәк һағындырған.
Һәр ҡайһығыҙ йылмайыуы
Шатлыҡтар ҡабындыра.

---

* Р. Сәхәүетдинова музыкаһы.

## ИРЕМ МИҢӘ ЙӘР БУЛМАҺА...

Ирем миңә йәр булмаһа,
Йәшәүҙәрҙән йәм тапмам,
Ер еләге-бал тамсыһын
Башҡа ҡулынан ҡапмам.

Ер еләге шундай татлы
Йәрем өҙөп биргәнгә,
Ҡулдарыбыҙ ишелешеп,
Еләктәрҙе тиргәнгә.

Ирем миңә йәр булмаһа,
Йәшәүҙәрҙән йәм тапмам,
Ал таңдарҙың ҡосағында
Башҡаларға һүҙ ҡатмам.

Таң наҙҙары шундай татлы
Йәрем янда булғанға,
Бар булмышым һөйөү менән,
Һөйөү менән тулғанға.

## КӨҘГӨ ЯПРАҠ

Көҙгө япраҡ семәр-семәр,
Күҙҙәрҙең яуын ала,
Күҙҙәрҙең яуын ала ла
Уйҙарға мине һала.

Беҙҙең һөйөү — көҙгө япраҡ,
Үҙе матур, йәл үҙе.
Елдәр уны шаярта ла,
Ташлайҙар аҙаҡ өҙөп.

Көҙгө япраҡ алтын-бутал,
Ҡояш нурҙарын йыйған.
Һуңлап килгән һөйөүемдән,
Аҡылым, мине тыйма!

Көҙгө япраҡ ҡаурый-ҡанат,
Талпынып оса күктә.
Был көҙҙәрҙең балҡыштары
Һүҙылмаҫ инде күпкә...

## ЭРГӘМДӘ БУЛҺАҢ ИКӘН! [*]

Ҡар бөҙәге булып ҡына
Усыңа ҡуныр инем.
Күҙҙәреңдең яуын алып,
Бер ялтлап алыр инем!
Күҙ йәшеңә әйләнер ҙә
Усыңда ҡалыр инем.

Аҡ ямғырҙар булып ҡына
Сикәңдән һөйөр инем.
Йәйҙәреңдең йәме булып,
Бер балҡып алыр инем!
Күҙ йәшеңә әйләнер ҙә
Усыңда ҡалыр инем.

Аҡ томандар булып ҡына
Ҡосаҡлап алыр инем.
Бер яндырып, бер туңдырып,
Уттарға һалыр инем!
Күҙ йәшеңә әйләнер ҙә
Усыңда ҡалыр инем.

[*] С. Низаметдинов музыкаһы.

## ҠАРАШТАРЫҢ

Ҡараштарың һинең шундай моңһоу...
Күҙ йәшеңә, зинһар, быуылма.
Ана, күркәм болоттар ҙа бит
Һалҡын елдәрҙән ҡыуыла.

Ҡараштарың һинең шундай моңһоу...
Уфтанмасы, зинһар, үтенәм.
Ҡайындың да алтын толомдары
Һалҡын елдәрҙән бит һүтелә.

Ҡараштарың һинең шундай моңһоу...
Яратам, тип миңә уҡталма.
Үҙ ҡояшым күктә балҡығанда
Ят шәмдәрҙән бит мин ут алмам.

## ИКЕБЕҘГӘ ЗӘҢГӘР БЕР КҮК *

Икебеҙгә зәңгәр бер күк,
Йәйғорҙар балҡышы,
Туғайҙарҙың сәскәләре,
Болоттар ағышы.

Болоттарҙың ағышылай
Үтә беҙҙең ғүмерҙәр.
Юлдарыбыҙ аймылыш,
Быға нисек түҙергә?!

Икебеҙгә бер миҙгелдәр,
Күҙҙәрҙең һағыштары,
Йылы йәйҙең, зәңгәр яҙҙың
Ямғырҙар сабыштары.

---

* Ю. Моратов музыкаһы.

Ямғырҙар сабышылай
Үтә беҙҙең ғүмерҙәр.
Юлдарыбыҙ аймылыш,
Быға нисек түҙергә?!

## ТӨШТӘРЕҢӘ ҺИНЕҢ КЕРӘМ *

Төштәреңә һинең керәм,
Болоҡһотам күңелде.
Ана, керпек осона
Тағы ысыҡ эленде.

Төштәреңә һинең керәм,
Үкендерәм түгелме?
Моңһоуланды күҙкәйҙәрең,
Һағыштарға күмелде.

Төштәреңә һинең керәм,
Һаташтырам таңдарҙа.
Башҡаларға йән атма
Был донъяла мин барҙа!

## ҠОРАЛАЙ

Сәскәле генә ялан буйлап
Елеп тә бара ҡоралай.
Ҡоралайҙай беҙҙең ғүмер
Уҙа беҙҙән һорамай.

Ҡоралай, ҡоралай,
Моңһоу күҙле гүзәл кейек,

* Низаметдинов музыкаһы.

Үләнгә түгел, йөрәккә,
Йөрәккә үттең тейеп.

Ҡоралай, ҡоралай,
Ҡупшы тояҡ, осҡор кейек,
Һиңә генә оҡшап йәшлегем
Үтеп тә китте бейеп.

Ҡоралай, ҡоралай,
Суҡ-суҡ мөгөҙ, матур кейек,
Һөйөлдөңмө был донъяла,
Өлгөрҙөңмө һин һөйөп?

Сәскәле генә ялан буйлап
Елеп тә үтте ҡоралай.
Ҡоралайҙай ғүмер үтә
Әйләнеп тә беҙгә ҡарамай.
Эх, әйләнеп шул ҡарамай...

## ӘСӘЙЕМӘ

Яҙҙар еткәс, сәскә өҙөп,
Әсәмә барам.
Мин бәхетле, ул ҡаршылай:
«Һаумы, балам! Һаумы, балам!»

Йәйҙәр йәмен әсәйемә
Күрһәтә алам.
Эй шатлана әсәкәйем:
«Рәхмәт, балам! Рәхмәт, балам!»

Көҙгө ямғыр һағыш һала —
Серләшә алам.
Эй йыуата әсәкәйем:
«Сабыр, балам! Сабыр, балам!»

Ҡышҡы селлә. Әсәйемде
Ҡунаҡҡа алам.
Ул өлтөрәп килеп етә:
«Һаумы, балам! Һаумы, балам!»

Ә мин эстән шыбырлайым:
«Рәхмәт, аллам! Рәхмәт, аллам!
Әсәкәйем иҫән саҡта,
Мин — һаман бала. Мин — һаман бала!»

## ТУЙ ЙЫРЫ

Һөйгәненә йәш егет
Алтын балдаҡ кейҙерә,
Һөйөү тулған ҡарашы
Көйҙөрә шул, көйҙөрә.

Йәшлек туйы,
Тәүге туйҙар
Көмөшләнһен, алтынланһын.
Һөйөүҙәре һүрелмәһен,
Ялҡынланһын, ялҡынланһын.

Һөйгәненә һылыу ҡыҙ
Алтын балдаҡ кейҙерә,
Һөйөү тулған ҡарашы
Көйҙөрә шул, көйҙөрә.

Үбешәләр, көлөшәләр,
Сәстәр сәскә бәйләнә,
Яңы ғына яттар шулай
Иң яҡынға әйләнә.

## ЙӘШЕЛ ЯУЛЫҠ *

Әсәйемдең иңенә
Атайым яулыҡ һалды.
Был бәхетле мәлдәрен
Хәтерем тотоп ҡалды.

Йәшел яулыҡ, йәшел яулыҡ...
Төҫкәйҙәре уңды инде.
Атайымдың тауышҡайы
Был донъяла тынды инде.

Әсәйемдең иңенә
Атайым яулыҡ һалды,
Кәләше матур икән, —
Аптырап, туҡтап ҡалды.

Йәшел яулыҡ, йәшел яулыҡ...
Төҫкәйҙәре уңды инде.
Әсәйемдең сәскәйенә
Ап-аҡ ҡарҙар ҡунды инде.

Әсәйемдең иңенә
Атайым яулыҡ һалды.
Тик бәхеттәре төш булып,
Төш булып ҡына ҡалды.

Йәшел яулыҡ, йәшел яулыҡ...
Үткәндәрҙе ҡуҙғата,
Үткәндәрҙе ҡуҙғата ла
Йөрәктәрҙе һыҙлата.

---

* Н. Абдуллина музыкаһы.

## ТАҒЫ ЙӘЙҘӘР ЕТТЕ*

*Атайым Хафизов Азаттың якты иҫтәлегенә бағышлайым*

Йылы йәйҙең йәме —
Йәйғор балҡып яна,
Ергә ямғыр түгел,
Ергә гәүһәр тама.
Атай, атай,
Тағы йәйҙәр етте:
Аҡ сәскәләр атты яланда,
Салғы тотоп, күҙ алдымда
Һин тораһың һаман да.

Йылы йәйҙең йәне —
Һандуғаскай өҙә үҙәкте.
Йәй туғайҙарға сигә
Аҫылдарын биҙәктең.
Атай, атай,
Тағы йәйҙәр етте:
Бер туҡтауһыҙ кәкүк саҡыра,
Һиңә йылдар һанағанда
Һаҡауланған, бахырың.

Йылы йәйҙең тәме —
Ер еләге бал ғына.
Һибелеп кенә үҫкән,
Силәгеңде ал ғына.
Атай, атай,
Тағы йәйҙәр етте:
Аҡланҡайҙар шау гөл генә,
Ҡайтмаҫҡа ғына киттең һин,
Йәйҙәр килер гел генә.

---

* А. Ҡобағошов музыкаһы.

## ҺАҒЫНЫРҺЫҢ ӘЛЕ, ҺАҒЫНЫРҺЫҢ *

Һағынырһың әле мине, һағынырһың
Ярһыу яҙҙың ташҡынында.
Ташҡанында һинең хистәрең,
Мин булмамын яндарыңда.
Нишләрһең һин, нишләрһең?

Һағынырһың әле мине, һағынырһың
Йәмле йәйҙең таңдарында.
Таңда ҡоштар өҙөр үҙәкте.
Мин булмамын яндарыңда,
Үткәндәрҙе булмаç төҙәтеп.

Һағынырһың әле мине, һағынырһың
Күркәм көҙҙөң ҡырҙарында.
Көҙҙөң йәме йәнде ҡыйыр.
Мин булмамын яндарыңда,
Бер йөрәккә һағыш нисек һыйыр?

Һағынырһың әле мине, һағынырһың
Һалҡын ҡыштың буранында.
Моңһоуланыр һинең ҡарашың.
Мәңгелеккә беҙҙең һөйөүебеҙ
Бурандарҙа йөрөр аҙашып.

## СИРЕНДӘР СӘСКӘ АТҠАН **

Урам буйы күк томан —
Сирендәр сәскә атҡан.
Ә мин, иркәм, уйлайым,
Уйлайым һинең хаҡта.

* Р. Сәхәүетдинова музыкаһы.
** Р. Сәхәүетдинова музыкаһы.

Үреләм сирень суғына,
Биш таҗлыһын эҙләйем.
Иркәм, һине өҙләп һөйәм,
Ә һин хатта һиҙмәйһең.

Күк томаны сирендең
Болоҡһота күңелде:
Күк ямғырҙар булып ҡына
Үткем килә түгелеп.

Сирендәр — болот төҫлө,
Биш таҗлыһын тапмайым,
Зәп-зәңгәр урам буйлап
Япа-яңғыҙ атлайым.

Үреләм сирень суғына,
Биш таҗлыһын эҙләйем.
Нәфис таҗдар араһынан
Бәхетемде күҙләйем.

## АРҒАЯШ КҮЛДӘРЕ*

Зәңгәр күлдәр беҙҙең яҡта
Ал ҡояшҡа тартыла.
Ҡыр ҡаҙҙары беҙгә ҡайта
Шул таңдарҙың артынан.

Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ, шатлыҡтары
Күл өҫтөнә һибелә,
Һағыштары, аҫыл таштай,
Сума күлдең төбөнә.

* А. Ҡобағошов музыкаһы.

Зәңгәр күлдәр беҙҙең яҡта
Аҡ ҡайынға һыйына.
Ҡыр ҡаҙҙары, һыуһылыуҙай,
Күл буйында ҡойона.

Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ, ҡанаттарын
Зәңгәр һыуҙа йыуалар.
Ҡыр ҡаҙҙары моңдарынан
Сыңлап тора һауалар.

Зәңгәр күлдәр беҙҙең яҡта
Алтын ҡомға уйыла.
Шул күлдәргә ҡаҙҙар ҡайта
Үҙҙәренең туйына.

Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ, шатлыҡтары
Күл өҫтөнә һибелә,
Һағыштары, аҫыл таштай,
Сума күлдең төбөнә.

* * *

Мөлдөрәмә тулы күңелемә
Һағыш килеп ҡағыла,
Рәнйетеүсе табыла,
Нәфрәт гөлтләп ҡабына,
Аңғармаҫтан абынам,
Шунда инде шиғыр ағыла,
Һүҙҙәре лә табыла.
Мөлдөрәмә тулы күңелем
Инде тора түгелеп.
Бәхет баштан ашҡан саҡта
Шиғыр яҙмай кеше.
Шиғыр миңә усаҡ төҫлө,
Һыйынам уға өшөп...

* * *

Уйҙарымды минең һорама,
Уйҡайҙарым минең — ҡорама.
Бар аҡтары, ҡараһы,
Ҡараһында йөрәк яраһы;
Бар ҡараһы, аҡтары,
Аҡтарында бәхет хаҡтары;
Бар күңелгә яҡындары,
Бар бөтөнләй яттары.
Уйҙарымды минең һорама,
Уйҡайҙарым минең — ҡорама...

## МӨҒЖИЗӘНЕҢ МӨҒЖИЗӘҺЕ

Мөғжизәнең мөғжизәһе —
Яҙҙың йәшел күлдәк кейеүе,
Торналарҙың шашып бейеүе.

Мөғжизәнең мөғжизәһе —
Усымдағы ҡарҙың биҙәге,
Күк йөҙөнөң йондоҙ-һиҙәбе.

Мөғжизәнең мөғжизәһе —
Ете яттың йәрең булыуы,
Йөрәк ярып балаң тыуыуы.

Мөғжизәнең мөғжизәһе —
Сәскәләрҙең йәйғор келәме,
Атайсалым, илем, Ғәләмем.

Мөғжизәләр, мөғжизәләр...
Шундай яҡын күңелгә.
Мөғжизәләр булғанда,
Мин йәшәүҙән туңөлмәм!

## ЙӨРӘККӘ ҠАН ҺАУА

Йәшел япраҡҡа аҡ ҡар яуа —
Йөрәккә ҡан һауа.

Аҫыл ирҙәр яуҙа ауа —
Йөрәккә ҡан һауа.

Яман сиргә табылмай дауа —
Йөрәккә ҡан һауа.

Һыу ағыулы, һаҫыҡ һауа —
Йөрәккә ҡан һауа.

## ҒҮМЕР

Беҙҙең ғүмер — шатлыҡ ҡына —
Беҙҙе күккә сөйә:
Йәйғор булып ерҙә янабыҙ.

Беҙҙең ғүмер — бәхет кенә —
Беҙҙе күккә сөйә:
Ләйсән булып ергә тамабыҙ.

Беҙҙең ғүмер — һөйөү генә —
Беҙҙе күккә сөйә:
Йондоҙ булып ергә бағабыҙ.

Ә яныу-көйөү, ҡайғылар
Ҡара болот булып төйөлә,
Ә ҡара болот үткәндә
Хатта имәндәр ҙә эйелә.

Ә һуңынан ҡояш сыға,
Йәйғор балҡый, йондоҙ ҡабына.
Шуға ла кеше ергә түгел,
Ергә түгел, күккә табына!

## ФӘҒИЛӘ АПАЙҒА

Камзулҡайы ука-семәр,
Һөйләшеүе — тамаша,
Күҙҙәренең ҡарашында
Минең йәнем аҙаша.

Тылсым мине солғап ала,
Йөрәгемә шом һала:
Ябай башҡорт әбейе
Мине сихырлай ала.

Сихырында аҡ йыры бар,
Яман һүҙҙән тыйыла.
Яндарында баҫып торам —
Йәнем уға һыйына.

* * *

Йәшел генә туғай — йәшел келәм,
Биҙәкһеҙ ҙә генә ҡото юғала;
Ҡоттар китеп торған был заманда
Һин-биҙәккә мин юл алам.

Ҡара ғына бәрхәт — күк көмбәҙе,
Йондоҙһоҙ ҙа ғына йәме юғала;
Йәмдәр китеп торған был заманда
Һин йәм-нурға мин юл алам.

Һары ғына талҡай — йыр төйәге,
Һандуғасһыҙ ҙа ғына йәне юғала;
Йәндең йәмен юйған был заманда
Һөйөүемә ҡабат юл алам.

## МӨЛДӨРӘМӘ ТУЛЫ КҮҢЕЛЕҢ

*Фәрит Билаловтың яҡты иҫтәлегенә бағышлайым*

Мөлдөрәмә тулы күңелеңде
Сайпылтырға баҙнат итмәнең.
Ғүмеркәйең үтеп китте,
Баҙнат иткәнеңде көтмәне.

Мөлдөрәмә тулы күңелкәйең,
Һағыш һеңгән моңһоу ҡарашың,
Теткеләнгән йәнең был донъяла
Йөр(ө)гән икән, йөр(ө)гән аҙашып.

Мөлдөрәмә тулы күңелкәйең
Ынйы-шиғыр булып түгелде,
Йәнең йондоҙҙарға осто,
Ә һин үҙең ергә күмелдең.
Был донъяның үкенесе
Шул хәҡиҡәттә түгелме?
Шул хәҡиҡәттә түгелме?!

## ҠАЙЫНҠАЙ МИҘГЕЛДӘРЕ

### *ЯҘ*

Ап-аҡ шәм-ҡайынға
Йәшел уттар ҡабыҙа,
Ә минең йөрәккә
Һағыш ҡына тамыҙа.

### *ЙӘЙ*

Ап-аҡ ҡыҙ-ҡайынға
Алҡалар тағып ҡуя,
Ә һағышты инде
Ямғырҙар итеп ҡоя.

*Көҙ*

Ах, килен-ҡайынды
Янғындай ялмап ала,
Ә һағышты инде
Тәүге ҡар итеп һала.

*Ҡыш*

Ҡайын-әсә сәсенә
Көмөш ептәр һүтә,
Һағыш инде көрттәр булып
Баштарҙы күмеп китә.

## КҮҢЕЛДӘРЕМ НЕСКӘРГӘН МӘЛ

Күңелдәрем нескәргән мәл...
Йондоҙҙарға төбәләм.
Ҡара күккә
Алтын йондоҙ булып уйылам,
Уйылам да
Көмөш ямғыр булып ергә ҡойолам.

Күңелдәрем нескәргән мәл...
Болоттарға төбәләм.
Зәңгәр күккә
Ап-аҡ болот булып һыйынам,
Һыйынам да
Ҡояш нурҙарына ҡойонам.

Күңелдәрем нескәргән мәл...
Урмандарға төбәләм.
Урмандарҙа
Моңһоу кейек булып юғалам,
Юғалам да,
Уйҙарымды тағатып,

Һағышымды таратып,
Кешеләргә юл алам,
Юл алам.
Күңелдәрем нескәргән мәл...

## ИЮНЬ

Йәмле июнь ҡосағына
Түгелә гөлдәр генә.
Шул йәмдәрҙе һөйләргә
Етмәй шул телдәр генә.

Йәмле июнь иңдәренә
Ята йәйғорҙар ғына.
Шул йәмдәрҙе йырларға
Етмәй шул йырҙар ғына.

Йәмле июнь устарына
Тама еләктәр генә.
Шул июндең йәмдәре
Һеңә йөрәккә генә.

* * *

Бәхеткәйем —
Һары һандуғас.
Йырлай талдың осонда,
Йөрәккенәм леп-леп тибә,
Леп-леп тибә усымда:
Һандуғастың йырҡайы
Ҡапыл өҙөлөр төҫлө,
Һары талдың ботағына
Ҡарға теҙелер төҫлө.

* * *

Әбейҙәр сыуағы...
Һыкрай йөрәк,
Болоҡһой күңел.
Әбейҙәр сыуағы...
Әбейҙәр сыуағы —
Тик сыуаҡ ҡына,
Ә ҡояш түгел.

* * *

Һин минһеҙ,
Мин һинһеҙ бөгөн:
Тома һуҡыр
Ҡояшлы күгем.

* * *

Хистәреңде нисек кенә
Йәшерергә теләмә —
Һарҡып сығыр күҙҙәреңдән.
Һүҙҙәреңде нисек кенә
Иләктәрҙән иләмә —
Балҡып сығыр күҙҙәреңдән.

* * *

Башҡаға бары бер күҙ аттың,
Башҡаға бары бер һүҙ ҡаттың —
Арабыҙға йылдар ятты...

* * *

Күҙҙәр төбәлгән күҙҙәргә:
Мохтаж түгелбеҙ һүҙҙәргә.

Күҙҙәр төбәлгән күҙҙәргә:
Ҡурҡыныс түгел көҙҙәр ҙә.

## ЙӨРӘГЕҢӘ МИНЕ ҠЫҪЫП...

Йөрәгеңә мине ҡыҫып,
Күҙҙәргә бағыуҙарың,
Шул күҙҙәргә бағыуҙарҙан
Йөрәгем ҡағыуҙары.

Йөрәгеңә мине ҡыҫып,
Уфтанып ҡалыуҙарың,
Шул уфтанып ҡалыуҙарҙан
Һағыштан алйыуҙарым.

Йөрәгеңә мине ҡыҫып,
Күҙ йәшһеҙ илауҙарың,
Шул күҙ йәшһеҙ илауҙарҙан
Йөрәгем тулауҙары.

Йөрәгем тулауҙары...
Балҡып торған ҡояштың
Ерҙәргә ҡолауҙары.

## ҺӨЙЛӘШЕҮ

— Мин янында булмағанда,
Аҡман-тоҡман булдымы?
Ҡуйыныңа, мин юҡта,
Аҡ бурандар тулдымы?

Бурандарҙың һылыуы
Күҙҙәреңә баҡтымы?
Ишегеңде, мин юҡта,
Иркә елдәр ҡаҡтымы?

— Һин юҡта, аҡман-тоҡман
Шундай шыҡһыҙ тойолдо;
Ел туйы, тип әйтеүҙән
Саҡ-саҡ ҡына тыйылдым.

# ҒӘЛИӘ КӘЛИМУЛЛИНА

# СЕРҘӘРЕМ КҮП ...





*Аждаһа йылының Игеҙәге мин. Игеҙәктәр ниндәй — мин дә шулай: һәр ваҡыт нимәләр эҙләйем, кемделер көтәм, табам, юғалтам, тағы эҙләйем, тағы көтәм. Бер ҙә генә йәнемә тынғылыҡ тапҡаным юҡ. Эҙләгәнем, бәлки, табылмаҫ та, көткәнем, бәлки, килмәҫ тә.*

*8 июндә, минең менән бер көндә, донъяның икенсе бер мөйөшөндә бер ҡыҙ тыуған. Иртәгәһенә ул ҡыҙ бала тураһында бөтә донъя шаулаған. Ҡыҙын ҡосаҡлап, бәхетле йылмайған әсә — Валентина Терешкованың гәзиттәге һүрәтенә ҡарап минең ғәзиз әсәкәйем дә: «Эй аллам, әҙәм балалары араһында ниндәй ҙур айырма?! Берәүҙәрҙе тыуғас та ниндәй яҙмыш ҡаршылай!» — тип көрһөнгән. Мөғжизә булып, шунда телгә килһәм: «Айырма берәү генә: ул — баш ҡалала, ә мин — Ишембай районы Иҫәкәй исемле бәләкәй генә ауылда тыуҙым», — тип йыуатыр инем шунда әсәйемде.*

*Тәүге китабым үҙенең уҡыусыларын оҙағыраҡ көттөрҙө. Тик һеҙ көткәнсәме ул?*

**Ғ ә л и ә**

* * *

Тартылам да торам тауҙарыма,
Ҡырыҫлашты ҡала ҡуйыны ла,
Төштәремә кереп һаташтыра
Тауҙар туйы — йәштәр уйыны ла.

Селтербейҙең серле түбәләре,
Серҙәрем күп һеҙгә генә сисер.
Ярты йәнем һеҙҙә ҡалған икән,
Ярты йәнде... кисерегеҙ, кисер!

Йәнәлтауҙа бөгөн ҡайынҡайҙар
Кемдәр менән икән таң ҡаршылай?
Эй һағындым һеҙҙе, ҡайындарым,
Һеҙ — йөремдең йылы ҡарашылай.

Наҙығыҙға һыуһап, сарсап ҡайтам,
Сит ерҙәрҙә минең йәнем өшөй.
Сәләмләмәй торһа берәйегеҙ,
Йөрәккенәм өҙөләр ҙә төшөр...

## БӘХЕТ БАР УЛ!

Бәхет эҙләп киләм әле,
Бар, тиеп әйткәйнеләр.
Алдыңа үҙе сыға, тип,
Сер сисеп киткәйнеләр.

Эҙләйем әле, эҙләйем,
Осратырмын, һиҙәмен.
Эҙләгәндәр табалар ул,
Сабыр итәм, түҙәмен.

Мөхәббәтлеләр бәхетле, —
Һөйөүем эҙләп киләм.
Ышанысды бирәү — бәхет,
Шул бирәү барын беләм.

Бәхет бар ул! Бар ул бәхет!
Эҙләгән, көткәндәргә.
Сабыр бул, тим, өмөтөнән
Төңөлөп бөткәндәргә.

Бәхет бар ул! Бар ул бәхет!

* * *

Әйткән һүҙем оҡшап китһә инде,
Ҡабат-ҡабат уҡып, эй, ҡыуанам.
Шиғыр яҙыу — шау балалыҡтыр ул,
Бала булып уйнап, эй, йыуанам.

Килешмәй ҙә торһа берәй ере,
Һүҙҙәр һайлап йөрәк һыҙылыуы...
Шиғыр яҙыу — ахыры, йөҙйәшәрҙең
Артыҡ һүҙ һөйләүҙән тыйылыуы.

Толҡа тапмай, әйҙә яфалайым
Төндәр буйы тулап сыҡҡан йырҙы.
Шағирлыҡтың сал да аҡылдары,
Холоҡтары һаман сабыйҙыҡы.

## ИЛЛӘҺИ МӘЛ...

Нисә йылға бер юл шиғыр яҙҙым,
Нисә йылдар йыйған һүҙемде, —
Бәйһеҙ һүҙҙәр епкә теҙелде лә,
Бәйле күңел шартлап өҙөлдө!..

* * *

Ялтлап торған бер шиғырым тыуҙы,
Матурлығы шунда — яланғас,
Яланғас шул, бөтә сергенәһен
Шартлап торған аҡыл ялаған.

Шуны уҡып, берәй хыялый зат
Күңеленә тапһа йыуаныс.
Йәлләп ҡуйҙым.
Бигерәген уны —
Серһеҙ ҡалыу ҡалай аяныс...

* * *

*Афғанстанда һәләк булған дуҫым*
*Нафиҡ Аллабирҙинга*

Гитараңдың ҡылҡайҙарын сиртеп,
Моңһоҙҙарға моңдар таратып,
Ике йылдан — яҙға ҡайтам, тинең,
Яҙға, тинең, ҡоштар һайратып.

Ҡалһын, тинең, йырҙар.
Йырларһығыҙ.
Гитара, һеҙ...
            Һеҙ бит бергә лә.
Ах, ул йырҙар!
Һине оҙатҡандар
Йырҙар барып етмәҫ ерҙәргә...

Ҡоштар ҡайтты ла ул,
Йырың иҫән.
Гитараңды бергә тыңланыҡ...
Иңрәй ҡылдар...
Ғәфү итсе, дуҫҡай,
Ҡоштар һайрағанда иланыҡ.

* * *

Уйҙар утрауында нисәнсе көн
Япа-яңғыҙ ғына йәшәйем,
Әллә ниҙән ҡурҡып, серҙәремде
Йән дуҫымдан, хатта, йәшерҙем.

Яңғыҙлыҡтан ҡурҡам.
Йән өшөтөп,
Күңелемдең килде аҡ ҡышы.
Серҙәш күлемдең дә кәйефе юҡ, —
Ташлап осҡан, ахыры, аҡҡошо.

## АЙ, БУТАЛДЫ ДОНЪЯ...

Ай, буталды донъя, ай, ҡайнаны...
Ҡайҙа сығыш, ҡайҙа байыштары.
Ҡояш — Башлыҡ беҙҙе ташлап ҡасҡан,
Болот-ғәскәрҙәрен аҙаштырып.

Башлыҡ булыу өсөн ғауға хәҙер,
Һүҙ даулайҙар, ана, кем уҙарҙан.
Талаш-тартыш, мәхшәр, ығы-зығы,..
Төсө ҡасҡан Ай һәм йондоҙҙарҙың.

Ҡобараһы осҡан бар Йыһандың:
Бер-береүҙә иман, ҡот ҡалмаған.
Башлыҡһыҙ ни, Йәшен-ҡөҙрәтең ни? —
Ыҙғыш буталыштан файҙаланып,
Ялағайҙар донъя ялмаған.

Дөмбәсләшә торғас, ай, береүһе! —
Ҡалай мәтәлләне Ергә табан.
Их, ғәрлеге!..
Ниндәй хәлендә лә
Ергә тартыла бит, мәхлүк, һаман.

Ерәнгәндер Йыһан: ҡара яныш,
Кесерәйеп, ҡотһоҙланып ҡалған.
Ҡояш балҡып, Ер яҡтырып китһә,
Сафлыҡ ҡайтыр, ҡасыр ине ялған.
Йылытыр ине донъябыҙҙы иман.

## СӘХНӘЛӘРҘӘ БУЛМЫШТАРЫМ БҮТӘН...

Хәлгенәмә инде көндем, тиһәм,
Ошо түбәнлектән биҙрәп китәм.
Был хәлдәргә ни хәл түҙәйем һуң,
Ергә әллә төшмәҫкәме бүтән?

Бүтән киңлектәрҙә йөҙәйем дә,
Бүтән донъяларҙа гиҙәйем;
Минең барлығымды һеҙ белмәгеҙ,
Һеҙ барлыҡты мин дә белмәйем.

Һиҙмәйем дә. Нисек рәхәт булыр
Бер-беребеҙҙе күрмәй йәшәүҙәре.
Ах!..
Ябығыҙсы сәхнә шаршауҙарын,
Кисә мине битәрләгән ағай
Тағы сығып бейеһенсе, тиеп,
Ҡул саба бит!..
Хоҙай?!
Нишләйем?..

Сыҡтым инде.
Һорайҙар бит.
Сыҡтым,
Күтәрҙем дә тамуҡ-йәһәннәмде.
Әйләнһә, тим, шунда ер баш түбән,
Аңлар инегеҙ ҙә хәлгенәмде.

Әрнеүҙәрҙе йотоп, сәхнәләрҙә
Йылмайыуҙар өсөн баһа бүтән.
Ҡул сабалар... Ә мин иңрәй-иңрәй,
Баһаларҙан төшмәҫ өсөн түбән,
Ҡәҙерһеҙҙәр донъяһына китәм...

Сәхнәләрҙә булмыштарым бүтән...

## ҺЕҢЛЕМӘ

Ҡайын япраҡтары тирбәлгәндә
Иртә көҙҙөң ирке еленә,
Аҡ ҡайындар кеүек сафлыҡ бөркөп,
Ун алты йәш тула һеңлемә.

Наҙлы япраҡҡайҙар тирбәлгәндә
Ҡойолалар йомшаҡ елгә лә,
Ә һин ҡойонда ла сайҡалмаҫһың,
Ышанысың булһын эргәлә.

Йәйге селләләрҙә суҡ япраҡтар
Эҫәлектән һыуһап эйелһә,
Түбәнселек менән йәберләнмә,
Һин ғорур бул, һеңлем, баш эймә.

Сасҡауҙарҙа шартлап һына күрмә,
Тәңкә йылдарыңды ҡәҙерлә.
Ғүмер еле ун алтынды йолҡа,
Ун етеңә яуап әҙерлә.

## ГАРМУН МОҢО

Йөрәгемдә ҡалдың бер моң булып,
Шул моң мине хәҙер йөҙәтә,
Уйҙарымда ғына сихри телле
Гармуныңды һинең иңрәтә.

Их, тыңлайһы ине тағы ла бер
Шул телдәрҙең серле моңдарын!
Гармун моңо, беҙҙең яҙмыш булып,
Бәйләп киткән йөрәк ҡылдарын.

Өҙөлмәҫлек булһа ине лә бит!..
(Өҙөлөр, тип кем һуң уйлаған?!)
Гармун телдәрендә, юҡ, һин түгел,
Ул моңдо бит яҙмыш уйнаған.

* * *

Минең күңел — әле асылмаған,
Тулышып та килгән бөрө генә;
Өҙөлөп һине көткән мәлдәрем бит,
Яндарымдан үтмә эре генә.

Туҡталған бул. Хәлде һорашҡан бул,
Ҡараштарың менән үп, иркәлә.
Ҡалмаһынсы күңел ҡыҫыр көйө,
Иртәләрҙә йәмле булғым килә.

Иркәләнеп кенә, бөрөләр ҙә
Яҙ һулышын тойоп тартылалыр.
Яҙҙың көнө — ярты ғына аҡыл,
Аһ, беҙ шуға ярым-ятрыларҙыр.

* * *

Мөхәббәт шишмәләренән
Услап һыуҙар эсерҙем,
Мөхәббәтле йәшлегеңде
Иҫтәреңә төшөрҙөм.

Ҡулдарымды өттө шунда
Боҙҙай һыу тамсылары,
Ҡолон ғына күңелемдә
Ҡарашың ҡамсыланы.

Ҡамсыланыуҙан ҡурҡтымы, —
Йөрәгем асылманы.
Һыуҙарымды эстең дә ул,
Һыуһының баҫылманы...

## НИШЛӘР ИНЕК?

Нишләр инем икән һинән китһәм,
Булманы, тип, кисә булғанды.
Быға тиклем белмәгәнмен, тиеп,
Яттар тирәгенә ҡунғанды.

Нишләр инем? Белеп китер инем
Ишегемде яттар ҡағырын,
Мине сихырлаған күҙҙәрҙең дә
Инде башҡаларға бағырын.

Икебеҙгә тигән Бәхет ҡошо
Аҙашыр ҙа ине, моғайын...
Нишләр инек?
Шул һорауҙан ҡапыл
Йөрәккәйем ҡуйҙы моңайып.

* * *

«Көтмә мине», — тинең.
Башым эйеп,
Һүҙһеҙ генә шуға килештем.
Килештем дә әйтер һүҙҙәремде
Әйтмәйенсә ҡалдым — бирештем.

Өндәшмәүем алтын булһа икән,
Өҙгөләмәҫ ине һағышы.
Әсе һағыш — тиле йәшлегемдең
Ҡайырылған ярты яҙмышы.

Ҡайырылып ҡалған яҙмыштарға
Ҡайырылып ҡарап булмай шул;
Барыр юлдарыңдан яҙлыҡтыңмы —
Ҡалған ғыналары уңмай шул.

Ап-аҡ ҡына хыял-далаларым
Тапалмаҫ та әлек ҡаралар,
Яҙа баҫыуымды ғына көтөп,
Упҡын ята беҙҙең арала...

* * *

Мине берүк эштәреңдең
Ҡоло яһама! —
Әйтер һүҙең осһоҙ булыр,
Ҡоро, яһалма.

Мине берүк аҡылыңдың
Ҡоло яһама! —
Бейеклегең, бөйөклөгөң
Булыр яһалма.

Мине берүк һөйөүеңдең
Ҡоло яһама! —
Ғүмерең дә үтеп китер
Ялған, яһалма.

## БЕРГӘ-БЕРГӘ

— Бергә-бергә...
Ризаһыңмы?
Нимә ти һинең күңел?
Икебеҙ ике башҡа бит,
Һиңә лә еңел түгел.

Башҡайымды түбән эйәм, —
Оялыуымдыр инде,
Һөйөүемде ҡыҙҙарсалап
Аңлатыуымдыр инде.

Нисә йыл ошо һүҙеңде
Көттөм бит инде түҙем.
«Мин бөгөндән...»
Шул уйымдан
Ҡыҙарып китәм үҙем.

Әйтергә телем әйләнмәй, —
Ялындырыуым түгел,
Ялындырып яраттырыу, —
Беләм, яратыу түгел.

Тел осонда тора ла бит,
Әйт тә бир инде теҙеп!
Нисек кенә сиселәйем,
Нисек торайым түҙеп?!

Һине үҙемсә, ҡыҙҙарса,
Яратыуымдыр инде,
Эстән генә нисәнсе ҡат
Ҡабатлауымдыр инде:

«Бергә-бергә...
Мин бөгөндән, —
Шулай ти минең күңел. —
Инде лә һинһеҙ бер минут
Йәшәйһеләрем түгел!»

* * *

Һин кемдәрҙән мине көнләмәнең.
Һанай китһәң?!.
Юҡ, ҡуй, ваҡланма ла.
Яратҡанмын инде, тигән булып,
Һөйөү алдарында аҡланма ла.

Алданмайыҡ.
Яратҡандар өсөн
Сүп кенә бит ялған-көнләшеү.
Һөйөү бит ул йондоҙҙарға менеү,
Тиңһеҙ бейеклеккә тиңләшеү.

Ышанманың...
Үрҙәр буп-буш ҡалды.
Алдыҡ ҡына һөйөү татылған.
...Ишеттеңме?!
Көнләшеүҙән, тиҙәр,
Йондоҙ шартлап... ергә атылған.

* * *

Теләйһеңме?
Ҡар бөртөгө булып,
Устарыңа ғына наҙланайым;
Иретер ҙә ине ирендәрең,
Әллә ниңә генә баҙалмайым.

Ышыҡ эҙләп түгел, йылы эҙләп,
Ҡосағыңа ғына һарылайым,
Эй саф ҡына мәле күңелемдең,
Ҡана, һине ниҙән аралайым?

Иңдәреңә терәк булайым да
Тулайымсы ҡуйыныңа ғына,
Ихласлыҡты тыңләмәсе берүк
Елбәҙәктәр уйынына ғына?..

* * *

Мин кемдәлер көткән кеүек инем,
Берәү килеп ишек шаҡыны.
Шаҡыныларҙ...
Бәйһеҙ йөрәгемде
Өтөп алды шуның шауҡымы.

...Арбанымы шулай ҡапыл ғына
Сихыр көсө һинең күҙҙәрҙең?
Эх, шул күҙҙәр —
күңел көҙгөләре...
Кәрәкме ни асыл һүҙҙәрең?!

Серле ҡарашыңдың наҙлауына
Онотолоп торам...
— Көттөңмө?
Ireп төштөм,
Әллә ирендәрең
Мине ысын...
ысын өттөмө?!

## БЕҘ ЯҢЫНАН ОСРАШЫРҒА ТЕЙЕШ...

Бөгөн миңә берәү:
«Тиле!» — тине.
Юҡ, йәнәһе, минең ишеләр.
Маңлайыңа, имеш, яҙылғанды
Кисерергә тейеш кешеләр...

Яҙмыш ҡоло булып ҡалалмайым. —
Янды, тиһен, көйҙө, тиһендәр;
Беҙ яңынан осрашырға тейеш, —
Әйҙә, мине тиле тиһендәр!

Тик һин генә мине тиле тимә...

## БӘХЕТ КӨЙӨНӘ

Тейер-теймәҫ кенә бер-беренә,
Елбер-елбер ҡарҙар бейей күктә.
Көйгөнәбеҙ әйҙә уртаҡ булһын,
Ҡарҙар менән өйөрөлөп үт тә,
Саҡыр әле мине бейергә.

Моңдар ғына яуа был ергә,
Ҡулға ҡулды беҙ ҙә тотонайыҡ,
Ҡарҙар менән бергә ҡоторайыҡ,
Саҡыр мине, саҡыр бейергә.

Иркәләнеп кенә бер-беренә,
Бейей-бейей ҡарҙар йөрөй күктә.
Бәхетебеҙ, әйҙә, уртаҡ булһын,
Ҡарҙар мине алып осмаç элек,
Саҡыр әле мине бейергә!

Бәхет кенә яуа был ергә,
Ҡулға ҡулды беҙ ҙә тотонайыҡ,
Ҡарҙар менән бергә ҡоторайыҡ,
Саҡыр мине, саҡыр бейергә!..

## ҺИНӘН ЯҘҒАС...

Көтмәгәндә
Аҙаштырҙы яҙмыш
Билдәһеҙлек тигән туктальшта:
Юлдар томанланған,
Күҙҙәр томаланған.
Яҙлыкһам да,
Ҡосағыңа һырылып тын ҡалырға
Ҡулдар һине эҙләй,
Таба алмай йөҙәй.

Һинән яҙғас,
Юлыкһтырҙы яҙмыш
Бәйелһеҙлек тигән бер яҙыкҡа:
Яҙмыш томанланған,
Аҡыл томаланған.

Ҡолонсаҡтай,
Япа-яңғыҙ аҙашып та ҡалған,
Хистәр генә кешнәй,
Йөрәк ишен эҙләй.

Ҡыҙҙар бәхете
Юғалып та ҡала
Бәхетлемен тигән тын алышта:
Хистәр томалана,
Бәхет томанлана.
Яҙмышмы шул,
Көтһәң-көтмәһәң дә, йөрәгеңдә
Билдәһеҙлек биләй,
Бәйелһеҙлек иләй.

* * *

Йәп-йәш кенә,
Ап-аҡ ҡына томан
Муйынына һырыла карт тауҙың...
Таң атҡансы иреп ҡосағында,
Толомдары ялбыр-ялбыр туҙған.

Тау, ҡуйынын ябып, аҙап ҡалды.
Наҙлауҙары!
Шул тиклем дә татлы...
Ҡояш сыҡҡас әле,
Ялтлап йөрөп, яйлап кейендә лә
Күк ҡуйынына ҡасты...
Һатты томан ҡартты.

Йоҡолары тауҙың тамам осто:
Уны яңы тәтәй ҡояш ҡосто.

Татлыларҙың уйы ҡатлы-ҡатлы...
Наҙға мохтаж ғына бер ҡатлы...

## ХӘТЕРЕҢДӘМЕ?

Хәтереңдәме, хыял ҡанатында
Йондоҙҙарҙа икәү осҡайныҡ,
Сәбәләнеп яуған ҡарҙар менән
Бар ғәләмде бергә ҡосҡайныҡ?

Шашып-ҡотороноп бергә яндыҡ
Һөйөү тигән оло усаҡта...
Кем уйлаған инде шул йылдарҙы
Ҡалыр тиеп беҙҙән йыраҡта?

Беҙҙең уртаҡ йондоҙ ҡапыл янып,
Ҡапыл һүнде — ниҙән, белмәйем.
Инде хәҙер мин яңғыҙым ғына
Шул йондоҙға ҡабат үрләйем.

* * *

Йәй еңгәйем, эй, әрһеҙ ҙә инде:
Бер ҡулдәген уңдырғансы кейҙе,
Итәк-салғыйҙары теткеләп бөттө,
Йыртыҡ еңгә сыбар ямау тейҙе.

Йүгереп йөрөп туйға әҙерләнде,
Үҙенә генә ҡулы теймәне.
Килен булаһы ҡыҙ — бай нәҫелдән, —
Саф алтындан ғына кейгәне.

Алтын йөҙөк, алтын беләҙектәр,
Алтын һырға, алтын муйынса...
Еңел-елпе түгел микән үҙе,
Һыр бирмәҫме икән туйында?!

Ауыҙ итергә лә ирек бирмәй
Еңгәй тиргән еләк-емештән,
Йәһәтләргә ҡушты туйҙы ҡыҙсыҡ, —
Ҡупшы менән кем һуң еңешкән?!

Еңмеш килен үҙенекен итте.
(Хәбәр китте имеш-мимештән:
Холоҡҡынаһы, ай-һай, самалыһыр, —
Емешләнер көнө етешкән!)

Гөрләп уҙҙы туйҙар.
Аҡ йәймәгә
Тәлгәштәрен тирҙе күҙ-ҡатын,
Һөйөү тулы буран ҡуйынында
Туҙа кәләш, белеп үҙ татын.

## БЕРСӘ ЯМҒЫР, БЕРСӘ ҠАР БУРАНЫ...

Миҙгелдәрҙең буталышҡан сағы:
Берсә ямғыр, берсә ҡар бураны,
Ошо мәлдә күңел йәшлегенә
Әллә нисә ҡайтыш ураны.

Ун етегә килеп ишек ҡаҡтым,
Көлә-көлә бер ҡыҙ ҡаршыланы;
Күҙҙәренең шаян осҡондары
Йөрәгемдә саҡты саяланып.

Ҡыйыр-ҡыймаҫ ун һигеҙгә сирттем,
Ғорур ҡыҙсыҡ ишек асманы.
(Тәкәбберлек, ай-һай, самаһыҙ ҙа,
Ҡыҙ халҡының аҡыл самалы!)

Кемдәр генә кире боролманы
Ун һигеҙҙең ҡапҡа төбөнән?!
Әллә кемде көтә ине шулай
Хыялый ҡыҙ бәхет көгенән.

Ун туғыҙҙың — донъя теүәлләнгән,
Улар — икәү, кереп торманым.
Бәхетенән генә яҙлыҡмаһын,
Бәхете шул тиеп юраным.

Елдем егермегә.
                    Бәхет бөтөн.
Асылғанмы күктең ҡабағы?!
Түңәрәккәй донъя!
Булмаҫ төҫлө
Шашып-ярһыуҙарҙың аҙағы.

Бәхет әллә яңылыш юлыҡтымы,
Яҙмыш мәллә һағыш юраны?
Аяҙ көндө бер ғәрәсәт ҡупты:
Тәүҙә ямғыр, аҙаҡ — бураны...

Берсә ямғыр, берсә ҡар бураны
Юлыҡһыҙҙан булдым, уңманым.
Миҙгелдәрҙең буталышҡан сағын
Хәйерлегә генә юраным.

## ҠОШТАРЫ ЛА БЫЙЫЛ ИРТӘ КИТТЕ...

Яҙым быйыл әллә нисек булды:
Үҙ йырымды йырлай алманым,
Әллә инде ҡоштар һуңлап ҡайтты,
Әллә инде үҙем һуңланым.

һуңлағанмын.

Наҙ килтергән ҡоштар
Ҡанат ҡаҡһалар ҙа кистәрен,
Ашҡынһа ла йөрәк үҙ яҙына,
Һуңға ҡалған наҙлы хистәрем.

Ҡоштар киткән көҙгө моңһоу мәлдә
Быйыл һөйөләүҙән мин яҙҙым.
Ҡоштар беҙҙән айырылған кеүек,
Айырылды минән үҙ яҙым.

Ҡоштары ла быйыл иртә китте...

## ИКЕ ЙЫР

* * *

Бала саҡта оло апайҙарҙан
Отоп алып шаян таҡмаҡтар,
Һөрән һалып, урам буйҙарынан
Йырлап уҙыр инек (ахмаҡтар!).

«Берәү, икәү, өсәү, дүртәү,
Бишәү, алтау,.. ун ике.
Шул ун ике араһында
Иң матуры — минеке...»

Бер-беребеҙҙең «серен» сисер өсөн, —
Килештерә биреп ҡалай ҙа! —
Текмәләргә теҙеп яҙа инек,
Күрһен, тиеп, «теге» малай ҙа:

«НУР+НӘЙЛӘ = Л Ю Б О В Ь»
Любовь нимә?!
Өҫтәп, етмәһә,

«до гроба», тип, «до смерти» тип, хатта,
Яҙам әле, аҡбур бөтмәһә.

Тәнәфестә теге «любовь» барып,
Сәсен тарта бит әй Нәйләнең.
(Юҡ-бар һылтау табып, мин йөрөйөм,
Улар тирәһендә әйләнеп.)

Теге текмәләрҙә плюстарҙы
Иртәгәһен (белеп) арттырам.
«Минеке» тип йөрөгән иң матурҙан
Толомомдо юрый тарттырам...

. . .

...Толом тарттырыр ҙа саҡтар уҙҙы,
Аҡбур эҙе бөттө юйылып,
Балалыҡтың сая шуҡлыҡтары
Таҡмаҡ булып ҡалды уйылып.

«Берәү, икәү, өсәү, дүртәү,
Бишәү, алтау,.. ун ике.
Шул ун ике араһында
Иң матуры — минеке».

Ул шуҡ ҡыҙҙар күптән таралыштыҡ,
Ят урамдар беҙҙе үҙ итте.
Йыйналышһаҡ, һәр кем йырлай хәҙер
Таҡмаҡтарҙы бер аҙ үҙгәртеп:

«Берәү, икәү, өсәү, дүртәү,
Бишәү, алтау,.. ун ике.
Шул ун ике араһында
Аҡыллыһы — минеке».

Өрөп ҡабырға ла өйрәндек бит,
Апайҙарҙан түгел, тормоштан.
Аҡыллыға табыныу ҡатын-ҡыҙға,
Их, бирелһә икән тыумыштан!

## КҮРСЕ, ЙӘНЕМ...

Күрсе, йәнем, анау ҡар бөртөгөн:
Бигерәк иркә инде, бигерәк наҙлы,
Күҙҙе ҡыҙҙырырлыҡ, аҙҙырырлыҡ
Һылыулығы ғына әллә аҙмы?!

Йомшаҡлығы...
Ҡулда иреп тора!
Ҡылансыҡҡай ҡыҙҙар көнләшерлек.
Елбәҙәкме?
Булһын.
Нәфислектең
Игеҙәге юҡтыр тиңләшерлек.

Шундай ихлас!
Ә һин миңә тиңдәш
Йондоҙ эҙләйһеңме әллә ҡайҙан?
Ынйы күңелкәйе кителер бит
Усыңдағы бөртөк наҙлыҡайҙың...
Күрсе, йәнем...

* * *

Һалҡынлыҡтан күңел биҙрәп бәткән,
Һиҫкәнәм дә торам тиктәҫкә.
Ҡышы ла бит үтә оҙон булды,
Килгән кеүек мәңге китмәҫкә.

Тертләп киттем ҡапыл.
Тәүге тамсы
Белгертмәксе яҙҙың яҙлығын.
Һиҙеп тулышамы икән йөрәк
Тамсы ғүмеренең аҙлығын?..

## ӘСИРЛЕК

Эй әсирлек сере!..
Хатта ҡыштың-ҡышы
Яҙ еленә тамам иҫергән:
Елбәҙәккәй генә ҡарҙар яуа,
Ерем ҡуйынына иҙерәп.

Наҙлы һылыу аҙҙырғанмы юрый —
Шаша тотҡон, хискә күмелеп,
Бөгөн тиртҡән бөрө әүрәткәнме
Саҡкауҙарҙа ҡатҡан күңелен?

Елбәҙәктәй генә ҡарҙар яуа,
Серҙәр һөйләй-һөйләй Яҙһылыуға.
Ирей-ирей ирененә тама,
Тамам үтә ҡыҙҙың быуынына...

Тилерткес мәл!
Аҡылыңды юйһаң,
Онотола юлдан яҙлығыу...
Тик таң атҡас ҡына
Быуылып-быуылып,
Гонаһынан арыныр Яҙһылыу...
Эй әсирлек сире!

* * *

Ҡыйыгтарҙан тәүге тамсы тама, —
Минең күңел кеүек тулышҡан;
Алдарыңа мин дә тама яҙҙым,
Иреп һинең ҡайнар һулыштан.

Тама яҙҙым...
Икеләнеп күпме
Йөрөп була ике арала?!
Бына тамдым!
һиңә, һинең янға!
Үткәндәрҙән үҙең арала...

* * *

Хыялый күҙ еле һоғаланып
Семәрләй ҙә һалды тирә-йүнде,
Әллә һиҙендеме күңелемдең
Көткәнлеген бары ошо мәлде?

Көтөүҙәрем...
Ҡосаҡ-ҡосаҡ бәхет
Күптән япраҡ булып яуып үткән.
Минең өлөш, һатаһып та ҡалып,
Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ килеп йөрөй икән.

Өҙөлөп-өҙөлөп кенә тауыш бирә,
һулҡылдап та ҡуйҙы күҙ еле —
Ҡосаҡ-ҡосаҡ тигән бәхеттәрҙең
Аҙашып та йөрөгән миҙгеле.

* * *

Бынау миләш тос-тос тәлгәштәрен
Яурынына элеп алған да,
Башын эйеп, ауыр уйға талған,
Низән ҡурҡа икән һаман да?

Уйҙары ла үслам-үслам ғына,
Үслам-үслам ғына тәлгәштәр.
Яусы килгән,
оялыуҙан шулай
Ҡыҙарынған миләш-кәләштәр.

## МИЛӘШ СЕРЕ

Гел ҡыҙылға ҡыҙыҡҡан юҡ та ул,
Ҡояш менән тәҫтәш кенәмен,
Иң-иң һылыу кәләш, ти ҙә бераү,
Булмыштан мин — миләш кенәмен.

Миләш кенәмен дә. Моңһоу ҡояш
Ана нисек ҡарай көнләшеп,
Мин — саҡ кәләш кенә, ул йылыһын
Бөтөп бара инде өләшеп.

Һомғол буй-һыныма, тәм-йәмемә,
Ул ут яныш торған күҙҙәргә
Күптәр ҡыҙығалар, күптән инде
Ғәйбәтселәр әҙер күҙләргә.

Күҙләү генә етмәй, йыйналышып,
Көндәр буйы әле тетерҙәр;
Башҡайыма, оҙон ҡыш буйына,
Ғәйбәт сәйнәп кенә етерҙәр.

Буй етмәҫлек булһаң ине лә ул!..
Их, мин Ерҙә йәшәп ваҡланам;
Тартылғаным Күк ҡуйыны ла бит,
Тик Ер-йәрем өсөн һаҡланам.

Тиң түгел дә инде...
Тәлгәштәрем
Бейектәрәк эҙләй тиңдәшен,
Ә Ер тартып ала ҡосағына,
Күҙен йомһа ҡояш-көндәшем.

Мин күктәргә ҡарап тилмергәндә,
Ер табанға килеп йығыла...
Әсе һөйөү, төйөр-төйөр булып,
Утлы тәлгәштәргә йыйыла.

* * *

Йәштәгеләр килмәй...
Һыльгулығым
Баһалана ир-ат күҙе менән,
Йәнемдәге аҫылташтар, ахыры,
Йәннәттәргә китер үҙем менән.

Йәштәгеләр килмәй...
Эй, донъялар!..
Ниҙән осһоҙланды икән ирҙәр?!
Ҡыҙҙар йәме — ҡурсаҡ хаҡы ғына,
Туңған йәнебеҙҙе кем һуң биҙәр?

Ҡыҙғыналар,
Һеҙҙе кем ҡыҙғаныр,
Әйләнһәгеҙ ҡурсаҡ-уйынсыҡҡа?
Бармаҡтарым үрелер ҙә бер көн
Тәтәй итеп таҡҡан муйынсаҡҡа...
Алҡымымдан алыр...

* * *

Ут эсендә йәшәп өйрәнгәнмен,
Һине башлап күргән мәлдән алып.
Осҡонһоҙ ҙа гөлтләп тоҡанған ут
Яйлап ҡына бара янып.

Йәл дә түгел,
Һүнһә, һүнеп ҡуйһын,
Йөрәк кенә ҡала инде ҡотһоҙ.
Мин янғанда, һиңә йылы ине,
Нисек кенә йәшәрһең, тим, утһыҙ?

# ЗӨҺРӘ АЛТЫНБАЕВА

# НАҒЫШ





*Һеҙҙең йәмле Әй буйҙарында, Мәсетле районы Ләмәҙтамаҡ ауылында булғанығыҙ бармы? Булмаһағыҙ, килегеҙ. Гүзәл ул минең тыуған яҡтарым. Шуға ла мин йөрәк йырҙарымды талғын Әй йылғаһы, Сусаҡ тауы итәгендәге ҡайын урмандарына, ошо ерҙә бөрөләнгән тәүге һөйөү хистәренә арнаным. Ихлас яратам мин тыуған ауылымды. Мәсәғүт педагогия училищеһында уҡығанда ла, Башҡорт дәүләт университетында белем алғанда ла һәр саҡ ауылымды һағынып, атлығып ҡайта торғайным.*

*Ижад юлымда башҡорт әҙәбиәтенең күренекле әҙиптәре, яратҡан шағирҙарым Рәми ағай Ғарипов менән Абдулхаҡ ағай Игебаев осрап, миңә илһам, дәрт биргәндәре өсөн ҡыуанып бөтә алмайым. Сөнки тәүге шиғырҙарымды тап улар әҙерләп баҫтырғайны. Ҡыҫҡаһы, күңелем нағыштары һеҙгә оҡшай ҡалһа, ҡыуаныстан йәнем кинәнер ине.*

*З ө һ р ә*

## АШЫҠТЫММЫ, ӘЛЛӘ ҺУҢЛАНЫМ?!

Һин һағышым, һин яҙмышым минең,
Һин — сулпаным инең таңдарҙа,
Шаһит быға йәмле Әй буйҙары,
Һин сереңде сискән талдар ҙа.

Һинең өсөн мин шиғырҙар яҙҙым,
Йыр сығарҙым, һиңә бағышлап.
Үҙкәйеңә бүләк итер өсөн
Ҡулъяулыҡтар сиктем нағышлап.

Әммә-ләкин тормош юлдарында
Ниндәй генә хәлдәр көтөлмәй...
Ашыҡтыммы, яндарыңа килеп,
Әллә һуңланыммы бөтөнләй?!

## ҺИН КИЛГӘНҺЕҢ...

Һин килгәнһең...
Ә мин булмағанмын.
Әлдә булмағанмын — ҡыуанам.
Ҡыуанысым күҙ йәштәре аша
Тағы килер тиеп йыуанам.

Һин килһәң дә ҡыйын,
килмәһәң дә,
Иң ҡыйыны — килеп китеүең.
Ә шулай ҙа һис теләмәҫ инем
Ошо ҡыйыулыҡтың бөтөүен...

### БАЛАН *

(Йыр)

Ауыл осонда — сәскәле ялан,
Ялан ситендә үҫә бер балан.
Яҙҙарын балан шау сәскә ата,
Әйтерһең уға ап-аҡ ҡар ята.
Йылы елдәр, сыуаҡ иртәләр
Балан сәскәһен наҙлап иркәләй.
Күҙҙәрен балан — ялан йәмдәре,
Үҙәкте генә өҙә тәмдәре.
Балан сәскәһен яҙын үҙ иткәс,
Татыйһың тәмен уның көҙ еткәс.
Әсе шул, әсе балан емеше,
Ҡушылған төҫлө уға күҙ йәше.

### МӨХӘББӘТ **

(Йыр)

Мөхәббәт — күңел көҙгөһө,
Унда хистәр сағыла.
Көймә, һөймә, тиһәләр ҙә,
Һөйөр инем тағы ла.

---

* Ғ. Дәүләтбирҙин музыкаһы.
** М. Сәлимов музыкаһы.

Мөхәббәт — ғишыҡ ғазабы,
Белеп булмай аҙабын.
Бәлки, һөймәҫ ине йөрәк,
Белһә әгәр аҙағын.

Мөхәббәт — йәйғор балҡышы.
Күпер һала күңелгә.
Ике ғашиҡтың йөрәген
Тоташтыра ғүмергә.

## АЛЫП ҠАЙТ ҺИН МИНЕ ЙӘШЛЕГЕМӘ

Алып китер төҫлө алыҫтарға
Уй-хыялым — ярһыу арғымаҡ.
Күңел генә тынысланa алмай,
Йылғаһынан ҡалған яр һымаҡ.

Алып ҡайт һин мине йәшлегемә,
Әй буйының текә ярына.
Мөхәббәтең, мөлдөрәмә тулып,
Гүйә йәндәремә һарыла.

Алып ҡайт һин мине йәшлегемә,
Шатлыҡтарым күккә сөйөлһөн.
Ҡараштарың бер назлаһын әле —
Минең дә бит килә һөйөлгөм.

Хыялымда киләм һинең янға,
Иркәләйем бөҙрә сәсеңдән.
Өндәшеүем була, һинең һының
Томандарға инеп йәшенә.

Алып ҡайт һин мине йәшлегемә,
Аҙаштырма юлдар сатында.

Ун етеһе тулған ҡыҙ баланың
Өмөт тулы күҙҙәренә бағып,
Һөйлә әле һөйөү хаҡында.

Алып барыр төҫлө яндарыңа
Уй-хыялым — ярһыу арғымаҡ.
Күңел генә тынысланa алмай,
Йылғаһынан ҡалған яр һымаҡ.

## ҺИН МИҘГЕЛДӘР ТӨҪЛӨ

Бер ҡараһаң, һин яҙҙарға оҡшаш,
Нур бөркәһең, ҡарҙар иретеп.
Бер ҡараһаң, көҙҙәй һалҡынһың һин,
Һөймәҫһеңдер төҫлө тиң итеп.

Бер ҡараһаң, һин ҡыштарға оҡшаш,
Ҡараштарың ҡарҙай иркәләй.
Кистән мине көҙ оҙатып ҡалһа,
Йәйҙәй ҡаршы ала иртәләр.

Мин бит һине аҡ ҡыштарың өсөн,
Алтын көҙөң өсөн үҙ итәм.
Тәбиғәт тә дүрт миҙгелдән тора,
Ә һин бар миҙгелгә тиң икән.

## ҠАЙҘА?

Ҡайҙа булды, әйтсе, ҡайҙа булды
Көтөүҙәрең юлдар сатында.
Барса шиктәреңде ситкә бырғып,
Йәшәүҙәрең өмөт хаҡына.

Ҡайҙа булды мине иркәләгән
Наҙлы һүҙҙәр, йылы ҡараштар?
Хыялымдың серле йондоҙона
Осороп алып барыр ҡанаттар?!

Ҡайҙа? Ҡайҙа? — тиеп тамсы тама,
Һине эҙләй төҫлө улар ҙа.
Мин һағынған яҙҙар ҡайтыр төҫлө,
Бер мөғжизә кеүек булыр ҙа...

## МИНЕҢ ЙЫРЫМ

Йылға буйында
Үҫә бер тирәк.
...Ул ғына бында
Килә бик һирәк.

Наҙлап һорашам
Дуҫ тирәгемдән:
— Уҙмаймы һуң ул
Һинең эргәңдән?

Янына баҫып,
Моңаймаймы кис?
Ымлап та мине
Саҡырмаймы һис?

— Булды, ти, тирәк,
Һөйгәнең бында.
Торҙо, ти, оҙаҡ
Таңғы томанда.

Балҡыһын офоҡ
Ал таң нурында.
Һөйгәнем, һин кот
Ошо урында.
Минең йырым гел
Һинең турында.

## СИХРИ КӨС

Ҡыш тимәсе әле,
Һыуыҡ тимә.
Миңә һыуыҡ түгел һис кенә.
Мин өҙөлөп һөйә беләм, дусҡай,
Ҡыштарын да йәйге хис менән.

Ҡыш тимәсе әле,
Һыуыҡ тимә.
Һис тә һыуыҡ түгел, әҫе бит.
Ҡыштарҙы ла йәйге селлә иткән
Мөхәббәттең сихри көсө бит.

## ҺӨЙӨҮ ҺАҒЫШЫ

Һығылмалы талдай һығылырмын,
Һағышымды йырҙар итермен.
Ғазаптарҙан йәнем әрнеһә лә,
Мин барыбер һине көтөрмөн.

Күкһел томандарға, ай, уралып,
Әй болоҡһой йылға ағышы.
Шул йылғала йөҙәм, елкәнем юҡ,
Ә йөрәктә — һөйөү һағышы.

Күл өҫтөндә йылмаялар төҫлө
Томбойоғо, зифа ҡамышы.
Күңел офоғома сигелә бара
Һиңә булған һөйөү нағышы.

## ҺУҢҒЫ ЙОНДОҘ

Гүйә, ҡапыл өрөп һүндерҙеләр
Төнгө маяҡ — һуңғы йондоҙҙо.
Хистәремде моңдарына сорнап,
Һандуғасым яңы көй һуҙҙы.

Ошо йондоҙомдо эҙләп барам,
Бер туҡталам, берсә ашығам.
Аҙашып та ҡалған болан төҫлө,
Ниңә һаман сығам ҡаршыңа?!

Кире боролайым, ярһымайым,
Ҡыйын булыр, булыр, түҙәйем.
Талдай һығылһам да, бөгөлмәйем,
Өҙөлһөн тик минең үҙәгем.

Сәйер инде. Кемдер шуның өсөн
Мине маҡтар, һәйбәт, тиерҙәр.
Беҙ ултырған сирень эргәһенә
Башҡа ғашиҡ йәндәр килерҙәр.

Гүйә, ҡапыл өрөп һүндерҙеләр
Төнгө маяҡ — һуңғы йондоҙҙо...
Хистәремде моңдарына сорнап,
Һандуғасым яңы көй һуҙҙы.

## АУЫР

Ауыр, әгәр моңоң булмаһа,
Ауыр, йырлар йырың тыумаһа.
Ер йөҙөндә күпме йәшәп тә,
Серең һөйләр дуҫың булмаһа.

Ауыр, әгәр, китеп, йән дуҫың
Киткән мәлдәреңдә килмәһә,
Янып-көйөп, өҙөлөп һөйөп тә,
Һөйгән йәрең һине һөймәһә...

## ЗӘҢГӘР ДОНЪЯ

Бөтә нәмә зәңгәр төҫтә, тиһең,
Зәңгәр тиһең, хатта ҡояш та.
Ер ҙә, күк тә, бөтә нәмә бөгөн
Зәңгәрләнгән һинең ҡараштан.

Бөтә донъя бөгөн зәңгәр төҫтә,
Зәңгәр төҫлө хатта көлөүең.
Һинең ҡарашыңда күрәм уны —
Зәңгәр төҫтә тәүге һөйөүем.

## ХӘТЕРЕМДӘ

Хәтеремдә, талғын моңон көйләп,
Әй һыуының сылтырап аҡҡаны.
Былбылдарҙың йырын түгелдереп,
Алһыуланып таңдар атҡаны.

«Һаумы!» тиеп өндәшәләр төҫлө
Сусаҡтауҙа ап-аҡ ҡайындар.

Ҡоластарын йәйеп,
Үҙ янына
Саҡыра кеүек күкһел сағылдар.
Ҡалай бәхетле мин,
Ғүмер баҡый
Һағындыра торған ерем бар.

## ТУП-ТУҢӘРӘК ДОНЪЯҢ...

*Ҡыҙ хәтере ҡыҫҡа, тик онотмай*
*Тәүге мөхәббәтен үҙенең...*

*Рәми Ғарипов*

Түп-түңәрәк донъяң.
Һинең янда
Тик үҙеңә кәрәк кешеләр.
Яҡты йондоҙ төҫлө яңғыҙ яна,
Алыҫ яна минең ишеләр.

Кемдер, бәлки, күңелеңде биләр.
Әммә элеккесә янмаҫһың.
Оноторға мине теләһәң дә,
Һин барыбер онота алмаҫһың.

Сәскәләргә баҡһаң, хәтерләрһең, —
Тәүге тапҡыр миңә өҙгәйнең.
Әле яңғыҙ — өҙгән сәскәңде һин
Кемгә бирә алмай йөҙәйһең.

Йырлап бөтә алмаған йырыңмын мин,
Айлы кистә тулған хистәрең.
Миңә бары һине, һиңә — мине
Бүләк иткән сихри кистәрең.

Онота алмаҫһың мине, тырышһаң да
Хәтереңдән мәңге юйырға.
Йөрәгеңә тәүге мөхәббәтем
Утлы сәскә булып уйылған.

Мин төшөңә инеп дөрләтермен
Бәгер усағыңдың уттарын,
Балҡып, хәтерләтеп торормон мин
Һиңә ғашиҡ булған йән барын.

Дөрөҫ булманы бит:
Яныуҙарың,
Һөйөүҙәрең үтер, тигәнең.
Мин — мөхәббәт,
Тәүге мөхәббәтең,
Һиңә китер өсөн килмәнем...

## ТАШЛАП КИТМӘ МИНЕ, МӨХӘББӘТ

Үкһегәндә күңел ҡысҡыраһы килә:
— Ташлап китмә мине, мөхәббәт!
Һин булғанда ғына мин ҡанатлы,
Һин булғанда ғына мөһабәт.
Ташлап китмә мине, мөхәббәт.

...Хыянатҡа хайран ҡалып булмай,
Ул ағыулы, ул бит аяуһыҙ.
Ынйы йәштәреңде төймәләдереп,
Һаға ҡайсаҡ, һаға аяуһыҙ.

Ҡыйын ғына түгел, ғазап икән
Юғалтыуҙар юлда һөйөүҙе.
Күңел үлсәмдәре һыйҙыралмай
Иңерәткән сикһеҙ көйөүҙе.

Ярты юлда япа-яңғыҙ ҡалдым,
Һары һағыштарға уралып,
Хәҙер хыялдарҙа кисерәм тик
Һөйөүҙәрҙең һуңғы буранын.

Һин ҡош түгел,
Яҙын ҡайталмаҫһың,
Ташлап китмә мине, мөхәббәт.
Һин булғанда ғына ҡанатлы мин,
Һин булғанда ғына мөһабәт.
Ташлап китмә мине, мөхәббәт?!

## ЙОНДОҘ АТЫЛҒАНДА

Ҡара әле, ҡара,
Зәңгәр күктә,
Ана, тағы йондоҙ атыла.
Аҡыл әйтә, онот, үтте ти ҙә,
Йөрәк һаман һиңә тартыла.

Һөйәм, тиеп сихырлаған мәлең —
Ҡыш уртаһы килгән яҙ ине.
Йөрәгеңдән урғып сыҡҡан хистәр —
Ҡанат ҡуя торған наҙ ине.

Һәр атылған йондоҙ,
Яуап табалмайса,
Һүнеп ҡалған һөйөү утылай,
Уртаҡ юлдар юрап, күккә бағам,
Айлы кистә йондоҙ атылһа.

## БЫЛ ДОНЪЯНЫҢ ҺИНҺЕҘ ЮҠ ЙӘМЕ

Алыҫ офоҡтарҙы урап үткән
Беҙҙе осраштырған юл микән.
Йөрәгемдә уйылып та ҡалған
Һине осратҡан көн икән.

Ҡар һыуҙары булып аҡтыңмы әллә,
Көтә-көтә етте төш мәле.
Ҡулһеҙ ҡалған балыҡ төҫлө тоям,
Был донъяның һинһеҙ юҡ йәме.

Беҙ йөрөгән һуҡмаҡтарҙы күптән
Баҫҡан инде бәпкә үләне.
Таң елдәре килеп саҡырһа ла,
Йүгереп килмәҫеңде беләмен.

Һин алыҫта, юлдар айырылған.
Ҡояш күтәрелгән — төш мәле.
Кәкүк булып бер саҡырһаң ине,
Был донъяның һинһеҙ юҡ йәме.

## КӨҘГӨ СЕРЕНАДА

Уралда көҙ.
Икмәк еҫе аңҡый.
Һәр тарафта ҡояш нурҙары.
Кемдең генә йәнен арбамай һуң
Был миҙгелдең сихри моңдары.

Алтын алҡа таҡҡан уҫаҡтарҙың
Ауаздары күсә күңелгә.
Аҡ ҡайындың сылтыр сулпыһынан,
Гүйә, көмөш сыңдар түгелә.

Ялбыр тирәктәрҙең тирбәлеүе
Сиртә төҫлө хистәр ҡылына.
Әйтерһең дә әкиәт батшалығы
Йыр ынйыһы һибә юлыма.

Әле ҡасан ғына,
Көн-төн тимәй,
Шау-гөр килеп торған яландар
Хәл йыялар,
Яҙҙар етеү менән,
Ошо яландарға ырыҫ өҫтәп,
Бураҙналар ярыр һабандар...

Уралда көҙ.
Икмәк есе аңҡый.
Һәр тарафта ҡояш нурҙары.
Кемдең генә йәнен арбамай һуң
Был миҙгелдең сихри моңдары.

## ҺИН КӨҘҘӘРҘЕ ЯРАТМАЙЫМ, ТИҺЕҢ...

Һин көҙҙәрҙе яратмайым, тиһең.
Ҡара әле, ниндәй хозурлыҡ!
Ерҙә яҙың, көҙөң булыуҙары —
Үҙе бит һуң ниндәй ғорурлыҡ!

Һин көҙҙәрҙе яратмайым, тиһең.
Ә мин уны ихлас яратам.
Шуға ҡоштар киткән мәлдәрҙә лә
Һәр бер таңын көтөп йән атам.

Һин көҙҙәрҙе яратмайым, тиһең.
Ул бит йылдың сағыу миҙгеле.
Шатлыҡлы ла, һағышлы ла мәле —
Ғүмер ағышымдың көҙгөһө.

## АҠ БУРАНДАР

Аҡ бурандар! Ауылым урамына
Сәләм илтһә ине таңдарҙа.
Буран ҡыҙы булып ҡайтыр инем
Ауылыма ап-аҡ ҡарҙарҙан.

Шаҡыр инем тәҙрә ҡапҡастарын,
Байрам менән ҡотлап әсәйҙе.
Алты ҡыҙың алты яҡта хәҙер,
Бер үҙең һуң нисек йәшәйһең?!

Әсәкәйем килеп ишек асыр,
Күҙҙәрендә — йәштәр-һөйөнөс.
Ҡыҙҙарым, тип, йәшәйһең һин ерҙә,
Һәр аҙымға беҙҙең һөйөнөп.

Аҡ буранды ситкә ҡаҡма, әсәй,
Унда минең һағыш-йырҙарым.
Йырҙарымды бурандарға ҡуштым,
Тыңлаһын, тип, ялан-ҡырҙарым.

Һағыныуҙарым, ап-аҡ тәңкә булып,
Әйләнделәр шулай ҡарҙарға.
Аҡ бурандар — минең аҡ сәләмем
Серем тыңлап үҫкән талдарға.

## ЯЛАҒАЙ

Берсә уны нәжәгәй ҙә тиҙәр,
Берсә йөрөтәләр — ялағай.
Офоҡтағы болоттарға ҡунып,
Бар ғәләмде әллә ягалай.

Бушҡа ялтыраусан ни мәғәнә?
Һин барыбер йәнһеҙ ялағай.
Тетрәтерлек ялҡының юҡ һинең,
Ялтлауыңды һағыш һағалай.

Болоттарҙы ярһын йәшен уғы,
Тетрәтһен бер күкрәү тауышы.
Шифа ямғыр көткән ошо мәлдә
Ер менән күк китһен ҡауышып.

Ялағайҙы түгел, яҡын күрәм
Күк күкрәтеп йәшен йәшнәүен.
Кеше шулай ерҙә иҫбат итә
Күкрәүҙәр булып йәшәүен.

## КЕЛӘМ ҺУҒА ҠӘЙНӘМ

Келәм һуға ҡәйнәм кис ултырып,
Биҙәктәре йәйғор төҫөндә.
Барса төҫтәр бергә йыйылған да
Бейей төҫлө келәм өҫтөндә.

Һарылары — кискән һағыштары,
Айлы кистә тамған йәштәре.
Зәңгәрҙәре — яҡты хыял төҫлө,
Алһыулана — әсә хистәре.

Ҡыҙыл төҫтәр — күрер шатлыҡтары
Ғүмеренең гүзәл көҙөндә.
Ҡәйнәм һуҡҡан келәм йыйған төҫлө
Барса матурлыҡты үҙенә.

Ана, йәйғор ҡунған бер осона.
Нур һибелә төҫлө түгелеп.
Бар йылыһын күсергәндәр һымаҡ
Был келәмгә әсә күңеле.

Келәм һуға ҡәйнәм. Келәмендә
Сағыла төҫлө барса уйҙары.
Алһыу, ҡыҙыл төҫтәр, гүйә, уға
Хәтерләтә ғүмер юлдарын.

## КИЛЕН БУЛЫП ТӨШӘМ ДАЛАҒА

Беҙҙең яҡтар шөйлә ҡара урман,
Яландары бары түтәлдәй.
Сал далала һин көтәһең мине,
Күңел төшмәй һинән бүтәнгә.

Дала яғы һинең үҙең кеүек:
Берсә ҡырыҫ, берсә яғымлы.
Ҡуйсы, өгөтләмә, шул далаға
Алмаштырмам тыуған яғымды.

Тәүге мәлдә шулай кукрәк ҡаҡтым,
Күңел генә: «Ярар!» — тимәне.
Үҙең кеүек далаң бик ҡәҙерле,
Саҡыр ғына, саҡыр, һөйгәнем:
Күңелемдә далаң ҡылғаны.

Мин килермен урмандарҙы үтеп,
Дала юлдарынан ҡәҙимге.
Һөйгән йәргә киләш булып төшһәң,
Ят дала ла ғәзиз, ҡәҙерле.

## ҺАБАНТУРҒАЙ ЙЫРЫ

Иремәгән ҡарҙар, боҙҙары ла
Ярҙарына ята бәйләнеп.
Аяҙ күктә яҙ нурҙары артҡан,
Һабантурғай ҡайтҡан әйләнеп.

Йәлләп ҡуйҙым яҙҙың хәбәрсеһен:
— Иртәләгәнһең бит, турғайым.
Офоҡтарҙан монар күтәрелмәй,
Асылмаған болон, туғайың.

— Ҡанат остарымдан һөйөү тама,
Иретермен ҡарҙар буранын.
Әле бына йөрәк ялҡынымды
Зәңгәр боҙға бөркөп ураным.

Алыҫ илдәрҙә лә йөрәгемдә
Ерем йылыһын мин йөрөтәм.
Аҡ ҡарҙарҙы, ҡалын боҙҙарҙы ла
Дәртле йырым менән иретәм.

Иремәгән ҡарҙар, боҙҙары ла
Ярҙарына ята бәйләнеп.
Аяҙ күктә яҙ нурҙары артҡан,
Һабантурғай ҡайтҡан әйләнеп.

## КИЛЕН ТӨШКӘНДӘ

Ҡыңғырауҙы аттар елеп килә,
Әйтерһең дә йәйә уҡтары.
Малай-шалай ат алдынан саба:
Кемгә тейер килен суҡтары?!

Ҡуш көбәктән атып ебәрҙеләр —
Йортҡа яман ғәҙәт кермәһен.
Еңгәләре бигерәк уңған икән,
Элеп сыҡҡан килен бирнәһен.

Тәүге һынау үтә иң йәш килен —
Әҙер көйәнтәләр, биҙрәләр.
Килен һыу башларға бара хәҙер,
Барса күҙҙәр баҡҡан тәҙрәгә.

Шат еңгәләр таҡмаҡлайҙар:
«Тоноҡ һыуҙай таҙа бул,
Яҡшы юлды тап, килен.
Буйыңды керһеҙ таҙа ҡыл,
Йомортҡалай аҡ килен!»

Туй аттары еләә, туй аттары,
Килен төшә беҙҙең ауылға.
Туйҙы ҡотлап, күктә болот сыға,
Шифа ямғыр булып яуырға.

## ҺӨЙӨЛӨҮҘӘН КЕМ ТУЙҒАН?!

Ҡаршымда һүрәтең тора.
Иҫкә төшөрмәк булдым.
Һине осратып уңдыммы мин,
Әллә бөтөнләй туңдым?!

Мөхәббәтем терәк миңә
Янып-көйөнгәнемдә.
Уңһам да, туңһам да риза
Һөйөп-һөйөлгәнемә.

Онотолмаç йәдкәр булып,
Йәшлек йылдарым уҙған.
Күңел генәм әле лә йәш,
Һөйөлөүҙән кем туйған?!

## ГҮЗӘЛЛЕК

Һуштан яҙып бағам тәбиғәткә,
Ҡайҙан килгән шундай гүзәллек.
Күк көмбәҙҙә һабантурғай һайрай,
Моңо үҙәгеңде өҙәрлек.

Уйым менән икәү, бергәләшеп,
Төшәбеҙ беҙ Әйҙең ярына.
Беҙҙе сәләмләүе ошо микән,
Тулҡындарға тулҡын ҡағыла.

Аҡ күлдәген кейгән муйылдарым
Кейәү-тирәктәргә һыйынған.
Әйтерһең дә туй көтөлә бөгөн,
Талдар шул табынға йыйылған.

Ауылымдың гөллө туғайҙары,
Йәшеллеккә сумған үҙәнлек, —
Бөтәһе лә минең йөрәгемә
Тыуған ерҙән күскән гүзәллек.

## ЙОҠЛАЙ БАЛАМ

Елдәр иҫмәй, болоттар ҙа күсмәй,
Тора кеүек бер үк урында.
Барса донъя серем итә төҫлө, —
Балам йоҡлай минең ҡулымда.

Йокла, балам! Төштәреңә инһен
Йондоҙ ҡунған йылға ярҙары.
Бәхеттәрең мөлдөрәмә тулһын,
Балҡып тыуһын килер яҙҙарың.

Тәбиғәт тә һине һаҡлай кеүек,
Бөтә мәшәҡәттән арынып.
Һин уянһаң, күктә сирек ай ҙа
Тулып китер төҫлө ҡабынып.

## УЛЫМА

Өй күтәрһәң, улым, тәҙрәләре
Ҡояш сыҡҡан яҡҡа ҡараһын.
Алһыу таңдар менән өй эсенә
Аҫыл моңдар ғына таралһын.

Ҡояш менән тороп, ятып өйрән,
Яҡтылығы күсһен йөҙөңә.
Ул сағында ҡояш кеүек уңған,
Көләс булырһың һин үҙең дә.

Йорт күтәрһәң, улым, тәҙрәләре
Ҡояш сыҡҡан яҡҡа ҡараһын.
Ҡояш нуры менән өй эсенә
Бәхет нуры ғына таралһын.

## БАҪЫУҘАРЫМ

Һаумыһығыҙ, таныш баҫыуҙарым!
Ҡалғайны бит һеҙҙә эҙҙәрем.
Эҙҙәремде, һеҙҙе күҙләй-күҙләй,
Талсығып та бөттө күҙҙәрем.

Һай, ғүмерҙең үтеп китеүҙәре...
Минең эҙҙәр күптән һөрөлгән.
Шәйләп кенә барыбер тойомлайым —
Күк томанға улар төрөнгән.

Булыр әле, булыр үтәһеләр
Баҫыуҙарҙы буйға, арҡыры.
Тик йәшлектең йәшел баҫыуҡайы
Йыраҡтарҙа ҡала, ахыры...

## ИКМӘК ЕҪЕ

Бына тағы ҡайттым ауылыма,
Асылыма ҡайттым яңынан.
Йылдар, сәскә тотоп ҡулдарына,
Йүгереп үтә кеүек янымдан.

Бына тағы тирәк ботағында
Яҙ билгеһе — бөрө яралған.
Ауыл урамына иң ҡәҙерле,
Тәмле икмәк еҫе таралған.

Бар донъямды шатлыҡ солғап ала
Яңы бешкән икмәк еҫенән.
Әпәкәйҙе ҡулға алған һайын
Ауылымды иҫкә төшөрәм.

## ЯЛҒАН ӘСӘГӘ

Үҙәгемде телде ҡара хәбәр:
«Ташлап киткән әсә балаһын».
Намыҫына ҡорт төшкәнме әллә,
Ташлап киткән әсә балаһын,
Уйламаған етем ҡалаһын.

Ниндәй таш бәгер ул сабыйкайын
Яҙмыш — юл сатында ҡалдырған.
Шул түгелме икән борон заман
Ҡом-таш менән урап яндырған?!

Өмөт бағлағандыр, әсәм, тиеп,
Сит-ят ҡулдар алып биләгәс.
Ниңә уға гүмер уты өрҙөң,
Күкрәк һөткәйеңде йәлләгәс?!

Үҙәгемде телде ҡара хәбәр:
«Ташлап киткән әсә балаһын!»
Белмәгәнме бала ғына түгел,
Үҙенең дә етем ҡалаһын.

Эй, илаһи донъя, ни мөғжизә тағы,
Түбәнһеттең шулай кешеңде,
Лайыҡтарға ғына бирһәң икән
ӘСӘ тигән бөйөк исемде.

## ЯҢҒЫҘЛЫҠ

Дүрт стена. Һин яңғыҙың һаман,
Ярты юлда ҡалған юлсылай.
Әллә яҙмыш һине ситкә ҡаға,
Әллә инде шулай ҡурсылай.

Бәхетлемен, тиеп, уйлаһаң да,
Бәхеттәрең һинең икеле.
Әле тоҡандырған усағың да
Яңғыҙ ғына яна шикелле.

Яңғыҙлығың кеһәрле уҡ һымаҡ
Йөрәгеңә килеп ҡаҙала.
Ғорурлығың үҙәгеңә үтеп,
Уны түгел, һине яҙалай.

Яңғыҙ елкән төҫлө һуғылаһың
Тормош диңгеҙенең ярына.
Өмөтөңдө өҙөп, туктап ҡалһаң,
Алда тағы бер ут ҡабына.

Ошо яҡты һине албырғата,
Ул бит мөхәббәтең яҡтыһы.
Йөрәгеңә ут ҡабыҙыр төҫлө
Мөхәббәттең тик бер саҡҡыһы.

## ИЛАҠ КӨҘ

Көҙҙөң бөгөн иң-иң илаҡ көнө,
Ҡоя ғына ямғыр силәкләп.
Ҡемдер әллә күккә күтәрелеп,
Үткәрәме һыуҙы иләктән?!

Ә аяҙ күк, бикле бала төҫлө,
Аса алмай болот ҡоршауын,
Һыктай төҫлө әсе әрнеү менән,
Ишетергә теләп ер шауын.

Яуһын әйҙә ямғыр,
Алда әле
Сыуаҡ көндәр, алһыу иртәләр.
Уралымдың илаҡ көҙҙәре лә
Йылдар сылбырына сиртәләр.

## КҮҢЕЛЕМДӘ ЯҘҒЫ ИРТӘЛӘР

Мамыҡ кеүек йомшаҡ ҡарҙар төшөп,
Сәстәремде, битте иркәләй.
Тик йөрәгем ҡыш һыуығын тоймай,
Күңелемдә яҙғы иртәләр.

Һинең менән ҡаршылаған таңдар,
Һинең менән үткән һуҡмаҡтар...
Ҡар аҫтында ҡалған һукмаҡтар ҙа
Беҙҙе онотмаған һымаҡтар.

Йөрәгемде һаман елкендерә
Йәшлегемдең алһыу иртәһе.
Элеккеләй яҡты хыял менән
Һуҡмағыңдан килә үтәһем.

## ҠОШТАР ҠАЙТА

Сикһеҙ киңлектәрҙе әйҙәп оса,
Ҡайта ҡоштар, ҡайта теҙелеп.
Киткән ҡоштар ҙа бит тыуған яғын,
Тыуған ерен һөйә өҙөлөп.

Төркөм-төркөм булып ҡайта ҡоштар,
Һағыштарға тулы моңдары.
Үткәндәргә алып ҡайта улар,
Тетрәтеп йөрәк ҡылдарын.

Һандуғастар талдарына ҡуна,
Аҡҡош төшә айбар күленә.
Ҡоштар ҡайта тыуған ерҙәренә,
Ә мин ҡайтам йәшлек иленә.

Сикһеҙ киңлектәрҙе иңләп оса,
Ҡайта ҡоштар, ҡайта теҙелеп.
Киткән ҡоштар ҙа бит тыуған яғын,
Тыуған ерен һөйә өҙөлөп.

## МИЛӘШ ЯМҒЫРЫ

Аҡ ҡар өҫтәрендә ҡыҙыл миләш, —
Миләш емештәре ҡойола.
Әйтерһең дә елдәр емештәрҙән
Нағыш сигә ҡояш нурында.

Әсе елдәр гәжәп моң һуҙалар.
Миләш тәлгәшенә ҡағылып.
Ә миләштәр түгелеп илай төҫлө,
Сыуаҡ яҙҙы, йәйҙе һағынып.

Ҡышҡы һалҡын үҙәгенә үткән,
Тама йәше аҡ ҡар өҫтөнә.
Был донъяла ҡалған өмөттәре
Ҡайнар күҙ йәштәре төҫөндә.

## ҠАРАШЫҢДА ҠАРҘАР ЯТА, ТИҺЕҢ...

Ҡарашыңда ҡарҙар ята, тиһең,
Ә һин ҡарашыма ҡарама.
Һөйөү хисе ҡараштарҙа түгел,
Йөрәк түрҙәрендә ярала.

Ҡарашыңда ҡарҙар ята, тиһең,
Хаҡлыҡ барҙыр, бәлки, һүҙеңдә.
Ҡараштағы ҡарҙы иретерлек
Ялҡын булһаң ине үҙең дә.

Ҡарашында ҡарҙар ята, тиһең,
Ҡыш үтеүгә ирей ҡарҙар ҙа.
Минең һағыштар ҙа, ҡарҙар кеүек,
Ирешәләр икән яҙҙарҙа.

## ҺИНЕҢ ВӘҒӘҘӘЛӘРЕҢ

Бөтәһе лә үтте. Үтте һөйөү.
Йөрәктәрҙә ҡалды яралар.
Ҡалды онотолмаҫ хәтирәләр,
Ҡалды тоташмаған аралар.

Яуа ергә тирәк мамыҡтары,
Әйтерһең дә оса өмөттәр.
Вәғәҙәләрең һинең яҙын осҡан
Тирәк мамыҡтары кеүектәр...

## БЕСӘН САПҠАНДА

Етте тағы бесән мәлдәре,
Йыйып йәйҙең барса йәмдәрен.
Йондоҙ төҫтәрендә офоҡтар,
Һыйы булып балҡый ысыҡтар.

Салғы остарына ҡунып алған,
Ем-ем итә ысыҡ саҡҡыһы.
Арыуҙарым — баҡуй остарында,
Кистәрен дә килмәй ҡайтҡыһы.

Бесән мәле бар ырыуҙы йыя,
Гөрләп тора туғай өҫтәре.
Бала саҡҡа алып ҡайта төҫлө
Яңы сапҡан үлән еҫтәре.

Тәүге тапҡыр бакуй сыҡҡан мәлдәр,
Күрһәтергә теләп үҫкәнде.
Ә артымдан еңгәй баҫыш килә:
«Ашыҡ, бикәс, киҫәм үксәңде!»

Албырғаным, әммә ал бирмәнем,
Дәрт өҫтәне миңә аҡ ҡайын.
Шунан бирле илаһи дәрт менән
Бесән мәлен көтәм йыл һайын.

...Үтте инде бесән мәлдәре,
Кинәндереп беҙҙең йәндәрҙе.
Гөрләп торҙо тугай өҫтәре,
Күңелдәрҙә — бесән еҫтәре.

* * *

Тағы ҡайтып бер урауым
Ауылым урамдарын.
Эҙҙәремде ҡаплап киткән
Февраль бурандары.

Ҡайтҡан һайын, һине эҙләп,
Йәшлек юлдарын үтәм.
Инде сәстәр ҙә салланған,
Ә мин һаман да көтәм.

Һары һағыш ҡунған төҫлө
Беҙ ултыртҡан ҡайынға.
Оялсан миләш, ҡыҙарып,
Шул ҡайынға һыйынған.

Көҙгө көндәй керпегемә
Тамсылар ҡунған тағы.
Күңелемдең болоҡһоған,
Һине һағынған сағы.

* * *

Болон-туғайҙарға томан яҡкас,
Һалҡынса төн урай урманды.
Ай һылыуы, ергә килеп төшөп,
Асыр төҫлө серле ҡорғанды.

Сүмес йондоҙ үрелеп эсә һымаҡ
Шишмә һыуын Ерем ҡыҙының.
Йондоҙҙары таҡмаҡ әйтә төҫлө,
Ай һылыуы сиртә ҡумыҙын.

Төнгө моңдар, талир тәңкә булып,
Таңғы ысыҡтарға ҡағыла.
Ауылымдың ошо серле төнөн,
Ғорур йәшлегемдә һағынам.

КУРҠМА

Ҡурҡма юҡҡа, йылдар үтә, тиеп,
Һәр миҙгелдең бар үҙ сираты.
Ҡатын-ҡыҙҙар ихлас наҙлы булһа,
Ҡыйыу була ерҙә ир заты.

Хәүефләнмә, ҡайғы-хафаларым
Йөрәгеңде утҡа һалыр, тип.
Йәшлегемдән ҡалған яраларым
Ғүмер буйы һулҡып һыҙлар, тип.

Сират күпереләй тормош юлын
Үтерһең һин, ҡурҡма, арымай.
Кем көрәшмәй, ҡайғы-хәсрәткә лә
Оло бәхеткә лә тарымай.

## АҒИҘЕЛДӘ ТАҒЫ БОҘ КИТӘ

Яҙ һулышы — ниндәй илаһи дәрт.
Яҙҙың гәйрәтенә ни етә?!
Мәңге китмәҫ төҫлө ныгынғайны, —
Ағиҙелдә, ана, боҙ китә.

Яҙ гәйрәте — сәмле ир гәйрәте.
Ярһыу хыялдарҙы үҙ итә.
Күңелдәргә яңы шатлыҡ өҫтәп,
Ағиҙелдә тағы боҙ китә.

Яҙ гәйрәте — ғорур ҡыҙ сәләме,
Ҡалын боҙҙарҙы ла ирета.
Ерем күкрәгендә шатлыҡ тиртә,
Ағиҙелдә тағы боҙ китә,
Яҙҙар күңелде лә иретә...

## ЯҘ ҺУЛЫШЫ

Яҙ, кинәнеп, иркен һулыш ала.
Ағастарҙа бүртә бөрөләр.
Ҡарағыҙсы, талдың бөрөһө лә
Ал ҡояшҡа табан үрелгән.

Һылыуҡайҙың сылтыр сулпыһылай,
Сут-сут тама тағы тамсылар,
Март елдәре ашыҡтырған һымаҡ,
Ҡыш һыуығын ҡыуып, ҡамсылап.

Ергә, ярһып, яҡты яҙҙар килә,
Гөрләүектәр шаулап ағырҙар.
Күкте байҡап, һабантурғай һайрар,
Гөлдәр беҙгә наҙлап бағырҙар.

Күңелдәрҙән шатлыҡ урғып сыға,
Әйтерһең дә яҙғы йырғанаҡ.
Яҙ һулышы — яңы бәхет ерҙә,
Гөрләй тормош яҙғы йыр һымаҡ.

## ТӨНГӨ ТЫНЛЫҠ

Төнгө тынлыҡ шундай гүзәл икән,
Тыңлап туя(а)лмаҫлыҡ йыр һымаҡ.
Ай нурҙары үргән һуҡмаҡтары
Киләсәккә илтер юл һымаҡ.
Төндөң бөгөн уйсанланған мәле,
Күкһел томандарҙан — көлдәге.
Аҡрын ғына бәпес көйөн һуҙып,
Иркәләйҙәр наҙлы елдәре.
Ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына шыбырлаша
Тәҙрә ҡаршыһында муйылдар.
Әйтерһең дә улар, һалдат һымаҡ,
Тынлыҡ һаҡлар өсөн ҡуйылған.
Рәхмәт, тормош,
Бүләк иткәнеңә
Тәбиғәттең сихри мәлдәрен.
Ҡәҙерҙәрен белеп йәшә генә
Ошо гүзәллектең йәмдәрен.
Төнгө тынлыҡ,
Көндөң тынысլығы —
Барса кешеләрҙең теләге.
Балаһына, илгә бәхет теләп
Тибә әсәләрҙең йөрәге.

# ФЛҮЗӘ МЫРҘАБАЕВА

# ҺАҒЫНЫУҘАРҒА ЮҠ САРА





*Мең ырыуы ҡыҙымын. Тыуған ерем — Өршәк буй-ҙарын төйәк иткән Ауырғазы районының Мораҙым ауылы. Күккә олғашҡан тауҙар, өҫкә ауып килгән урмандар араһында тыуып үҫкән кешеләргә түмәләс-тәй генә күренгән тауҙары, ҡыуаҡлыҡтар һымаҡ тойолған урмандары, аҡһыл ҡылғандары, һәр ҡыяҡ үләне, бөртөк-бөртөк күлдәре, табандарым тейгән тупрағы үтә лә ғәзиз, ҡәҙерле. Дала елдәре лә урап үтмәй тыуған яҡтарымды. Шуғалырмы — тәбиғәте ҡырыҫыраҡ. Ауылдаштарым да тәү ҡарашҡа ҡы-рыҫыраҡ тойолһа ла, ихлас, ябай, баҫалҡы, йырлы-моңло.*

*Тәүәккәлләп, күңелемде асам. Асылым, булмы-шым — шиғыр юлдарында.*

*Матбуғат өлкәһенә аяҡ баҫыуыма ла ике тиҫтә йыл ғүмер уҙып киткән икән. Башта Ғафури райо-нының «Йондоҙ» гәзите редакцияһында эшләнем. Ошонда журналист хеҙмәтенең тәмен тойҙом, яраттым. Бына ун биш йылдан ашыу «Башҡортостан» гә-зите редакцияһында эшләйем.*

*Ф л у з а*

## САЯЛЫҠТАР БИКТӘ

Күкһел тауҙар, күкһел сауҡалыҡтар,
Һеҙме әллә һағыш тараткан.
Аҡ тынлыҡта бер уйланып үттем
Эҙҙәребеҙ ҡалған тарафтан.

Мин мин түгел, болоҡһоу ҙа күңел.
Кем ҡыштарҙан эҙләй йәйҙәрен.
Дыуамал сәм, хәтерҙәрҙе айҡап,
Һүтмәк була ғүмер бәйләмен.

Үткәндәрҙең моңо йөрәк тулы,
Сабырлыҡтар — кипкән күгүлән.
Кисерәһен баштан кисерелгән,
Күреләһе инде күрелгән.

Тормош бөтөн. Тик йәшәүҙәр ситен,
Күңелдәр бит китек — бир түҙем.
Саялыҡтар биктә, хистәр өтә:
«Ҡайҙа яңылыштым — их үҙем...»

Аҡ тынлыҡта бер моңланып үттем
Эҙҙәребеҙ ҡалған тарафтан.
Етенһыу ҙа сәсең, зәңгәр күҙең
Йылдарыма инеп аҙашҡан.

## ЙӘНЕМ ЯРЫП БИРЕР САҠТАРЫМ

Һин һынама мине сыҙамлыкҡа,
Дусар итеп яңғыҙ кистәргә.
Ҡылған эштәремә үкенмәйем —
Аҡыл юлдаш түгел хистәргә.

Сабырлыктар килешәлер ҙә ул
Һинең кеүек асыл йәндәргә.
Ғүмер үтте, гел ымһыныш ҡалдым
Өлөшөмә тейгән йәмдәргә.

Өлөшөм дә түгел, көмөшөм дә —
Күктән көтөп ерҙән тапҡаным.
Һин һынама мине мөхәббәттә —
Йәнем ярып бирер саҡтарым.

## ӘРНЕҮҘӘРЕҢ АЛАМ ҮҘЕМӘ

Моңһоулығың йөрәгемә төштө,
Һағыш ҡына тулы күҙеңдә.
Ҡарашыңа балҡыштары ҡайтһын,
Әрнеүҙәрең алам үҙемә.

Ҡыйынһынһаң, асма күңелеңде,
Һөйөнәйек — һаман бергәбеҙ.
Башҡынаңды күкрәгемә һал да —
Онотолһон ғазап-серҙәрең.

Бер түгелеп ила. Йөрәгеңдән
Хәсрәттәрең сыкһын йыуылып.
Иреңеңә йылмайыуҙар ҡунһын,
Йөҙҙәреңә инһен нур тулып.

Аяк басыуыңа дәрт өҫтәлһен,
Күңел йылым һибәм эҙеңә.
Уйыңдағын бер әйтергә ҡыймай,
Ғүмерҙәрҙең уҙғанын да тоймай,
Тилмерешкән йәндәр беҙ генә.

...Моңһоулығың йөрәгемә төштө,
Әрнеүҙәрең алам үҙемә.

## ЮҠҠА ҠУРҠТЫҢ

Юҡҡа ҡурҡтың минән, һөйөүемдән,
Ихласлыҡтан ҡурҡтың, бәхеттән.
Шулай инде — һөйөү батшаны ла
Баш тарттырған хатта тәхеттән.

Һин үҙеңә-үҙең алла, батша,
Ерҙә ныҡ тораһың, саяһың.
Утҡа һалыш, аҙаҡ кире ҡағыш,
Ялҡындарҙан микән аяуың?

Берүк кенә йәлләй күрмә мине,
Йәнем ғорур, йәнем саҡматаш.
Түбәнһенмәй, түбәнһетмәй китәм,
Арабыҙҙа йәшен ялтлағас.

Бер нәмә лә мәңгелеккә түгел,
Мөхәббәттә ахыры өтөлдөк.
Ҡара көйгән йөрәк. Ҡуҙы ҡалған —
Усаҡ утын ғына тоторлоҡ.

## ҠӘНӘФЕРҘӘР АСЫЛЫРҘАРМЫ ИКӘН?

Ҡәнәферҙәр асылғандыр инде
Яңы йылдың яҡты көнөндә,
Һөйөү генә тулы ҡарашымды
Күрҙеңме икән сәскә күҙендә?

Моң тулышып ҡына бөгөлгәндә,
Нәҡ уларға оҡшаш булмышым,
Таждарынан бөрккән хуш еҫтәре —
Биттәреңде өтөр һулышым.

Аҡ тынлыҡты елдәр һиҫкәндерә,
Сыҡмаҫ тимә ғинуар буранын,
Тик бер генә һүҙең баҫыр ине
Күңелдәге хистәр тулауын.

Ҡәнәферҙәр асылырҙармы икән
Яңы йылдың яҡты кисендә?..
Юрағаным ғына юш килһен, тип
Нәҙер әйттем һинең исемгә.

## ЙӨРӘГЕМДӘ УҢАЛМАҪЛЫҠ ЯРАМ

Бала имеҙгән ҡатындарҙы күреп,
Күкрәктәрем күпме һулҡылданы,
Тертләп уяныуҙар иҫәпһеҙҙер,
Төштәремдә күреп сабыйҙарҙы.

Тәүәккәл дә аҙым яһауҙарҙан
Тыя килде гелән күңел үҙе:
«Яманатым сыҡһа, яҡшы булмаҫ,
Ҡаралыр бит ата-әсәм йөҙө».

Үтте ғүмер, һиҙҙермәй ҙә үтте,
Бәхет тигән йылғыр атта ғына.
Кисерер ҙә ине, бәлки, хоҙай
Тыуыр сабый ғынам хаҡтарына.

Үкенеүҙәр, аһ, ул үкенеүҙәр!
Йәшем булып бөгөн тамаһығыҙ.
Тәҡдирмелер, тиеп аҡланыуҙар —
Һулҡылдаған ярам дауаһылыр.

Уйылып та китер уйҙарымдан
Арынам да йәнә көнгә бағам,
Ни тиһәң дә, ғүмер бер килә бит,
Китек бәхеткә лә мин ҡыуанам...

...Йөрәгемдә уңалмаҫлыҡ ярам —
Тыумай ҡалған балам...

## ЙӘШӘТКӘН ДӘ ӨМӨТ

Мәшәҡәттәр һис бөтәһе түгел,
Һиҙелмәй ҙә үтә ғүмерҙәр,
Тормош усағында көйрәп ҡала,
Йән әрнетеп, йылдар-күмерҙәр.

Һағыныуҙарҙан еҙәләп китеп, йөрәк
Талпына ла тағы һүрелә;
Тауыш биреп, бер күрешер өсөн
Тәүәккәллек етмәй. Түҙелә.

Түгелә-түгелә һөйләр һүҙҙәрем бар,
Көндәремде ялғап төндәргә. —
Ҡәҙер төпә яҙыҡ түгелдер ҙә
Наҙ танһыҡлап көткән йәндәргә.

Мин һүрелдем инде мизгел һанап,
Осрашыузар көтеп төнөлдөм.
...Өмөт ҡузы ғына өтөп ала
Монло ҡылын уйлы күнелдең.

## АШЫҒТЫРМА

Ашыҡтырма мине,
баш юғалтып
Ғашиҡ булыр сағым үткәндер, тим.
Тойғоларым ғына, һынап-һайлап,
Маңлайыма һала һырзарзан ин.
Ашыҡтырма мине,
сабырзар бул,
Күрәм күззәреңдә ялбарыуын.
Үзем дә бит өзөлөп наззар көтәм,
Төштәремә керә килер юлың.
Бер үк кенә сайпылдырып ҡуйма,
Хистәремә тулы күңелгенәм,
Иләсләнгән бөрө хәлендәмен
Тиле ҡыштың ғәмһез мизгеленән.
Бөрө керпегенә йәш эленгән,
Мизгелдәр зә ҡанун сылбырында.
Йөрәгемдә тере ҡуззар ята...
Моң уянды тертләп бер ҡылында.

## ОСРАШЫРҒА ЯЗЬЫН ТАҒЫН БЕР

Алтынланған бойзай басыузары
Тониорап та батҡан ҡояшҡа.
Һалам сәсле, зәңгәр күзле егет,
Айлы төндә сығып юл басма.

Йөрәгемдең иләҫ-миләҫ сағы,
Һынап ҡара, һин һуң сабырмы?
Ҡыш битендә тутлап бешер миләш
Һинең менән миңә яҙырмы?

Ҡарамасы күҙҙәремә төбәп,
Юлым яҙлығыр бит тиңемә,
Һин алаһы, мин бараһы түгел,
Ымһынмаһын күңел тигенгә.

Ҡайнар ҡурмас өтә устарымды,
Яратам, тип әйтмәм барыбер.
...Иген генә бешкән мәлдәрҙә, тим,
Осрашырға яҙһын тағын бер.

## ҺИН ТҮГЕЛМЕ?

Сәстәремдә, тиһең, көмөш ҡырау,
Ҡараштарға һағыш ултырған.
Һин түгелме, мине иләҫләтеп,
Күңелем хистәрендә тулҡынған?

Маңлайыма һыр-семәрҙәр яткан,
Бит аллығы, тиһең, һүрелгән.
Һин түгелме, йөрәгемә инеп,
Тойғоларға сәсәп түгелгән?

Күркәмлектәр эҙләмә лә, тиһең,
Баҙыҡлана төшкән буй-һындан.
Мин түгелме, ай-көндәрҙе һанап,
Күрешеү ләззәтенә ымһынған?

Йүгәнһеҙ уй — хәҙер тандыр усаҡ —
Төндәремә, тиһең, һил ҡунған.
Һин түгелме йылдар моңон көйләп,
Мин түгелме сер ғазабын төйнәп,
Йәндәребеҙ йәнгә ынтылған?..

* * *

Йүкә сәскәләре ҡайһылай суҡ,
Баш әйләнә балдар тәменә.
Моронлаған йәш үләндәр еҫе
Дауа микән ярты йәнемә.

Өмөт менән көткән йәйҙәремдең
Етем еле тарта итәктән.
Былтыр был мәлдәрҙә икәү инек,
Яңғыҙ ауыҙ итәм еләктән.

Сәхрәләрҙә йәнем толҡа тапмай,
Сәскә биҙәктәре — йәм түгел.
Аймылышып ҡалған юлдарыңа
Әйләнә лә ҡайта был күңел.

Турғай моңдары ла йыуата алмай,
Мин, әйтерһең, ишһеҙ күбәләк.
Бәгер әрнеүенән айнытырлыҡ,
Күҙҙәремә инер күс кәрәк.

* * *

Эҫендермә үҙеңә, эҫендермә,
Сала-сарпы тойго ят миңә.
Һиҙә булаһыңдыр: йөрәгемдә
Дөрләп кенә китер ут кисә.

Тамылйып та бөткән күңелемдең
Моң-ҡылдары һиңә сорналған.
Ымһындырып үтер ел-ғүмерҙәр
Былай ҙа бит инде ғәм һалған.

Хыялыйҙар итә күрмә берүк,
Хистәремә һаҡһыҙ ҡағылып.
Уйлы кистәремдә китәһең дә,
Килерһеңме атыр таң булып?

Юҡҡа ахыры үҙеңә әсендерҙең,
Яралы ла йәнем талсыҡҡан.
Үҙ-үҙемә минең көсөм етмәҫ,
Аяп араласы был уттан.

* * *

Ҡуйындарым һалҡын, хистәр ялҡын,
Яңғыҙ мендәр һалып йоҡланым.
Ҡайнар йәшем сикәләрҙә кипте,
Тота алманым уйҙың уҡ-ялын.

Һандуғас та был төн аяманы,
Әй түгелде, һайрап бер булды.
Юлдарыбыҙ башҡа тап килмәҫ тип,
Юҡҡа һүрелдерҙем күңелде.

Үҙ-үҙемде еңдем, һүрелдерҙем,
Төңөлдөрҙөм тиеп уйланым.
Яҙмыш теҙгенендә баш бирмәйсә,
Был йөрәк һуң күпме туланы.

Йүгереп кенә сығып китер мәлдә
Аҡыл ғына тыйҙы: «Сеүһәнә».
Һандуғаслы төндәр танһыҡ та ул.
Былай ҙа бит күңелдәрем китек,
Ҡуйындарым һалҡын бөгәсә.

## БЕР БӘХЕТТЕҢ ИКЕ ЯРСЫҒЫ

Анттар итмә миңә. Һүҙ ҙә бирмә,
Күңел бит ул, ниҙәр кисермәм.
Күҙҙәремә һарылып албырғатыр
Берҙән-бер нур хәҙер һин тимәм.

Дыуамал саҡ күптән үтте инде,
Мин сабырмын, һин дә һүрелдең.
Ҡасан ғына йәшле болоттарҙан
Арынғаны күңел күгемдең.

Бер һөйкөмлө ҡарашымды ғына
Яҡын күреп, йәнә әҫенмә.
Төнөн йөҙөн асҡан миләүшәнең
Шауҡымдары ҡалһын иҫемдә.

Юҡҡа ғына сыҡтың юлдарыма,
Юҡҡа ғына йөрәк ярһыны,
Беҙ бит һинең менән — ыуалып төшкән
Бер бәхеттең ике ярсығы.

* * *

Танһыҡтарым ҡанмаҫ йәй йомдарен
Һығылдырып моңдар һарыған,
Ғазаптарҙан телгеләнгән йәнем
Көҙ һиллеген көтөп арыған.

Миләштәр ҙә, ана, башын эйгән
Уйға уйылдырыр нағыштан,
Болоҡһоған күңел баҫылмаҫмы,
Усаҡ ягайымсы һағыштан.

Яңғыҙ ғына ултырайым текләп,
Ҡасып китеп һинән, үҙемдән...
Ике йәшәһәм дә, мин — мин инде,
Үкенеү тойғоларын үҙһенмәм.

Серем һыйһын урман — асылайым,
Уй ҡоршауын бигерәк тарһынам.
...Бөтөнләккә сарсап типкән йөрәк
Һағыныгуҙарҙан ғына ярһыган.

## ЯҘҒЫ КИСТӘ

Яҙ һулышы тирткән тәбиғәттә
Йондоҙҙарһыҙ, айһыҙ ҡара төн,
Тын бүлмәлә, моңһоу тын бүлмәлә
Ултырабыҙ икәү — һин дә мин.

Ҡулдарыңда һайрай тальян гармун,
Моң түгелә йөрәк иңрәтеп,
Елбәҙәк ел — саңтыр үҫмер сағым,
Иҫкә төшә күңел тибрәтеп.

Шул ваҡытта бер ни кәрәк түгел,
Донъя гүзәл, донъя илаһи;
Йөрәктәргә төшөр аһәңендән
Айырылмаҫ инем, валлаһи!

Ҡарашыңдан йылы нурҙар һирпеп,
Гармун һыҙҙыраһың эргәмдә,
Сихри йырҙарыңа ғашиҡ иттең
Аҡ тамсылаб тамған бер мәлдә.

## ҺАҒЫНЫУҘАРЫМ КИЛТЕРГӘН

Үҙ-үҙемә ҡаршы килеп, бөгөн
Юлдарыңдан үттем йәнәшә,
Уҡталдым да... ләкин һүҙ ҡушманым,
Ҡарап ҡалдым бары йәш аша.

Йөрәк миңә баш бирмәне инде,
Болоҡһоуҙан ғына — күҙ йәшем.
Үкенеү ҙә, үпкәләү ҙә түгел,
Икебеҙ ҙә инек ут-йәшен.

Беҙ ерҙән дә йөрөмәнек, буғай,
Хистәр ине күккә ашырлыҡ.
Абайламай, ҡайһы мәлдә икән
Һағыш тулҡынына атылдыҡ...

Кем ғәйепле? Ҡайта-ҡайта уйлап,
Был йөрәк бит күпме өтөлгән?!
...Һинең юлдарыңа бөгөн миңе
Һағыныуҙарым тартып килтергән.

## ЙӘЙ ҘӘ ТӨНДӘР ОҘОН ИКӘН

Йәй ҙә төндәр шундай оҙон икән,
Керпек ҡаҡмағанға ни ғүмер.
Билдәһеҙлек өҙә бәгерҙәрҙе,
Айырылышыу итә көл-күмер.

Иренемә тып-тып йәшем тама,
Әй әсе лә икән күҙ йәше.
Ҡайнар ҡосағыңдан мәхрүм булып
Йәшәүҙәрҙең, тимен, ни йәме?!

Күк күҙҙәрең күҙ алдымдан китмәй,
Һулҡылдап та ҡуйыр бер ярам.
Ҡайнар ҡулым ҡайнар тәнең эҙләп,
Һағышланып нисә уянам.

Күҙҙәремдә йомһам, бармаҡтарым
Сәстәреңдә тарай бушлыҡта.
Иртәләр ҙә алып килмәҫ, беләм,
Өмөтләнәм, ахыры, һис юҡҡа.

Шифалары тейһен таң еленең,
Күҙ йәштәрен инде киптерҙе.
...Йәй ҙә төндәр шундай оҙон икән,
Йәнгенәм бит йәнә кителде.

## ҮТМӘ, ВАҠЫТ

Һулыштарың шундай ҡайнар ине,
Ирендәрҙе ялмап өтәрлек,
Керпегеңә ҡунған уйсанлыҡтың
Моңо йөрәктәргә төшерлек.

Йылы нурға сумған күҙҙәреңдең
Балҡышына түҙем бөтәрлек.
Йөҙөңдәге серле йылмайыуҙың
Бер сатҡыһы хыялый итерлек.

...Күңел тыңғауҙарын өҙә һуҡты,
Һүҙһеҙ генә үҙеңә ҡараттың;
Ғорурлығым йәшем булып тамды,
Йәндән артыҡ күреп яраттым.

Был тиклем дә эҫенеүҙәремә
Ғәйепләме икән яҙ ғына.
...Һуштарымды алып минуттарҙан
Үтмә, ваҡыт. Туҡтал аҙ ғына.

## ОСРАШЫУҘАР ТАНЬЫГКЛАР ҘА КҮҢЕЛ

Аҡ күбеккә төрөнгәйне муйыл,
Аҡ сәскәлә ине алмағас.
Йөрәгем бит туктай яҙып ҡуйҙы,
Тәндәреңдең уты ялмағас.

Түңкәрелде донъя. Йәнем сырхау.
Дауалары һинең ҡулыңда.
Күңел ҡупты, хистәр шашып осто,
Болондарҙа елгән ҡолондай.

Бәгерҙәрҙе өҙҙө, йәнде өттө,
Хыялыйҙар итер төндәрем.
Зарыктырып атып таңы булып,
Заңы биҙәрме икән көн йәмен.

Осрашыуҙар танһыклар ҙа күңел,
Асылып-асылмаҫ серҙәр был ғүмер.
Ҡайнарлыктан көйрәп ирендәрем,
Үрелепме тағы һүрелер?

Әллә айнык, әллә иҫерекмен,
Хәлгенәмде үҙең самала.
Йөрәгемдә күпме калһаң да ҡал,
Ғазаптарҙан ғына арала.

## ҠЫЙЫР-ҠЫЙМАҪ...

Күҙ төҫтәре төшкән ағастарға,
Һауаларҙы һағыш-моң баҫа,
Уйсан миләшкәйҙең ут-сәскәһе
Ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына төҫ аса.

...Ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына йылмайыуың
Күңел ҡылдарыма ҡағылды,
Сәңгел ҡыңғырауҙай тойғоларым
Йөрәгемдән сыңлап ағылды.

Ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына наҙлауҙарың —
Йәшлегемдән ҡалған монарҙай.
Талпынып та осто йөрәккенәм,
Ҡаяларға барып ҡунырҙай.

Ҡыйыр-ҡыймаҫ атҡан хистәремдең
Сәскәләре хәҙер түгелә,
Ҡырау тейеп, миләш баҙрағанда,
Һабаҡҡайы ергә бөгөлә.

## ЯҢҒЫҘ МОҢ

Ғүмерем урманында яңғыҙ бер моң
Ҡуныр төйәк тапмай тилмерә,
Моңдашына саҡырыу ауаздары
Шаңдау булып ҡайта: «Кил генә».

Йыл-япраҡтарҙы өҙә-йолҡа,
Өҙәрем елдәр иҫмәй тигенгә,
Сер-ауаздар барып һарыла алмай
Наҙҙар танһыҡлаған күңелгә.

Һөйөп кенә һөйөлгөм дә килә,
Ҡайнар ҡосағыңда бер иреп.
Юлдарыңда көтәм, күҙ килһәң дә
Һары япраҡ, һары моң тиреп.

Йәшел яҙым, йәшле яҙҙарымдың
Аһәңдәре ҡайта нур тулып.
Ә бөгөнгөм — төйөрөм ҡара болот
Йөрәгемә төшә уй булып.

Уй уйламай, күңел болоҡһомай,
Был йәшәйеш — гүйә гел йомаҡ...
...Ғүмерем урманында бер моң үкһей,
Күҙ киталмай ҡалған ҡош һымаҡ.

* * *

Тәбиғәткә күҙ һулышы ҡунған,
Зәңгәр күктә моңдар тарала.
Осор ҡанаттарын нығытҡан бит
Торналар ҙа ҡайһы арала.

Ҡайтыуҙарҙың китеүҙәре бар шул,
Йәшәйештә ҡанун аяуһыҙ.
Һарыларға һабышып, ҡайындар ҙа
Әйтә кеүек: «Беҙ ҙә сараһыҙ».

Елдәр генә иҫә көйһөҙ-моңһоҙ,
Шулдыр инде барлыҡ ғәмәле.
Йәй йәменә күҙҙәр һарылыуын
Туҡтатырға юҡтыр әмәле.

## ЙӘШӘТКӘН ДӘ ҺИН БУЛДЫҢ

Ваҡыт-ваҡыт хистәр сайралһа ла,
Мөхәббәттән барыбер гел уңдым.
Был яҙҙарҙа мине йәшәткән дә,
Йәшәрткән дә, ахыры, һин булдың.

Өмөттәрем өҙөлә яҙғайны бит
Йәйҙәремә аяҡ баҫыуҙан.
Һин, үҙең дә һиҙмәй, тартып алдың
Ғазаптарҙың уғы сағыуҙан.

Күшегеп кенә бөткән күңелемә
Йәндәр өрҙөң, йәмдәр өҫтәнең.
Минуттары мәңгелеккә торор
Миҙгелдәрҙе минме көтмәнем?!

Наҙлап ҡына ләйсән нуры яуа
Күңел ымһындырғыс миҙгелдең.
...Был яҙҙарҙа мине йәшәткән дә,
Йәшәрткән дә, ахыры, һин булдың.

* * *

Бер күрҙем дә һине, онотолдом,
Күңелеңдәге нурға сорналып.
Яҙмыш беҙгә төрлө кәсәләргә
Биргән, ахыры, бер үк моң һалып.

Ҡараштарҙа — беҙҙең шул уҡ һағыш,
Тойғоларға йоҙаҡ эленгән;
Тар ситлектә өҙгөләнгән хистең
Шәфәҡ нуры йөҙгә һибелгән.

Сабыр итә-итә, ғүмер үтә,
Етелде бит йәнә яҙҙарға,
Уйылдырыр уйҙың утын йотоп,
Күңел ҡорғаҡһыған наҙҙарға.

Күргән һайын һине, онотолам,
Йөрәк тибешеңде ишетһәм.
...Яҙмыш беҙгә төрлө кәсәләрҙән
Бер һағышты эсереп иҫерткән.

## МӨХӘББӘТКӘ ТАБЫНЫП ЙӘШӘЙЕМ

Күҙ йәштәрем мөлдөрәр ҙә саҡта
Яҙғы йәшендәрҙәй йәшнәйем.
Изгелекле, игелекле итә —
Мөхәббәткә табынып йәшәйем.

Алдарыңа йүгереп үҙем сығам,
Осар ҡоштар булып талпынам,
Йөрәгемдә минең хистәр дөрләй
Ҡарашыңдан төшкән ялҡындан.

Ғүмер бүләк иткән иң ҙур бәхет —
Һине һөйөү, һине яратыу,
Ер-йыһанда осрашыуҙар көтөп,
Һағыныуҙарҙан янып йән атыу.

* * *

Һинең күңел, беләм, һиҙгер инде —
Ҡарашымдан барыһын күрәһең,
Сабырлығың менән әүрәтеп гел,
Иҙрәткес бер нурға төрәһең.

Тынысланған һымаҡ булғайным бит,
Һағыштарҙы йомоп күкрәккә;
Һағындым, тип ниңә әйттең инде,
Шул һүҙ генә етте йөрәккә.

Донъяныҡы донъялыҡта ҡалһын,
Ғазаптарым өсөн кисерәм;
Бергә саҡтың ләззәттәрен эсеп,
Бәхетемдән бөгөн иҫерәм.

Күҙҙәремдән, тере нурҙар булып,
Ағылырға тора хистәрем.
...Яҙ елдәре тамсы моңо менән
Барыбер асты күңел биктәрен.

## КИЛЕРҺЕҢ — ҺУҢ БУЛЫР

Йөрәгем ярһыуы
ят ярға ҡағыла,
Йырҙарым моңона
ят моңдар һарыла.
Тик һинең наҙҙарға
сарсаған күңелем,
Наҙ эҙләп, болоҡһоп,
яттарға ағыла.
Йөрәгем сараһыҙ,
һағыныу ауазын
Һиҙмәйме саҡ ҡына
күңелең?
Өмөтөм өҙөлөп,
һағышҡа күмелеп,
Заяға үтә бит
һәр көнөм.

Килерһең, һуң булыр,
һуҡмағың күмелер
Һарғайған япраҡтар
моңона.
Эҙләрһең өҙөлөп,
көтөрһөң тилмереп,
Ғүмереңдең һағышлы
юлында.

## ҮТКӘНДӘРҘЕ ОНОТОЛА, ТИҘӘР...

Һинең менән йөрөгән һуҡмаҡтарға
Көҙмө аҙаштырып индерҙе? —
Һары япраҡтарҙың һары моңо
Һиҫкәндерҙе уйлы күңелде.

Ингәс — индем. Кире боролманым,
Ниҙәр бүләк итер сәфәрем?
Үткәндәрҙе онотола, тиҙәр...
Шул уҡ тойғоларға сәсәнем.

Әйтерһең дә, йылдар уҙмаған да —
Эҙҙәреңдең тоям йылыһын,
Керпектәрем ҡапыл дымландылар —
Күңелемдәге юшҡын йыуылһын.

Күҙҙәреңдең төҫө — күккә баҡам,
Ҡоштар сыңы — зәңгәр күктәрҙә.
Һинең менән йөрөгән һуҡмаҡтарҙан
Яңғыҙ ҡайтып киләм үткәнгә.

## ҮҘЕМ БАРАМ...

Һин башҡаса миңә килмә инде,
Үткәндәр бит үҙәк өҙөрлөк,
Йөрәк тулауҙары баҫылғандай,
Хәл ярайһы әле, түҙерлек.

Күңел тамам ризалашҡан һымаҡ
Һинһеҙ йәшәүҙәргә, һағышҡа;
Тормошом да һәүетемсә генә,
Күнегелгән ошо ағышҡа.

Ҡараштарым ғына ҡайсаҡ уйсан,
Һағынғанда үҙәк өҙөлөп.
Һин башҡаса миңә килмә инде? —
Үҙем барам... түгел түҙерлек.

## БАҪАЛҠЫЛЫҠ

Нисә тапҡыр әйтер һүҙҙәремде
Әйтәм, тиеп, ҡуйҙым уҡталып,
Баҫалҡылыҡ тигән бер көс тыйҙы,
Һәр саҡ ҡалдым шуға туҡталып.

Нисә тапҡыр һинең күҙҙәреңә
Тырыштһам да тура ҡарарға,
Баҫалҡылыҡ тигән бер көс тыйҙы,
Әрнеү һалма, тиеп, яраңа.

Нисә тапҡыр һинең өсөн генә
Йырҙар яҙһам да мин бағышлап,
Баҫалҡылыҡ тигән бер көс тыйҙы,
Йырлама, тип, күңелең һағышлап.

...Нисә тапкыр йөрәк серҙәремде
Әйтәм, тиеп, ҡуйҙым уҡталып,
Баҫалҡылыҡ тигән бер көс тыйҙы,
Һәр саҡ ҡалдым шуға туҡталып...

* * *

Киптерергә атай бесән йәйгән,
Ишек алды сәскә еҫендә,
Әйтерһең дә, сәхрәләргә сыҡтым —
Аҙап ҡалдым хистәр эсендә.

Ҡулдарымда үлән усмалары,
Хуш еҫтәре һулап туйғыһыҙ.
Йәй йәмендә туғайҙарҙы гиҙмәй,
Нисек түҙгәнмендер мин — моңһоҙ.

Мәтрүшкәләр күҙҙәремә баға,
Зиһенемде ҡапыл сыуалтып.
Күпереп ятҡан баҡуй өҫтәренән,
Бала саҡҡа ҡайттым йән атып.

Биттәремде ҡурып алды һымаҡ
Селләләрҙең томра тулҡыны.
Сыңлап ҡуйҙы алыҫ үткәндәрҙең
Өҙөлмәйсә ҡалған бер ҡылы.

Һанаулы ла миҙгел үтеп бара,
Ишек алды көҙҙәр моңонда.
Ҡайырып һалып атай бесән өйә,
Ниҙәр икән уның уйында.

* * *

Күпме генә ярһып болармаһын,
Аҡ бурандар, ана, тынып ҡалған,
Аҡ ялдарын һибеп, иҙерәп китеп,
Аҡ ҡарҙар ҙа йоҡоларға талған.

Тып-тын ғына урман эстәрендә
Ағастарҙан аҡ мамыҡтар яуа;
Күктең генә ҡараштары моңһоу,
Ҡаймаҡ ҡына инде һулар һауа.

Ҡылған эштәренә нәүмизләнеп,
Тәбиғәттең аҙап ҡалған мәле.
Күңелдәрҙе генә һиҫкәндерә
Ваҡыт-ваҡыт елдең үкһеүҙәре.

## ОЖМАХ МЕНӘН ТАМУҠ

Ҡосағыңда башҡа йоҡламайым,
Ҡосағыңда һинең ут өтә.
Бергә булған төндәр татлы ла ул,
Һинһеҙ үткәндәре үкһетә.

Сәстәреңдең еҫе, тәнең тәме
Һуштарымды ала бер талай.
Яңғыҙ ғына тертләп уянғанда
Теленә бит йәнем урталай.

Йөрәккенәм дарҫлап, тулап китә,
Танһыҡтарым ҡанмаҫ төндәрҙә.
Йәннәттәр ул һинең ҡуйын икән,
Баштарыбыҙ йәнәш мендәрҙә.

Ҡосағыңда башҡа йоҡламайым,
Ожмах менән тамуҡ ҡосағың.
...Юлдарымдан яҙлыҡтым бит инде,
Ят яҡында дөрләй усағым.

## ХОҘАЙ, АХЫРЫ, ТӨБӘП ЯРАТҠАНДЫР

Таңғы йоҡоларҙа һиҫкәндергән
Яҙҙарымдың йәме һин икәнһең. —
Күргән һайын, танһыҡтарым ҡанмаҫ,
Һөйөп кенә туймаҫ йән икәнһең.

Сабырлығым бары алдатҡыс бит,
Тойғоларҙы тыйып ҡына торам.
Һағыныуҙарым хыялыйҙар итә, —
Барып килер ара — ике урам.

Хистәреңдең ҡайнарлығы етмәй,
Һүнер-һүнмәҫ кенә усағым да.
Ҡарашыңдың сөңгөлөнә сумып,
Иреп юғалайым ҡосағыңда.

Бер күрешеүҙән икенсеһен көтөп,
Түҙемлеккә — түҙем һинең йән дә.
Һулый инде, һулый ирендәрем
Бер үбеүгә зарыҡтырған мәлдә.

Иртәгәләр яҙмыш ҡулдарында,
Бөгөнгөмдөң ғазаптары татлы.
Хоҙай, ахыры, төбәп яратҡандыр
Минең өсөн һине — илаһи затты.

## ЯҘМЫШ ШАЯРТЫУЫ

Ҡабат осрашырға өмөт тә юҡ —
Яҙмышыбыҙ уҫал шаяртты,
Яҙҙарында, беҙҙе болоҡһотоп,
Моң-һағышлы ҡошон һайратты.

Әллә ниҙәр булды икебеҙгә,
Тик бер мәлгә уйҙар сорналды,
Шашҡын хистәр теҙген тотмай сапты,
Йөрәктәргә ялҡын уралды.

Беҙ минутлап бәхет һанаманыҡ,
Беҙҙең өсөн ваҡыт үҙе юҡ...
Наҙҙарыңа сәсәр мәлдәремдә
Тойғоларым булды йәйғор-уҡ.

Юлдарыңа юлым тап булды бит,
Йөрәгемде алған ут ялмап.
...Муйылдарҙың аҡ сәскәһе оса —
Ҡарҙар яуамы ни буранлап.

## ҺИН ҠАЛДЫРҘЫҢ

Ҡалдырһаң да тилбер йәшлегеңдең
Аҡһыл томандары эсендә,
Мин килермен, йылдар төпкөлөнән
Аҡ нур булып, яңғыҙ кисеңдә.

Аҙашһаҡ та йылдар миҙгеленең
Ваҡыт-вайымһыҙлыҡ ҡатында,
Гел балҡырмын өмөт-маяҡ булып,
Икеләнгәндә юлдар сатында.

Айырылһаҡ та йәшел яҙҙарымдың
Уйсан болот баҫкан таңында,
Йөрәгеңә ҡайнар ут өҫтәрмен,
Аҡ бурандар ярған сағында.

Хушлашһаҡ та моңһоу күҙҙәремдең
Хыял урмандары төбөндә,
Күңел тәҙрәләрең бер ҡағырмын
Миләш-тәлгәш булып төшөңдә...

...Һин ҡалдырҙың мине йәшлегеңдең
Аҡһыл томандары эсендә...

## ҠАҘ ҠАНАТЫ ҠАУЫРЫЙ-ҠАУЫРЫЙ

Әсәй менән икәү ҡаҙ йолҡабыҙ,
Күҙ эйәрмәй етеҙ ҡулына.
Ни эшләйһең, һирәгерәк тейә
Ҡаҙ йолҡоуҙар ҡала ҡыҙына.

Теҙеп кенә үҙ хәбәрен һөйләй,
Таңһыҡлаған күңелем һүҙен дә.
— Ҡатыраҡтыр, балам, яфаланма,
Ҡанат йөнөн ҡалдыр үҙемә.

Бәпкәләрем быйыл самалыраҡ,
Улар үҫкәнгә лә һөйөнәм.
Ҡаҙ итенән мәхрүм булмағыҙ,
Шөкөр, буш китмәйһең өйөмдән.

Яңы мендәрҙәрҙе инселәнем
Һылыуыңдың оло ҡыҙына.
Өләсәйҙән тейеш бирнәлеген
Бирәп ҡуйырмын, тим, күҙенә.

Өмә булғас, өмә булһын инде,
Ҡабарғандыр, ҡоймаҡ ҡойорбоҙ.
Һуғым бар ул, хоҙай насип итһә,
Тағы ике тана һуйырбыҙ.

Атайыңдың ниәттәре изге,
Алтығыҙға тигеҙ бүлергә.
Һау-сәләмәт сакта икәүебеҙ,
Мал аҫырау бер ни түгел дә.

Бесәне лә былай мул шикелле,
Ҡыш бауыры үҙен һиҙҙерһә.
Йылдың-йылы ҡош-ҡорттарым уңа,
Мал ҡото бар беҙҙең нигеҙҙә...

Ҡауырый ҡанат — ҡаҙҙар ҡаңғылдаша,
Ҡош ғүмере — өҙөлөр ҡыл ғына.
Әсәй менән икәү ҡаҙ йолҡабыҙ,
Күҙ эйәрмәй етеҙ ҡулына.

## НИСЕК КЕНӘ ТҮҘӘ ШЫРШЫЛАР

Шыршыларға һарылып ҡарҙар яуа,
Нисек кенә түҙә йәш шыршы.
Ни гәжәптер, ҡарҙар һалҡынырак,
Һуңғыһымы әллә был ҡышы.

Ерҙән ҡалҡтым, инде күккә баҡтым,
Тиеп кенә һөйөнөр сағы ла.
Олпат ҡарағайҙар шыбырлаша:
«Ҡайһығыҙға сират тағы ла?»

Зифалығы күҙҙе ҡамаштыра,
Түрҙе биҙәр бәлки табында.
Тантаналар сәғәтлек кенә бит,
Бәҡыйлыҡтыр ҡалыу тамырҙа.

Һиҙмәй әле шыршы киҫеләһен,
Кисерәһен тамыр яраһын...
Шыршыларға һарылып ҡарҙар яуа,
Шыршы хәлен кемдәр аңлаһын.

## САСҠАУ ҠЫШТА ЙӨРӘККЕНӘМ ЯРҺЫЙ

Йөрәгеңдә хәҙер кемдәр икән?..
Ә мин һине үлеп һағындым.
Сасҡау ҡышта яҙғы күкрәү көтөп,
Исемеңә йәнә табындым.

Юлдарыңа сығам, моңдар һуҙам,
Ишетерһең тигән өмөттән.
Әрнеүле лә йәнде болоҡһотоп,
Һағыш бөтмәй икән нилектән.

Түңкәреп үк эселде бит инде
Һөйөү асыларын — ғазабын.
Ҡанмаһа ла күңел ҡанмай икән —
Һыуһын ҡандырырға аҙабым.

Татылмаған наҙҙар ҡалған һымаҡ,
Билдәһеҙлеккә бит талпынам.
Сасҡау ҡышта йөрәккенәм ярһый
Үҙем тоҡандырған ялҡындан...

# ИҘЕЛ ХӘЛИМОВ

# АС ТӘҘРӘҢДЕ...





*Мин Ейәнсура районының бормаланып-бормаланып аҡҡан Ҡаҫмарт буйында һыулаған Байыш ауылында 1959 йылдың 7 июнендә донъяға килгәнмен. 1978 йылда Өфө сәнғәт училищеһының ҡурай класын тамамлағандан һуң, музыка мәктәптәрендә йәш ҡурайсылар уҡытыу менән мәшғүлмен; биш йыл музыка мәктәбе директоры булып та эшләнем. 1988 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын ситтән тороп тамамланым. Шиғырҙарым ваҡытлы матбуғатта, «Йәш көстәр» альманахында баҫылып сыҡты, публицистика ла миңә ят түгел.*

*Бөгөн мин — Салауат ҡалаһында үҙәк культура һәм ял паркының художество етәксеһе булып эшләйем, бер үк ваҡытта музыка училищеһында ҡурай дәресе лә алып барам. «Ас тәҙрәңде» — тәүге китабым, йәғни, әҙәбиәткә тәүге етди аҙымым. Шиғырҙарымда уҡыусыларға үҙ күңелемде асам. Ҡабул итһәгеҙ, һөйөнөсөмдөң сиге булмаҫ кеүек...*

*Иҙел*

## ТАҢ

Төн пәрҙәһен уйып, ал таң ата,
Күл өҫтәре ҡуйҙы ҡалтырап,
Япраҡтарҙың бөртөк йәштәрендә
Ҡояш нуры китте ялтырап;

Болондарҙа ялан сәскәләре
Керпектәрен ҡуйҙы ҡуҙғатып.
Бик һаҡ ҡына ҡағып ағастарҙы,
Елдәр елә урман уятып;

Әйтерһең дә, ҡоштар һайрауына
Күк көмбәҙе ҡушылып сыңланы;
Ошо сихри моңға ҡушылырға
Йоҡлағандар ғына һуңланы.

## ДЕМОКРАТИЯ

Мин политик түгел,
Тик шулай ҙа
Политика — ерҙә йәшәүем,
Политика — илдә йәшәүем,
Йәшләнеүем йәки йәшнәүем.

Етер инде йәшәү — уйын, тиеп,
Йәнһеҙ фигуралай ҡалырға,
Бюрократтың ҡырыҫ фармандарын,
Робот һымаҡ, үтәп барырға.

Политикты шахматсыға тиңләү
Донъя өсөн күптән кәрәкмәй —
Күпме аҫыл ирҙәр башын һалды
Алыҫ Себер ерен ерекмәй...

Оҡшаһа ил шахмат таҡтаһына,
Кешеләре — пешка, аттарға,
Һуңғы сиктә король ҡамала ла,
Уйынсыһы килеп мат ала.

Теләгем бер, терәгем бер минең:
Уйынсы булмаһын политик!
Аяҙ көндә ҡояштай балҡыһын,
Ямғырҙарҙа кейһен пар итек.

Мин политик түгел, ә шулай ҙа,
Политика — илдә йәшәүем,
Политика — иҫән йәшәүем,
Йәшләнеүем йәки йәшнәүем.

## САФ КӨС

Алышырға һыҙғанганда инде еңде,
Берәү мине күҙ йәштәре менән еңде;
Таптымы әллә ул үҙенә, тимен, тиңде? —
Ихлас тамған күҙ йәшенә күңел күнде.

Наҙлы хистәр ҡушылдылар — мәкер үлде,
Күңелдәге йүнһеҙ ниәт бөлдө-һүнде;
Саф тойғолар яҡтыртҡанда тирә-йүнде,
Пак хистәрҙән өҫтөн булып булмай инде.

## МОНОЛОГ

Ғазаптарым минең — талаптарым,
Шатлыҡтарым — кереһеҙ табыштар;
Шулай тиһәм, төрлө мөйөштәрҙән
Ишетелә ҡәтғи тауыштар:
«Мостай ағай һинән элегерәк
Йыр йырланы ғазап турында;
Ғәм һәм Йәмдең уртаҡлығын данлап,
Ҡысҡырма һин, меҫкен, урындан...»
Ап-аҡ ҡайындарым, аҡ ҡарҙарым,
Зәңгәр һауам, тиеп йырлаһам:
«Есениндың йырын боҙма, — тиҙәр, —
Гонаһ булыр, моңдо урлаһаң.
Кулиевтың Чегем ҡарҙарына
Назар Нәжми генә һоҡланһын,
Ә һин бүтән төҫтө уйлап тап та
Ғүмереңдән сағыу эҙ ҡалһын».
Юҡ, иптәштәр, мин сихырсы түгел,
Күҙ бәйләүсе була алмайым.
(Һәм шулай уҡ һеҙҙең тәнҡиттәрҙең
Кәрәк икәнен дә аңлайым...)
Есенин һәм Назар ғәйепләме
Һауа — зәңгәр, ҡайын — аҡлыҡҡа?
Ни әйтерһең, Мостай ағай, үҙең,
Бер үк моңға, бер үк Хаҡлыҡҡа?
Әгәр кеше ғашиҡ булған икән,
Дөрөҫлөктө буяп буламы?!
...Мин — буяусы түгел, ә тормоштоң
Ерго ғашиҡ ябай улы.

## АҠБУҘАТ

*Әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренә бағышлайым*

Һин ҡайҙарҙа, минең Аҡбуҙатым? —
Һинһеҙ был донъямдың ҡото юҡ,
Баҡсамдағы бешкән алмаларҙың,
Ҡыҙыл алмаларҙың һуты юҡ,
Усағым да бысҡыу — уты юҡ.

Һин ҡайҙарҙа, минең Аҡбуҙатым?
Елдәй елеп килсе яныма,
Һинең туралағы моңло йыр бит
Бала саҡтан һеңгән ҡаныма.

Хыялымда һине менеп саптым,
Һомай ҡошто тоттом мин үҙем...
Шуға инде, һине эҙләгәндә,
Ҡаршы елгә генә мин түҙҙем.

Мин саҡырам һине, Аҡбуҙатым,
Ҡылысыңды бирсе ҡулыма?
Елеп килеп бирһәң ҡылысыңды,
Һалмам уны, һалмам ҡынына.

Был донъямдың һинһеҙ кәрәге юҡ,
Яңғыҙ саҡта мин дә Ергә — ят.
Ҡаршы ел һин, булып сафлыҡ йырым,
Ҡанатым бул, минең Аҡбуҙат!

## КҮҢЕЛ ШӘМДӘРЕМ

Эй, Тәбиғәт, сәнғәт донъяһына
Алып килде һинең гүзәллек.
Хыял-Аҡбуҙатым шуға ярһыу,
Ауыҙлығын сәйнәп өҙөрлөк.

Эй, Тәбиғәт, минең күңелемдә
Һин ҡабыҙған яҡты шәмдәрем
Һүнә ҡалһа, улар алып китер
Үҙе менән донъям йәмдәрен.

Ҙур ҡояштың бөртөк нуры булып,
Күңелемдә янһын шәмдәрем;
Ярһыу Аҡбуҙатым осһон алға,
Белмәгеҙ һеҙ тынғы, гәмдәрем!

* * *

Ас әле һин миңә, ас тәҙрәңде, —
Бөгөн айҙың теүәл ун бише;
Һинең йөрәк кенә миңә кәрәк,
Йөрәгемдең бары ул — ише.

Ас әле һин миңә, ас тәҙрәңде,
Ҡаршылайыҡ таңды бергәләп;
Хис гөлдәрем гөрләп сәскә атһын,
Күңел түтәлдәрен семәрләп.

Ас әле һин миңә, ас тәҙрәңде,
Әйтелмәгән серҙе әйтәйем:
Оҙон ҡара толом сәстәреңде
Айҙың яҡтыһында һүтәйем.

## ҺИНЕҢ ЙЫРЫҢ

Үткәндәрем, моңло бер йыр булып,
Уйҙарымдан минең ағыла,
Ағыла ла, иркә турғай булып,
Күңел ярҙарына ҡағыла.

Үҙәктәрҙә беҙҙең бергә саҡтар,
Ул хәҙергем — түгел үткәндә;
Шыңмаҫ һөйөүем дә сәскә атҡан,
Ул саҡ һине тәү ҡат үпкәндә.

## ҠЫҢҒЫРАУҘАР ҠАЛДЫ

Ҡыңғыраулы аттар елеп үтте,
Һағыш ҡына ҡалды таралмай;
Күңелемдә нисек йыуатайым? —
Һағыш томандары таралмай.

Матурлыҡмы китте шул аттарҙа,
Моңмо китте мине ҡалдырып?..
Томандарҙың әллә ялҡыны бар —
Уйҙарымды үтә яндырып.

Янһын, әйҙә! — Тимәк, яратыуым,
Һағыш булып ҡайнай күкрәктә,
Елеп үткән аттар ҡыңғырауы
Бер моң булып сыңлай йөрәктә.

Аттар китте, ҡыңғырауҙар ҡалды,
Зәңгәр томан ҡалды таралмай;
Күңелемдә нисек йыуатайым —
Һағыш томандары таралмай.

## ҺӨЙӨҮЕМ — ДАЛА ГӨЛӨ

Тау битендә аҡ ҡайындар йырлай,
Иркәләнеп иҫкән елдәргә;
Ә мин, йүләр, һаман һөйөп баҡтым
Түтәлдәрҙә үҫкән гөлдәргә.

Табалманым һаман, елдәй елеп,
Йәшен булып йәшнәр һөйөүҙе.
Түтәлдәге ят гөлдәргә ҡарап,
Белгәнмен мин бары көйөүҙе.

...Тау битендә үҫкән ҡайындарҙы
Һаман наҙлай һөйөү елдәре...
Мин китәмен иркен далаларға,
Хуш булығыҙ, түтәл гөлдәре!

## НИҢӘ ИҪТЕ ЕЛДӘР КИРЕ ЯҠТАН?..

Ниңә иҫте елдәр кире яҡтан,
Яҙҙарҙан һуң ҡапыл ҡыш килде?
Йөрәгемдә һалҡын елдәр шаша,
Нишләһәм дә хәҙер һуң инде.

Йондоҙҙарға ҡарап өндәшәмен,
Ул елдәргә ҡарап көнләшәмен.
Аҡ болоттар менән һөйләшәмен...
Нишләһәм дә хәҙер һуң инде.

Ниңә иҫте елдәр кире яҡтан,
Ғүмер ағышыма тап булып?
Тамсыларҙа тажын йыуған гөлдәр
Күренәләр хәҙер ят булып.

Бәлки, елдәр ҡабат өндәшер ҙә,
Йондоҙҙар ҙа әле көнләшер,
Минең менән гөлдәр һөйләшер,
Яҙмыш беҙгә шатлыҡ өләшер.

## ШУЛ МИКӘН НИ ЙЫЛДАР ҮҘГӘРЕҮЕ

Шул микән ни күҙҙәр яҡынлауы:
Гөлдәр шиңде, үлән һарғайҙы,
Өсмөйөшлө ҡаҙҙар теҙемдәре
Осоп үткәс, күңел һағайҙы,
Киң донъялар ҡапыл тарайҙы.

Шул микән ни йылдар үҙгәреүе, —
Бөтөнләйгә был күҙ башҡаса;
Шул микән ни күңел үҙгәреүе,
Бойоҡ ҡалды һыуҙар ташҡанса,
Бойоҡ ҡалды һине тапҡанса.

* * *

Уйламаным һүнгән хистәремдең
Шатлыҡ бөркөп, дәрләп яныуын,
Күңелемдә, күп йыллыҡ гөл кеүек,
Ныҡтырыуын тағы тамырын.

Кем уйлаған, яҙҙар еткән мәлдә
Ул саҡтағы наҙҙар ҡайтыр тип,
«Ҡар аҫтында» ҡалған тойғоларым
Шаулап-күкрәп сәскә атыр тип.

Ул саҡтағы моңло йырың аша
Күҙ алдыма һине килтерҙем;
Күҙ алдыма шулай килеп торһаң,
Мин юлдарҙы еңел үтермен.

## ЯҘҒЫ УРМАН

Урман бөгөн хуш еҫтәрҙән аңҡый,
Ап-аҡ ҡарҙар күптән ирегән,
Үткәндәге эҙҙәр, беҙҙең эҙҙәр,
Йәп-йәш үләндәргә күмелгән.

Ул саҡта беҙ ике йүләр инек,
Ҡарҙар ярып йөрөнөк урманда,
Иҫеңдәме икәү булған саҡтар,
Шул урманда эҙҙәр тыуғанда?

Бөгөн икәү тағы сыҡтыҡ әле,
Сыҡтыҡ яҙғы урман ҡарарға.
Ҡоштар ҙа бит, ана, талпыныша
Беҙҙең менән бергә һайрарға.

## ҺАУБУЛЛАШЫП ҠАЛА АҠ ҠАЙЫНДАР

Япраҡтарҙан ергә тамсы-тамсы
Булып тама кеүек яҙ һуты;
Әле һаман хәтеремдә минең
Һаубуллашҡан ҡараштарың һинең —
Үткәндәрҙең ҡайтмаҫ наҙ-ҡото.

Йәшәү биреп беҙгә, үтер йылдар,
Үтер көҙҙәр сәсте ағартты.
Ҡайҙа шулай ашығалар йылдар?
Һаубуллашып ҡала аҡ ҡайындар,
Япраҡтарын елгә таратып.

## ҺӨЙӨҮҘӘРЕМ-ҺАҒЫШТАРЫМ

Һөйөүҙәрем йөрәгемдә минең
Һәр саҡ ҡына наҙлап торманы,
Ҡайсаҡ, ҡайындағы таптар һымаҡ,
Күңелемдә һағыш сорнаны.

Ғазаптарһыҙ һөйөү булмай икән,
Һөйөү саф, пак төҫтә, тиһәк тә,
Аҡ ҡайындың ҡара таптарындай,
Һағыш та бар бер аҙ йөрәктә.

Аҡты — ап-аҡ, ҡараларҙы — ҡара
Тиеүҙәр ҙә, бәлки, кәрәктер...
Ә бит, һине яныш һөйгән өсөн,
Һағыш баҫа бөгөн йөрәкте.

## КӨТӨҮ

Быйыл ҡоштар һуңлап сыҡты юлға,
Ахыры, ҡарҙар һуңлап яуырҙар,
Ап-аҡ булып ятҡан ҡар өҫтөндә
Миләш осҡондары янырҙар.

Һөйөү менән булған тойғоларым
Күңел сабырлығын һындырыр;
Миләш бөртөгөләй өҙөлөр ҙә
Йөрәк сарсауҙарын ҡандырыр.

## ҺЫУҒА БАРА ҺЫЛЫУ ҠЫҘҘАР

Һылыу ҡыҙҙар нисек һыуға бара,
Күнәктәре әллә көмөштән!
Ир-егеттең бөккән көйәнтәһе
Буйҙарына бигерәк килешкән.

Зың-зың итеп китә күнәктәре,
Саф һауала бер моң ҡалдырып;
Ошо моңдоң әллә ялҡыны бар —
Йөрәгемде үтте яндырып.

Эй, тормоштоң йәме, йәп-йәш ҡыҙҙар
Йөрәктәрҙе утҡа һалалар.
...Һыуға барған һылыуҙарға ҡарап,
Бабайҙар ҙа балҡып ҡалалар.

## ТЫУҒАН ЯҠТЫ ҺАҒЫНҒАНДА

Бында иркен ҡырҙар, киң туғайҙар,
Йылғалары һалҡын ағышлы.
Танһыҡ өсөн генә булған тауҙар...
Тик баҫалмай минең һағышты.

Һағындыра бында бейек тауҙар,
Һағындыра йәндәш аҡ ҡайын;
Шишмәләрең менән төштәремә
Керәһең һин, тыуған яҡҡайым!

## АМАНАТ

*(Ф. Богдановтың «Аманатҡа хыянат» пьесаһына йыр)*

Тыуған ерҙең гүзәллеген күреп,
Беҙ бит шунда үҫкән балалар;
Беҙҙең яҙмыштар ҙа, хыялдар ҙа
Геләп генә шунда ҡалалар.

Тыуған ерҙә минең һулар һауам,
Тыуған ерҙә минең тамырҙар;
Айырылһам ғәзиз тупрағымдан,
Ситтә мине кем тип таныrҙар?

Тыуған ер — ул халҡым аманаты,
Аманатһыҙ йәшәү, йәшнәү юҡ.
Һөйгән йәрһеҙ, бәлки, йәшәрмен дә,
Тыуған ерһеҙ миңә йәшәү юҡ.

## ТӨНГӨ МОҢ

Төнгө вокзал.
Унда сиған улы
Моңло итеп йырлап ебәрҙе...
Йоҡомһорап торған уй-хистәрем
Ошо моң артынан эйәрҙе.
Ете ят ерҙәрҙә, ят әҙәмдәр
Ятһыныр тип тормай, тартынмай,
Бала йырлай, йырлай үҙ телендә,
Күңелкәйҙәремде моң сорнай.
Күпме бала тыуған ҡалаһында,
Мәктәбендә, тыуған иленда,
Моңло итеп йырҙар йырлау түгел,
Һөйләшә алмай туған телендә! —
Ата-әсәһенең өйөндә!
Ишетмәй ул бишек көйөн дә!
Шуға, ят ерҙәрҙә, ятһынмайса,
Йыр йырлаған сиған балаһын,
Иң ҡәҙерле бер туғаным күреп,
Ҡосаҡлап уҡ килде алаһым!

## УТЫҘ ЙӘШ

Утыҙ йәштә ир ҡорона индем,
(Атай булдым күпкә иртәрәк.)
Йәшәй-йәшәй шуны аңланым мин:
Ил өсөн, тим, көслө ир кәрәк.

Йәш саҡтарҙа кәрәк, тинем, бәры
Көрәшергә ҡаты бил генә,
Ләкин ир-егетте йәшәткән бит
Моңло-йырлы, данлы ил генә.

Байрамдарҙа асыл булып ҡына
Артмай икән илдең дандары;
Беләк көсө, йөрәк көсө менән
Ныгый бара тормош һандалы.

Ғәмһеҙ булып йәки ғауға һалып,
Булмай илде хәҙер күтәреп.
Утыҙҙарҙа булһын ир йөрәге
Саҡма ташты ялҡын итерлек!

* * *

Ташлама һин, тауға менеп еткәс,
Таяныр та менгән таяғың. —
Кәрәк булыр таяҡ яңы үрҙә,
Көсһөҙләнһәң, тайһа аяғың.

## ҮҘЕ БЕР ҒҮМЕР

Ауырлыҡты еңер өсөн
Һин һәр саҡта әҙер бул,
Әгәр инде еңеп сыҡһаң,
Үҙе бит бер ғүмер был!

Һөйгәнеңдең тойғоларын
Аңлау — үҙе сер бит ул;
Уны мәкерҙәрҙән һаҡлау —
Үҙе бер ғүмер бит ул.

Үҙең өсөн генә йәшәү —
Үҙ яҙмышыңдан көлөү.
Оҙондан да оҙон ғүмер —
Ғүмерҙәргә ғүмер бирең,
Көрәштә еңә белеү.

## ҠУРАЙ

Диңгеҙ ярын түгел, тауҙар ярын
Төбәк иткән тыуған халҡымды
Нисә тапҡыр ҡосағына алған
Дәүерҙәрҙең һуғыш ялҡыны?!

Шул ялҡындан халҡым иҫән ҡалған,
Иҫән ҡалған моңло йыры ла:
Нисек яңғырай ябай ҡурайында
«Азамат»ы, «Урал», «Һыры» ла...

Тыңлағанда ошо халҡым моңон,
Серле бер көс арбай күңелде.
(Ҡурай моңо минең уйҙарымды,
Хыялымды, ғүмер юлдарымды
Гүзәллеккә әйҙәй түгелме?!)

## ШИҒЫРҘАРЫМ

Яҙған шиғырҙарым бик сибектәр,
Ҡолонсаҡтай ғына кеүектәр;
Күпме моңдар яҡты йондоҙ булып
Күктә балҡый, алыҫ, бейектәр.

Күпме моңдар Аҡбуҙ һыны булып
Мәңгелеккә табан уҡталған,
Шул моңдарҙан күңел шәмдәренә
Күпме мосафирҙар ут алған,
Шиңеп барған гөлдәр һут алған.

Яҙған шиғырҙарым бик сибектәр,
Ә шулай ҙа мин бит ғорурмын,
Сөнки ерҙән йәйәү атлаһам да,
Аҡбуҙ моңон көйләп уҙырмын.

Һәр бер ҡолон Аҡбуҙ була алмаҫ,
Тик тоҡомо уның үлмәһен.
...Мин етәкләп барған ҡолонсаҡтан
Ҡай бер шәп атлылар көлмәһен.
Аҡбуҙ тоҡомдары үлмәһен,
Ижад ялҡындары һүнмәһен!

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

## АЙҺЫЛЫУ ҒАРИФУЛЛИНА

### *I. Юл япрағы*


Беҙ — бөрйәндәр . . . . . . . . . . . 5
Тик яҙмаһаһы һине... . . . . . . . . . 6
Төпкөлдә боҫоп ятһаң... . . . . . . . . 6
Илгә һибәм . . . . . . . . . . . . 7
Күңел китабында шиғырҙарым... . . . . . . 7
Мин бит — Бөрйән ҡыҙы . . . . . . . . 7
Ул уйламай . . . . . . . . . . . . 8
Юл япрағы . . . . . . . . . . . . 8
Ҡайын менән кәкүк . . . . . . . . . 9
Ямғыр күҙе булып алдыма төш... . . . . . 9
Илһам атым теҙгендәрен өҙөп... . . . . . 10
Дуҫыма . . . . . . . . . . . . . 10
Нисек килешһен? . . . . . . . . . . 11
Запай ере . . . . . . . . . . . . 11
Һарына . . . . . . . . . . . . . 12
Туңмаған ер . . . . . . . . . . . 12
Ерҙә сабый таң тыуҙы . . . . . . . . 13
Баш эйәмен . . . . . . . . . . . . 13
Игеҙәктәр . . . . . . . . . . . . 14
Йәйғор таҫмалары ете төҫтә . . . . . . 15
Ҡабул итсе . . . . . . . . . . . . 15
Күңел сафлығы . . . . . . . . . . . 16


### *II. Күгүләндә — тояҡ эҙе...*


Сағылыш . . . . . . . . . . . . . 17
Ҡаҙҙар . . . . . . . . . . . . . 18

Көн яманы китер... 18
Сабырлыҡ 18
Сеүҙ 19
Турғайҙар 20
Ҡарағайға балдаҡ кейҙергәндәр... 20
Ҡояшлы таң — ғүмер дауамым 21
Өләсәйҙәр 21
Ир инем 22
Атайыма 22
Казбекка 23

*III. Ер еләккәйҙәре кеүек мәлем*

Йәшлегем 24
Алангырт та ерҙә... 24
Икмәк, бала! 25
Ғүмер 25
Ҡаран 26
Таба алһаң... 26
Һиндә ҡалам! 27
Ер еләге 27
Ер алмаһы 28
Беҙҙең һөйөү 28
Ҡырыҫ Ай 29
Тик сатнаған көҙгө генә ҡалды 29
Ниңә? 30
Ә мин һөйәм һаман... 30
Бизмән 31
Бала хаҡы 31
Таяу 32
Ҡыҙ күңеле 32
Көҙгө һағыш 33
Ҡараш 33
Юҡ, булалманың 33
Һуңғы ептәр 34
Тик һинең өсөн 34
«Яҙ менән ҡыш һынай бер-берен...» 35
Суҡлы яҙ 35
Гөрләүек 36

ГӨЛНАЗ ҠОТОЕВА

Татлы ғазап 39
Яңырыу 39
Килмәнең... 40

Артымдан күҙ яҙмай... . . . . . . . . . . 40
Өсмөйөш . . . . . . . . . . . . 41
«Был миҙгелең, бәлки, онотолор...» . . . . . . 41
«Мин ҡараға төрөнөп...» . . . . . . . . 42
Күҙгә этюд . . . . . . . . . . . . 42
Нәсихәт . . . . . . . . . . . . 43
Ғүмер . . . . . . . . . . . . 43
«Уян!» — тиеп, зиһенемдә һелкәм...» . . . . . 44
«Үлгәс кенә кеше ҡәҙерлерәк...» . . . . . . 44
Ысынбарлыҡ . . . . . . . . . . . 45
Оҙатыу . . . . . . . . . . . . 46
«Һинең менән минең юлды бәйләү...» . . . . . 46
Төштәр күрһәң... . . . . . . . . . . 47
«Хыянатың тамһа йөрәгемә...» . . . . . . . 47
«Мин онотһам ерҙә бәхет барын...» . . . . . . 47
«Һинең күктән йондоҙ өҙөүеңә...» . . . . . . 48
«Ап-аҡ нурға табан...» . . . . . . . . 48
Илгиҙәр . . . . . . . . . . . . 49
«Борғолана юлдар...» . . . . . . . . . 49
Хистәр көлтәһе . . . . . . . . . . 50
Күкрәнем... . . . . . . . . . . . 50
«Үкенерһең...» . . . . . . . . . . . 51
Саған япрағы . . . . . . . . . . . 51
Минең юлым . . . . . . . . . . . 52
Айстан . . . . . . . . . . . . 52
Ялтлар йәшен . . . . . . . . . . . 53
Аңлайышһыҙ төн . . . . . . . . . . 53
Үпкә . . . . . . . . . . . . . 54
Мин китһәм... . . . . . . . . . . 54
Аҙашҡан йондоҙ . . . . . . . . . . 54
Атайыма . . . . . . . . . . . . 55
«Йәйҙең хушлашыу вальсында...» . . . . . . 55
Мине һатма . . . . . . . . . . . 56
Һуҡырлыҡ . . . . . . . . . . . . 56
«Ҡайғыларҙы муйыл кеүек тирҙең...» . . . . . 57
Юғалтырмын кеүек . . . . . . . . . 57
«Их, уфтанма...» . . . . . . . . . . 58
Мөхәббәт . . . . . . . . . . . . 58
«Ҡарайым да ҡатам күҙҙәреңә...» . . . . . . 59
Тетрәнеү . . . . . . . . . . . . 59
Һағынғанда . . . . . . . . . . . 60
Ҡыш менән хушлашыу . . . . . . . . 60
«Ярылды ла кәсә төшөп...» . . . . . . . 61
Һағышлы миҙгел . . . . . . . . . . 61
«Алыҫҡа китер был көндәр...» . . . . . . . 62

«Эй, ҡыйғас ай, һин — бер генә нөктә...» . . . . 62
«Изгелек тип атылғанда...» . . . . . . . . 63
Һау бул, Ерем, әгәр... . . . . . . . . . 65

## ФӘНДИӘӘ ХАРРАСОВА

«Шарап ҡойҙом һыңар бокалыма...» . . . . . 67
«Яланғас ҡалғандай тәлгәштәр...» . . . . . . 67
«Ваҡыт өнһөҙ, шаһит була алмаç...» . . . . . 68
Төнгө манзара . . . . . . . . . . 69
«Ҡыуып етә алманым һине, донъя...» . . . . 70
Тыуған көн вальсы . . . . . . . . 70
«Алдым һине ысынбарлыҡтан мин...» . . . . 71
«Хушлашҡанда йәйҙәр китергә...» . . . . . 72
«Аҙмы йәндәр, сихырланған кеүек...» . . . . 72
«Тергеҙергә теләп усағымды...» . . . . . . 73
Ултыр әле, әни, яндарыма . . . . . . . 73
«Яҙ шатлығы һине иҫертмәһен...» . . . . . 74
«Телефоным ник бер өндәшһен...» . . . . . 74
«Тулышты ла күңелем мөлдөрәмә...» . . . . 75
«Аяҙ күктә балҡый йылғыр йәйғор...» . . . . 75
«Һағышланма, көйәләнмә...» . . . . . . 76
«Йылмай әле, тынысландыр мине...» . . . . 76
«Ул ҡайҙа, тип таңдан һораным...» . . . . . 77
«Һағыштарым үтте үҙәгемә...» . . . . . . 77
«Сәләм әйтегеҙ, тим, елдәргә...» . . . . . 78
Уйланыу . . . . . . . . . . . . 78
«Мин бит бары һинең өсөн генә...» . . . . . 80
«Хәтеремдең тынмаç елдәре...» . . . . . 80
«Йондоҙ һыҙып үтте офоғомдо...» . . . . . 81
«Күргәнем юҡ сабыр кешеләрҙең...» . . . . . 81
«Иҙерәп йоҡлайһың һин бишегеңдә...» . . . . 82
Ләйсән йыры . . . . . . . . . . 83
«Нисек бармын, шулай ҡабул ҡыл һин...» . . . 83
«Дауыл булып керһәм күңелеңә...» . . . . . 84
«Йәшеллеккә сумған иркен туғай...» . . . . 85
«Ҡояшым бул атҡан таңдарымда...» . . . . . 85
«Аҡ пароход елә алға...» . . . . . . . 86
«Үткәндәргә килмәй ҡалдыраһым...» . . . . . 86
«Бар тәбиғәт тын йоҡоға талған...» . . . . . 87
«Хушлаштым мин, беҙҙең мөхәббәтте...» . . . . 87
«Ҡайындарҙың башын әйҙерткән дә...» . . . . 87
«Атмағыҙсы күңелемә ауыр һүҙҙәр...» . . . . 88
«Бурай-бурай яуа ап-аҡ ҡарҙар...» . . . . . 88
«Нисек йәшәһәң дә ғүмер үтә...» . . . . . 89

Ҡайтыу . . . . . . . . . . . . . . 90
Етегән . . . . . . . . . . . . . . 90
«Өндәш миңә, өҙөлөп һағынғанда...» . . . . . 91
«Һин көсләһең, тимә...» . . . . . . . . . . 92
«Тәҙрәмә кис кемдер килгән, сиртә тиһәм...» . . 92
«Һуҡмаҡтарға беҙҙең ятҡан туҙан...» . . . . . 93
Лирик хат . . . . . . . . . . . . 93
«Кинәт кенә һалҡын елдәр иҫте...» . . . . . . 94
«Талдар көҙгө-күлгә ҡарайҙар...» . . . . . . 95
«Битем ҡуям йылы устарыңа...» . . . . . . . 95
Рәхмәтлемен яҙмыш тигәнемә . . . . . . . 96

## РАМАЙ ҠАҺИР

«Минең йәшәр дарманым бар...» . . . . . . . 99
Аманат . . . . . . . . . . . . . 99
Йән дуҫым . . . . . . . . . . . . 101
Һүнмәҫ, атай, һинең моңдарың . . . . . . 101
Дуҫтарым . . . . . . . . . . . . 102
Төш . . . . . . . . . . . . . . 103
«Бар донъяны аҡҡа күмеп...» . . . . . . . 103
Иртә... тиеп бышылдама... . . . . . . . . 104
«Һиҙәһеңме, йылы яҙым килә...» . . . . . . 105
Яҙҙы көтәм . . . . . . . . . . . . 105
Сирендәр . . . . . . . . . . . . 106
Бөрләгәнем . . . . . . . . . . . . 106
Йәйге урман . . . . . . . . . . . 107
Алтын тамыр . . . . . . . . . . . 107
Ишмәкәйем . . . . . . . . . . . . 108
Мулдаҡай . . . . . . . . . . . . 108
Һөйөүҙәрем һиңә мәңгелек . . . . . . . 109
Йәршәл . . . . . . . . . . . . . 110
Ҡаршы алсы мине, Ҡорама... . . . . . . . 110
Көмөш туй . . . . . . . . . . . . 111
Улым тыуҙы . . . . . . . . . . . . 112
Иламайым . . . . . . . . . . . . 113
«Был яҡтарҙа ҡурай үҫмәй икән...» . . . . . 114
«Ауылға илткән ат юлын...» . . . . . . . 114
Һары майҙа — көртмәле . . . . . . . . . 115
Бәлән бәлеше . . . . . . . . . . . 116
Һиңә ҡайттым . . . . . . . . . . . 116
«Йәшеллеккә сумған ауыл...» . . . . . . . 117
Баҫмаҡ . . . . . . . . . . . . . 118
«Төштәремдә бөгөп туғай күрҙем...» . . . . . 118
Миҙгелдәр . . . . . . . . . . . . 119

Яҙмыш шулдыр . . . . . . . . . . . . 120
Рәхмәт һеҙгә! . . . . . . . . . . . 120
Һөйөүҙәрең — әсе балаң . . . . . . . . 121
Иблей буйҙарына ҡайтайым . . . . . . . 122

## ДИНӘ ТАЛХИНА

«Башҡортомдоң кейеме...» . . . . . . . . . 125
Минең телем . . . . . . . . . . . . 125
Минең илем . . . . . . . . . . . . 126
Минең халҡым . . . . . . . . . . . 126
«Теле юҡтың иле юҡ» тиҙәр...» . . . . . . 127
«Сабырлыҡтың төбө һары алтын» тиҙәр...» . . 127
Башҡорт һылыуҙарына . . . . . . . . . 127
Бейейек әле парлап! . . . . . . . . . 128
Һыу юлы . . . . . . . . . . . . . 129
Һине көтәм . . . . . . . . . . . . 129
Ғалир тәңкә толомомда . . . . . . . . 130
Сулпыларым семәр-семәр . . . . . . . . 130
Ниңә мин ҡурай түгел? . . . . . . . . 131
Өҙөлә үҙәк, өҙөлә . . . . . . . . . 132
Төштәремдә атта елдем . . . . . . . . 132
Ҡушъяулыҡ . . . . . . . . . . . . 133
Йырҙарым минең ҡоштарҙан . . . . . . . 133
Күгүлән . . . . . . . . . . . . . 134
Мәктәбем ихатаһы * . . . . . . . . . 135
Ирем миңә йәр булмаһа...* . . . . . . . 136
Көҙгө япраҡ . . . . . . . . . . . 136
Эргәмдә булһаң икән! * . . . . . . . . 137
Ҡараштарың . . . . . . . . . . . . 138
Икебеҙгә зәңгәр бер күк . . . . . . . . 138
Төштәреңә һинең керәм * . . . . . . . 139
Ҡоралай . . . . . . . . . . . . . 139
Әсәйемә . . . . . . . . . . . . . 140
Туй йыры . . . . . . . . . . . . 141
Йәшел яулыҡ * . . . . . . . . . . 142
Тағы йәйҙәр етте * . . . . . . . . . 143
Һағынырһың әле, һағынырһың * . . . . . . 144
Сирендәр сәскә атҡан * . . . . . . . . 144
Арғаяш күлдәре * . . . . . . . . . . 145
«Мөлдөрәмә тулы күңелемә...» . . . . . . 146
«Уйҙарымды минең һорама...» . . . . . . 147
Мөғжизәнең мөғжизәһе . . . . . . . . 147
Йөрәккә ҡан һауа . . . . . . . . . 148
Ғүмер . . . . . . . . . . . . . . 148

Фәғилә апайға . . . . . . . . . . . . . 149
«Йәшел генә туғай — йәшел kеләм...» . . . 149
Мөлдөрәмә тулы күңелең . . . . . . . . 150
Ҡайынҡай миҙгелдәре . . . . . . . . . 150
Күңелдәрем нескәргән мәл . . . . . . . 151
Июнь . . . . . . . . . . . . . . 152
«Бәхеткәйем...» . . . . . . . . . . . 152
«Әбейҙәр сыуағы...» . . . . . . . . . 153
«Һин минһеҙ...» . . . . . . . . . . . 153
«Хистәреңде нисек кенә...» . . . . . . . 153
«Башҡаға бары бер күҙ аттың...» . . . . . 153
«Күҙҙәр төбәлгән күҙҙәргә...» . . . . . . 153
Йөрәгеңә мине ҡыҫып... . . . . . . . . 154
Һөйләшеү . . . . . . . . . . . . . 154

## ҒӘЛИӘ КӘЛИМУЛЛИНА

«Тартылам да торам тауҙарыма...» . . . . . . 157
Бәхет бар ул! . . . . . . . . . . . 158
«Әйткән һүҙем осшап китһә инде...» . . . . 158
Илаһи мәл... . . . . . . . . . . . . 159
«Ялтлап торған бер шиғырым тыуҙы...» . . . 159
«Гитараңдың ҡылҡайҙарын сиртеп...» . . . . 159
«Уйҙар утрауында нисәнсе көн...» . . . . . 160
Ай, буталды донъя... . . . . . . . . . 160
Сәхнәләрҙә булмыштарым бүтән... . . . . . 161
Һеңлемә . . . . . . . . . . . . . 162
Гармун моңо . . . . . . . . . . . 163
«Минең күңел — әле асылмаған...» . . . . . 163
«Мөхәббәт шишмәләренән...» . . . . . . 164
Нишләр инек? . . . . . . . . . . . 164
«Көтмә мине», — тинең...» . . . . . . . 165
«Мине берүк эштәреңдең...» . . . . . . . 166
Бергә-бергә . . . . . . . . . . . . 166
«Һин кемдәрҙән мине көнләмәнең...» . . . . 167
«Теләйһеңме?..» . . . . . . . . . . . 168
«Мин кемделер көткән кеүек инем...» . . . . 168
Беҙ яңынан осрашырға тейеш... . . . . . . 169
Бәхет көйөнә . . . . . . . . . . . 169
Һинән яҙғас... . . . . . . . . . . . 170
«Йәп-йәш кенә...» . . . . . . . . . . 171
Хәтереңдәме? . . . . . . . . . . . 172
«Йәй еңгәйем, әй, әрһеҙ ҙә инде...» . . . . 172
Берсә ямғыр, берсә ҡар бураны... . . . . . 173

Ҡоштары ла быйыл иртә китте... . . . . . . 174
Ике йыр . . . . . . . . . . . . . . 175
Күрсе, йәнем... . . . . . . . . . . . . 177
«Һалҡынлыҡтан күңел биҙрәп бөткән...» . . . . 177
Әсирлек . . . . . . . . . . . . . . 178
«Ҡыйыҡтарҙан тәүге тамсы тама...» . . . . . 179
«Хыялый күҙ әле һоғаланып...» . . . . . . . 179
«Бынау миләш тос-тос тәлгәштәрен...» . . . . 180
Миләш сере . . . . . . . . . . . . . 180
«Йәшәгеләр килмәй...» . . . . . . . . . 181
«Ут эсендә йәшәп өйрәнгәнмен...» . . . . . 182

ЗӨҺРӘ АЛТЫНБАЕВА

Ашыҡтыммы, әллә һуңланым?! . . . . . . . 185
Һин килгәнһең... . . . . . . . . . . . . 185
Балан . . . . . . . . . . . . . . 186
Мөхәббәт . . . . . . . . . . . . . 186
Алып ҡайт һин мине йәшлегемә . . . . . . 187
Һин миҙгелдәр төҫлө . . . . . . . . . . 188
Ҡайҙа? . . . . . . . . . . . . . . 188
Минең йырым . . . . . . . . . . . . 189
Сихри көс . . . . . . . . . . . . . 190
Һөйөү һағышы . . . . . . . . . . . . 190
Һуңғы йондоҙ . . . . . . . . . . . . 191
Ауыр... . . . . . . . . . . . . . . 192
Зәңгәр донъя . . . . . . . . . . . . 192
Хәтеремдә... . . . . . . . . . . . . 192
Түп-түңәрәк донъяң... . . . . . . . . . 193
Ташлап китмә мине, мөхәббәт . . . . . . 194
Йондоҙ атылғанда . . . . . . . . . . 195
Был донъяның һинһеҙ юҡ йәме . . . . . . 196
Күҙгә серенада . . . . . . . . . . . 196
Һин күҙҙәрҙе яратмайым, тиһең . . . . . . 197
Аҡ бурандар . . . . . . . . . . . . 198
Ялағай . . . . . . . . . . . . . . 198
Килем һуға ҡәйнәм . . . . . . . . . . 199
Килен болот төшәм далаға . . . . . . . . 200
Һабантурғай йыры . . . . . . . . . . . 201
Килен төшкәндә . . . . . . . . . . . 201
Һөйөләүҙән кем туйған?! . . . . . . . . 202
Гүзәллек . . . . . . . . . . . . . . 203
Йоҡлай балам . . . . . . . . . . . . 203
Улыма . . . . . . . . . . . . . . 204
Баҫыуҙарым . . . . . . . . . . . . . 204

Икмәк еҫе . . . . . . . . . . . . . 205
Ялған әсәгә . . . . . . . . . . . . . 205
Яңғыҙлыҡ . . . . . . . . . . . . . 206
Илаҡ күҙ . . . . . . . . . . . . . 207
Күңелемдә яҙғы иртәләр . . . . . . . . . 208
Ҡоштар ҡайта . . . . . . . . . . . . 208
Миләш ямғыры . . . . . . . . . . . . 209
Ҡарашыңда ҡарҙар ята, тиһең . . . . . . . 209
Һинең вәғәҙәләрең . . . . . . . . . . . 210
Бесән сапҡанда . . . . . . . . . . . . 210
«Тағы ҡайтып бер ураным...» . . . . . . . . 211
«Болон-туғайҙарға табан атҡас...» . . . . . . . 212
Ҡурҡма . . . . . . . . . . . . . 212
Ағиҙелдә тағы боҙ китә . . . . . . . . . 213
Яҙ һулышы . . . . . . . . . . . . . 213
Төнгө тынлыҡ . . . . . . . . . . . . 214

## ФЛҮЗӘ МЫРҘАБАЕВА

Саялыҡтар биктә... . . . . . . . . . . . 217
Йәнем ярып бирер саҡтарым . . . . . . . . 218
Әрнеүҙәрең алам үҙемә . . . . . . . . . 218
Юҡҡа ҡурҡтың . . . . . . . . . . . . 219
Ҡәнәферҙәр асылырҙармы икән? . . . . . . . 220
Йөрәгемдә уңалмаҫлыҡ ярам . . . . . . . . 220
Йәшәткән дә өмөт . . . . . . . . . . . 221
Ашыҡтырма . . . . . . . . . . . . . 222
Осрашырға яҙһын тағын бер . . . . . . . . 222
Һин түгелме? . . . . . . . . . . . . 223
«Йүкә сәскәләре ҡайһылай суҡ...» . . . . . . . 224
«Эҫендермә үҙеңә, эҫендермә...» . . . . . . . 224
«Ҡуйындарым һалҡын, хистәр ялҡын...» . . . . . 225
Бер бәхеттең ике ярсығы . . . . . . . . . 226
«Танһыҡтарым ҡанмаҫ йәй йомдәрен...» . . . . . 226
Яҙғы кистә . . . . . . . . . . . . . 227
Һағыныуҙарым килтергән . . . . . . . . . 228
Йәй ҙә төндәр оҙон икән . . . . . . . . . 228
Үтмә, ваҡыт . . . . . . . . . . . . 229
Осрашыуҙар танһыҡлар ҙа күңел . . . . . . . 230
Ҡыйыр-ҡыймаҫ... . . . . . . . . . . . 231
Яңғыҙ моң . . . . . . . . . . . . . 231
«Тәбиғәткә күҙ һулышы ҡунған...» . . . . . . . 232
Йәшәткән дә һин булдың . . . . . . . . . 233
«Бер күрҙем дә һине, онотолдом...» . . . . . . 233
Мөхәббәткә табынып йәшәйем . . . . . . . . 234

«Һинең күңел, беләм, һиҙгер инде...» . . . . . 234
Килерһең — һуң булыр . . . . . . . . . 235
Үткәндәрҙе онотола, тиҙәр... . . . . . . 236
Үҙем барам... . . . . . . . . . . 237
Баҫалҡылыҡ . . . . . . . . . . 237
«Киптерергә атай бесән йәйгән...» . . . . . 238
«Күпме генә ярһып болармаһын...» . . . . . 239
Ожмах менән тамуҡ . . . . . . . . 239
Хоҙай, ахыры, төбәп яратҡандыр . . . . . 240
Яҙмыш шаяртыуы . . . . . . . . 241
Һин ҡалдырҙың . . . . . . . . . 241
Ҡаҙ ҡанаты ҡауырый-ҡауырый . . . . . 242
Нисек кенә түҙә шыршылар . . . . . . 243
Сасҡау ҡышта йөрәккенәм ярһый . . . . . 244

## ИҘЕЛ ХӘЛИМОВ

Таң . . . . . . . . . . . . . . 247
Демократия . . . . . . . . . . . 247
Саф көс . . . . . . . . . . . . 248
Монолог . . . . . . . . . . . . 249
Аҡбуҙат . . . . . . . . . . . . 250
Күңел шәмдәрем . . . . . . . . . 251
«Ас әле һин миңә, ас тәҙрәңде...» . . . . . 251
Һинең йырың . . . . . . . . . . 252
Ҡыңғырауҙар ҡалды . . . . . . . . 252
Һөйөүем — дала гөлө . . . . . . . 253
Ниңә иҫте елдәр кире яҡтан?.. . . . . . 253
Шул микән ни йылдар үҙгәреүе . . . . . 254
«Уйламаным һүнгән хистәремдең...» . . . . 254
Яҙғы урман . . . . . . . . . . 255
Һаубуллашып ҡала аҡ ҡайындар . . . . . 255
Һөйөүҙәрем-һағыштарым . . . . . . . 256
Көтөү . . . . . . . . . . . . 256
Һыуға бара һылыу ҡыҙҙар . . . . . . 256
Тыуған яҡты һағынғанда . . . . . . 257
Аманат . . . . . . . . . . . . 257
Төнгө моң . . . . . . . . . . . 258
Утыҙ йәш . . . . . . . . . . . 259
«Ташлама һин, тауға менеп еткәс...» . . . . 259
Үҙе бер ғүмер . . . . . . . . . . 260
Ҡурай . . . . . . . . . . . . 260
Шиғырҙарым . . . . . . . . . . 261

Литературно-художественное издание

Гарифуллина А., Котоева Г., Харрасова Ф.

БЕЛОЕ ПЕРО

*(стихи)*

*(на башкирском языке)*

Баш мөхәррир *Ҡәҙим Аралбаев*
Редакция мөдире *Сабир Шәрипов*
Мөхәррире *Мәһиҙә Игебаева*
Биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Венера Абдрахманова*
Корректорҙары *Зөлфиә Даянова, Нажиә Һаҙыева*

ИБ № 5314

Йыйырға бирелде 13.03.95. Баҫырға ҡул ҡуйылды 22.06.95. Ҡағыҙ форматы 70×90$^{1}/_{32}$. Тип ҡағыҙы № 1. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 9,94. Шартлы буяу отт. 10,06. Иҫәп-баҫма таб. 9,53. Тиражы 2500 дана. Заказ № 26. Хаҡы ирекле.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а. Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.